ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25-31 июль (майай) 2015

№30 (656)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклә

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Һеҙҙең арала 2015 йылдың икенсе ярты йыллығына "Киске Өфө" (индексы: 50665) гәзитенә яҙылырға онотҡандар барҙыр, моғайын. Хәлде төҙәтергә мөмкин: августың 17-һенә тиклем яҙылып, яратҡан баҫмағыҙҙы сентябрҙән уҡый башлай алаһығыҙ. Гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәрһәгеҙ, кемдәргәлер бүләккә матур китаптар ебәреп ҡыуандырыу ниәтебеҙ ҙә бар. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!**

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Сараһыҙлыҡ йөрөтәме ситтә?



6

Шуҡ баланы тыймағыҙ,

йәки Ауылда спортсылар тәрбиәләү сере тураһында



8-9

Һүрәт төшөрә белмәгән дә...

һүрәт төшөрөргә өйрәнә бында



11

Халыҡ уҡытыусыһы



13

ТВ-программа 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Йәй - эш мәле генә түгел, матур байрамдар осоро ла. Әммә байрам итеүҙе хупламай, әйепләүселәр ҙә бар арабыҙҙа. Ә һеҙ был турала ни уйлайһығыҙ, байрамдарҙа ҡатнашаһығыҙмы?

*Эльза САТТАРОВА, Ҡырмыҫҡалы районы "Трудовая слава" гәзите мөхәррире:* Минеңсә, эш менән байрам бер-береһенә ҡамасаулыҡ итмәй. Эшләгән кеше генә матур итеп байрам да ҡора белә, сөнки байрам - ул башҡарған эштәрҙе барлау, йомғаҡ яһау һәм киләсәккә бурыстар билдәләүҙең бер төрө. Башҡорт халҡының барлыҡ байрамдары ла уның хеҙмәт менән айырылғыһыҙ бәйләнгәнен раҫлап килә. Был һүҙҙәремә милли байрамдарыбыҙҙың береһе - һабантуй ҙа яҡшы дәлил. Яҙғы һабан, сәсеү эштәренән һуң бесән алдынан халыҡ бил яҙып, бер гөрләп байрам итеп ала, хеҙмәт алдынғыларын хөрмәтләй, халыҡ уйындары, спорт ярыштарында - таҫыллығын, йыр-бейеүҙә талантын күрһәтә. Бесән, тигәндән, ауыл хужалығы эшсәндәренең ошо мөһим йәйге эштәрҙең береһен башларға тип ең һыҙғанып торған мәлдәрҙә Ҡырмыҫҡалы районының гүзәл тәбиғәтле Бишауыл-Уңғар ауылында "Сыңла, салғы!" тигән республика бесәнселәр фольклор байрамы булып үтте. Әмәлгә ҡалғандай, бесәнселәр байрамына Мәскәүҙән һәм Ҡырғыҙстандан ШОС һәм БРИКС эшендә ҡатнашырға килгән делегаттар - абруйлы ҡунаҡтар ҙа килеп ҡушылды. Улар урындағы халыҡтың хеҙмәт байрамын хайран ҡалып тамаша ҡылды. Бигерәк тә салғыларын сыңлатып янып, ҡайырып бесән саба башлаған оҫталар янында тамашасылар күп булды. Һәр береһенең дә ҡулына салғы тотоп, айырым бер таҫыллыҡ талап иткән ошо эште башҡарып ҡарағыһы килде, ләкин салғы уңған ҡулдарҙа ғына уйнай шул: үләнде ҡалдырмай, таҡыр итеп сабыу өсөн оҫталыҡ та, көс тә, тәжрибә лә талап итеүе лә икәнен үҙ елкәһендә татыны тамаша ҡылыусылар. Байрам программаһы ифрат бай ине. Бесәнселәр конкурсы тамамланыуға, милли ашһыу әҙерләүселәр ҡунаҡтарҙы "Урман ашы" һыйына саҡырҙы. Ашнаҡсылар ярышында Күгәрсендән Руслан Абдуллин, Благовещендан Любовь Шабаева һәм Краснокаманан Айҙар Моҡасимов призлы урындар яуланы. Ул арала халыҡ табиптары дарыу үләндәренең шифаһы хаҡында һөйләп, йыйылған халыҡты үлән сәйе, хуш еҫле бал менән һыйланы. Сәскәләрҙән таж үреүселәр ҙә ошо рәттән урын алды. Был конкурста Күгәрсен районынан Зифа Буранбаева еңеүсе булды. Тағы ла арыраҡ тал сыбыҡтарынан ситән, кәрзин, башҡа кәрәк-яраҡ үреүсе оҫталар үҙ һөнәрен күрһәтә. Конкурстарҙа ҡатнашыусы хужалыҡтар һәр береһе үҙ ҡыуышын ҡорған, уның янында ҡул эштәре оҫталары республика халыҡтарының боронғо милли-мәҙәни кәсеп өлгөләренән күргәҙмә асып ебәргән. Ҡыҫҡаһы, быйыл икенсе тапҡыр уҙғарылыусы был байрам ысын мәғәнәһендә республикабыҙҙа йәшәүсе төрлө милләт халыҡтарының көнкүреше, мәҙәниәте һәм ғөрөф-ғәҙәттәренең күргәҙмә-энциклопедияһына әүерелде. Баяғы әйткәнемсә, беҙҙең халыҡ эшләй ҙә, матур итеп байрам да итә белә. Ә инде сәләмәт, татыу, уңған халыҡ өсөн эш - үҙе бер байрам ғына.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ШАҒИР ҺҮҘЕ




## МИЛЛӘТЕМ

***Милләтем!
Бишегендә Ерҙе тибрәлтер,
Ғәмлеләрҙең йәнен иңрәтер,
Ғәмһеҙҙәрҙең йәнен көйрәтер,
Көйләгәндә тарих һөйләтер,
Сабырлыҡҡа йәнде өйрәтер
Моңдарың бар һинең, милләтем!***

***Милләтем!
Толстой әйткән дә һуң нимә тип?
Геродотлыҡ аңҡый һинән, тип.
Тарих арғымағын тирләтер
Ҡиммәттәрҙән ҡиммәт һиммәтең.
Тарихтарҙа күпме имгәтеп
Ҡуйһалар ҙа, барһың, милләтем!***

***Милләтем!
Күңелең аҡ, юҡ һис негатив,-
Ихласлыҡта һин тик фанатик.
"Урал" йыры - һинең лейтмотив,
Уралтауың - үҙе логотип.
Тик бер уйлы булһа өммәтең,
Тоҡос булмаҫ ине дәүләтең.***

***Милләтем!
Йөрәгең дә өнгә типә-тиң,
"Аллаһ" тиеп кенә тибә тик.
Көйләнгән ул ошо көйгә тик,
Көйләнгән ул ошо өнгә тик.
Йәшәмәйһең, тимәк, тикмә-тик,
Хоҙайға һин кәрәк, милләтем!***

***Милләтем!
Башҡорт булыуҙарым - йәннәтем,
Бер көн йәшәүҙәрем меңгә тиң.
Киләсәктә урын һиңә тип
Әҙерләйем, ғәзиз милләтем,
Бәхет толпарҙарын тиҙләтеп,
Йыһан ҡапҡаларын киңәйтеп.***

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ТИРӘ-ЯҠ МӨХИТТЕ...

## үҙ йортобоҙ кеүек ҡарайыҡ!

**Фәрхәнә СӘЛИМЙӘНОВА, Белорет районының Асы ауыл биләмәһе башлығы:** Илебеҙ һәм милләтебеҙ өсөн еңел булмаған һәр осорҙа ла халҡыбыҙ түҙемлеге менән алдырған. Ул һәр ваҡыт түҙгән, түҙгәнгә ҡасан да түш әләгерен белгән. Бөгөн дә башҡорт халҡына түҙемлек, тырышлыҡ теләйем. Иртәгәге көн ниндәй үҙгәрештәр алып килерен белмәһәк тә, донъя көтөргә тырышып торһаң, барыбер ниндәйҙер ярҙам алаһың, барыбер ниндәйҙер еңеллек килә ул. Беҙҙең Асы ауыл биләмәһенә ҡараған биш ауылда ла шундай егәрле халыҡ йәшәй, һәр кем үҙ йүнен үҙе күреп, аҡса табырға тырышып тора. Халыҡтың күпмеһеләр санаторийҙа эшләй, ирҙәр Себерҙә вахталы эштә мәшғүл, башлыса ауылда күпләп мал-тыуар аҫрап, бал ҡорто үрсетеп донъя көтөүселәр йәшәй. Асы, Бриш һәм Бриштамаҡ ауылдарында халыҡ һаны арта бара, йәштәрҙең ауылдарҙа төпләнеүе ҡыуандыра. Быйыл Асы мәктәбенә беренсе синыфҡа 33 бала киләсәк. Был бик ҡыуаныслы хәл бит инде ул. Уларҙың бюджет өлкәһендә эшләгәндәренә төрлө социаль программалар, дәүләт тарафынан ҡаралған субсидияларға ярашлы ярҙам күрһәтелә. Халыҡ менән тығыҙ бәйләнештә эшләргә, ниндәй мөмкинлектәр тыуҙырылыуын аңлатырға тырышабыҙ.

Асы ауыл биләмәһендә йәшәгән 2152 кешегә ни бары дүрт кенә уңышһыҙ ғаилә бар. Улар менән айырым эш алып барыла, мәктәп һәм дауахана хеҙмәткәрҙәре, ауыл ағинәйҙәре был ғаиләләр менән кәңәш-төңәш, өгөт-нәсихәт, ярҙам йәһәтенән бик әүҙем эшләй. Ғөмүмән, ауылдар буйлап сыҡһаң, халыҡтың үҙ йорт-ҡураһын, урамын ниндәй тәртиптә тотоуына, һәр нәмәнең үҙ урынында, бөхтә һәм төҙөк булыуына һоҡланып туя алмайһың. Халҡыбыҙ үҙенең шәхси территорияһына ғына түгел, дөйөм тирә-яҡҡа, хозур тәбиғәтебеҙгә ҡарата ла һәр саҡ шундай һаҡсыл мөнәсәбәттә булһын ине. Был бит илһөйәрлектең бер сағылышы. Сөнки Ватаныңды һаҡлау - ул ҡулыңа ҡорал тотоп, ил сигендә һаҡта тороу ғына түгел, ә йәшәгән ереңдә кәрәккән-кәрәкмәгәнгә ағасын ҡырҡып, ҡый ташлап, һыуын бысратып, тәбиғәтебеҙҙе тәләфләп ҡуйыуҙан ситен булыу ҙа ул. Тыуған еребеҙ, уның тәбиғәте күптәрҙең күҙен ҡыҙҙырырлыҡ хозур, иҫ киткес матур, шуның ҡәҙерен беләйек.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Йәй - эш мәле генә түгел, матур байрамдар осоро ла. Әммә байрам итеүҙе хупламай, гәйепләүселәр ҙә бар арабыҙҙа. Ә һеҙ был турала ни уйлайһығыҙ, байрамдарҙа ҡатнашаһығыҙмы?



**(Башы 1-се биттә).**

***Миңзифа ИШЕМҒОЛОВА, Хәйбулла районы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе:*** Ауылда, үҙегеҙ беләһегеҙ, эш тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел. Ләкин, әгәр ҙә халыҡ дәртләнеп, хеҙмәттән йәм һәм тәм табып йәшәһен, тиһәк, уны байрамға әүерелдереүҙең ҙур мөмкинлектәргә эйә булыуын аңланыҡ беҙ. Һәм шулай эшләнек тә. Һәр урында ла сәләмәт йәшәү рәүеше сараларын башлап йөрөүсе, ауылдаштарын әҙәп-әхлаҡ тәрбиә өлгөһөнә әйҙәп, иман нуры таратып йәшәүсе ағинәйҙәребеҙ бар бит хәҙер беҙҙең. Тотош ауыл халыҡтарын йәлеп итә алған матур йөкмәткеле байрамдарыбыҙҙы тап улар башлап ебәрҙе лә инде. Тәүҙә һәр ауыл үҙенә яраҡлы эш төрөн һайлап алды. Мәҫәлән, Мәмбәт ауылы ҡатын-ҡыҙҙары һарыҡ ҡырҡыу өмәһен гөрләтеп байрамға әйләндерҙе. Йәш килендәрҙең ҡулдарына күҙ эйәрмәй! Эш аҙағында иң оҫта ҡырҡыусыларҙы билдәләнек. Элек халҡыбыҙҙа ошо эш төрөнә бәйле булған йолаларҙы иҫкә төшөрөп, һарыҡ йөнөн бүләк итеп, уңғандарҙың ҡырҡҡыларына урап биреп ҡайтарҙылар. Ошонда уҡ яҙғы ябаға йөнөн ҡайнатып, күбеп эшләнгән түшәк-юрғандарҙан, башҡа төр ҡул эштәренән күргәҙмә лә ойошторолғайны.

Яңы Ергәндәге Балсыҡ байрамы ла үҙенсәлекле матур тамаша булып хәтерҙә ҡалды. Был ауылда балсыҡ ятҡылығы бар: ҡыҙылы, ағы, күге...Балсыҡ сығарған ергә аттар егеп, арбаларға ултырып, халыҡ ансамбленә ҡушылып, йырлай-йырлай барып төштөк. Өмә башланды: кемеһе балсыҡ баҫа, кемеһе кирбес һуға, мейес сығара, балсыҡтан һындар әүәләй...Ҡыҙҙар иһә күк балсыҡтан биттәренә косметик маска һылап алғандар.

Һаҡмар Наҙарғолдары тотош ауылдары менән Ҡорот байрамы үткәрҙе. Ҡунаҡтарҙы байрам барған йорт ҡапҡаһы янында ҙур итеп йомарланған "Ҡорот батшабикәһе" ҡаршыланы. Арыраҡ оло ҡаҙандарҙа, тәмле булһын өсөн сейә, муйыл ҡушып, эркет ҡайнаталар. Шулай итеп, халыҡ күңеле фантазияға бик бай булып сыҡты: байрам артынан байрам китте беҙҙә. Юлбарыҫта - ҡурмас, талҡан байрамы үтһә, Сәғиттә - самауыр, Аҡташта - "Һыйлы көнөң - һыйырҙа" байрамына тамаша ҡылдыҡ. Бынан тыш, Туратта - ситән байрамы, Таштуғайҙа - ит, Подольскиҙа - яулыҡ, Аҡназарҙа - ашҡабаҡ, Быҙаулыҡта - яҫтыҡ, Байғусҡарҙа - кейеҙ, Степнойҙа картуф байрамдары гөрләп үтте. Ошоға тиклем булмаған бындай яңы байрамдарҙа халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижады өлгөләре: таҡмаҡ, мәҡәл-әйтемдәр, йыр-бейеү, уйын-көлкө тирә-яҡҡа яңғырап торҙо. Бына бит, бер атыуҙа - ике ҡуян, тигәндәй, бергәләшеп, эш тә эшләнә, халыҡ кинәнеп ял да итә. Шунан, хеҙмәт менән байрам бер-береһенә ҡамасаулай, тип әйтергә нисек тел әйләнер? Ә бындай хеҙмәт байрамдарының йәш быуынға тәрбиәүи әһәмиәте генә ни тора!

***Әлиә УРАЗБАХТИНА, Дәүләкән район гәзите хәбәрсеһе:*** Ошо көндәрҙә районыбыҙҙың Яппар ауылында Ҡырҡ өйлө мең ырыуы Дим башҡорттарының оло йыйыны булып үтте. Ҡайһы берәүҙәр белмәйенсәрәк уны "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" тип тә, шәжәрә байрамы йәки һабантуй тип тә фаразланы, ләкин был үҙенә күрә генә маҡсатлы программаһы, хәл итәһе проблемаларҙы ла сағылдырған Дәүләкән, Шишмә, Әлшәй райондарында йәшәүсе Ҡырҡ өйлө мең башҡорттарының йыйыны тип нарыҡланды. Ошо ваҡиға айҡанлы Дәүләкән типографияһында Яппар ауылы тарихы буйынса китап сығарылды, авторы - Ағиҙел ҡалаһынан Башҡортостандың мәғариф отличнигы Рәүеф Мөхәмәтғәлин. Яппарҙар төрлө ерҙәрҙән йыйыласаҡ яҡташтарын лайыҡлы ҡаршы алыуға ныҡлап әҙерләнгәйне. Сараны ойоштороу эштәре менән ошо ауылда йәшәүсе абруйлы уҙаман - Филүс Хәлиуллин йүгереп йөрөгән. Уның изге уйын фекерҙәштәре дәррәү күтәреп ала. Шуға күрә лә ошо тәүге йыйында уны ырыу башлығы итеп һайлап ҡуялар. Йыйындың маҡсаты, бурыстары һәм киләсәккә эш йүнәлештәре ауылды һаҡлап ҡалыуға, уны төҙөкләндереүгә, ауыл хужалығы предприятиелары асыу, ауыл халҡын эш урындары менән тәьмин итеүгә йүнәлдерелгәйне. "Элек Яппар "Дим", унан "Яңы таң" тип исемләнгән алдынғы хужалыҡтарҙың береһе ине. Халыҡ йәшелсәселек, йылҡысылыҡ менән шөғөлләнде, иген бик уңа торғайны. Колхозыбыҙҙың үҙ ҡаҙаныштары менән ВДНХ-ла ҡатнашҡан саҡтары ла булды. Сөгөлдөр баҫыуҙарын иңләп сыҡҡыһыҙ ине. Хатта ҡарбуз, ҡауынына тиклем үҫтерҙеләр. Халыҡ йырлап эшкә барыр, йырлап эштән ҡайтыр ине,"- тип хәтерләй ул йылдарҙағы хеҙмәт энтузиазмын яҙыусы, ошо ауыл ҡыҙы Рәсимә апай Ураҡсина.

Оло йыйын проблемаларҙы барлап, бурыстар билдәләү менән генә сикләнмәне. Халыҡ байрамға матур итеп әҙерләнгәйне: сәхнәлә бер-бер артлы халыҡ таланттары сығыш яһаны; яҡын-тирә райондарҙан килгән юртаҡтар бәйгегә уҡталды; уғаса булмай, майҙанға батырҙар бил һынашырға сыҡты. Һәр хәлдә, йыйын менән байрамса уйнап-көлөп, күңел асыу бер-береһен тулыландырып, сараға йәм өҫтәп, уға тантаналы байрам төҫө бирҙе. Бының менән мин, байрамдар тормошобоҙҙағы етди мәсьәләләрҙе хәл итеүгә ҡамасауламай, киреһенсә, уға булышлыҡ итә, тип әйтмәксемен. Байрамдарҙан халыҡ эшкә дәрт, илһам ала бит.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов Өфө ҡалаһы хакимиәтендә ултырышта телмәр тотоп, ШОС һәм БРИКС саммиттарын ойоштороу эшенә йомғаҡ яһаны. Рөстәм Хәмитов белдереүенсә, кешегә эш, эш хаҡы, торлаҡ ҡына түгел, ҡалала ял итеү өсөн уңайлы майҙансыҡтар ҙа кәрәк. Бының миҫалы булып "Ете ҡыҙ" фонтаны тора, ул бөгөн ҡала халҡының һәм ҡунаҡтарҙың яратҡан урынына әүерелде. "Хәл ителәһе мәсьәләләр ҙә күп, мәҫәлән, ҡаланың төньяҡ өлөшөндә юлдарҙы төҙөкләндереү, спорт, социаль объекттар төҙөргә кәрәк", - тине ул. Шуның өсөн дә Өфөнөң иҡтисади үҫеше һорауҙары алғы планға сығырға тейеш, ҡала бюджетын нығытыу өсөн бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү кәрәклеге лә һыҙыҡ өҫтөнә алынды.

✓Рәсәй Сәнәғәт һәм ауҙа министрлығы һәм Башҡортостан Хөкүмәте араһында сәнәғәт сәйәсәте һәм сауҙа эшмәкәрлеге өлкәһендәге сәйәсәт тураһындағы килешеү төҙөлдө. Документҡа Яр Саллы ҡалаһында үткән Волга буйы федераль төбәктәрендә газомотор яғыулығы баҙары үҫеше мәсьәләләренә арналған ултырышта ҡул ҡуйылды. Өс йылға төҙөлгән килешеүҙә төбәктә күп форматтағы сауҙа, шулай уҡ бәләкәй һәм урта сауҙа эшҡыуарлығы субъекттарын үҫтереүгә ярҙам итеү, сәнәғәт сәйәсәте өлкәһендәге закондарҙы камиллаштырыу, дәүләт программаларын йүнәлтеү буйынса эштәр ҡаралған.

✓Башҡортостанда иҡтисади үҫеш министры вазифаһына Сергей Новиков тәғәйенләнде. Сергей Новиков Өфөлә тыуған, Өфө дәүләт авиация техник университетын тамамлаған. Иҡтисад фәндәре кандидаты. Хеҙмәт юлын "Уралавиаспецтехнология" ғилми-етештереү предприятиеһында башлаған. 2010 йылдан 2015 йылға тиклем дәүләт заказдарын урынлаштырыу буйынса Башҡортостандың Дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарған.

✓Мәскәүҙең "Коломенское" музей-ҡурсаулығында быйыл бишенсе тапҡыр һабантуй уҙҙы. Мәғлүмәттәр буйынса, унда 150 мең самаһы кеше ҡатнашҡан. Милли байрамды Мәскәү Хөкүмәте, Башҡортостандың һәм Татарстандың Рәсәй Президенты ҡарамағындағы тулы хоҡуҡлы вәкиллектәре, йәмәғәт ойошмалары ойошторҙо. Һабантуйҙа Баймаҡ һәм Хәйбулла райондары делегацияһы, Ф. Ғәскәров исемендәге дәүләт халыҡ бейеүҙәре ансамбле, Башҡорт дәүләт филармонияһы, "Аҡ тирмә" башҡорт мәҙәни үҙәгенең һәүәҫкәр артистары сығыш яһаны.

***✓ Башҡорттар төрөк, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк, әзербайжан, төркмән, уйғыр, хакас, йәғни 30-ҙан ашыу төрки телле халыҡтар менән иркен аралаша бит, тимәк, ул әле үк халыҡ-ара аралашыу теле була түгелме?..***



*КӨНАУАЗ*

# КҮП ТЕЛ БЕЛЕҮ...

## уңышлы булыуҙың бер шарты бит

**БРИКС һәм ШОС саммиттары барышын күҙәтеп барғандар, дөрөҫөрәге, уның йомғаҡтарына арналған матбуғат конференцияһын ҡарағандар, әлбиттә, "Редкие земли" журналы хәбәрсеһененң: "Киләсәктә ниндәй сит телде өйрәнергә кәңәш итер инегеҙ?"- тигән һорауына Рәсәй Президентының: "Рус телен өйрәнегеҙ, башҡорт телен өйрәнегеҙ!" - тигән яуабын шунда уҡ иғтибар үҙәгенә алды. Ил етәксеһененең был яуабы төрлө даирәләргә төрлөсә тәьҫир иткәндер, ә шулай ҙа ыңғай йоғонтоһо күберәк булғандыр, тип уйларға урын бар.**



Ошоно раҫлап, иғтибарығыҙға бер миҫал тәҡдим итәм. Бер көндө урамда рус милләтенән булған бер йәш әсәй менән һөйләшеп киттек. "Мәләүезгә яңы ғына сит өлкәнән күсеп килдек. Дөрөҫөрәге, Башҡортостанда беренсе тапҡырбыҙ. Быйыл мәктәпкә барасаҡ улыбыҙ бар. Ниндәй мәктәпкә бирергә икән, тип аптырап йөрөгәндә, Рәсәй Президентының "Рус телен өйрәнегеҙ, башҡорт телен өйрәнегеҙ!" тигән һүҙҙәре беҙҙе етди уйға һалды. Һәм балабыҙҙы 1-се кластан башҡорт теле уҡытылған мәктәпкә бирергә ҡарар иттек, - тине ул. - Кем белә, бәлки, киләсәктә башҡорт теле лә халыҡ-ара телгә әйләнер. Ошо телде белгәндәр татар, ҡаҙаҡ, үзбәк, ҡырғыҙ һәм башҡа байтаҡ төрки телле халыҡтар менән тәржемәсеһеҙ аралашҡанын, шулай уҡ инглиз теле менән өн оҡшашлығы барлығын ишеткәнем бар. Был иһә улыбыҙға инглиз телен еңелерәк өйрәнергә булышлыҡ итер, тип тә өмөтләнәм. Балабыҙҙы киләсәктә күп тел белгән дәүләт эшмәкәре йәки халыҡ-ара журналист итеп күҙ алдына килтерәбеҙ.

Рәсәй, шул иҫәптән Башҡортостан - күп милләтле ил, республика. Шуға күрә, ни тиклем күберәк тел белһәң, шул тиклем был тормошта үҙеңде уңышлыраҡ тояһың. Күп тел белеү бөгөнгө заманда ҙур мәртәбә һанала. Башҡортостанда йәшәгәс, төп халыҡтың телен өйрәнеү һәр кемгә фарыз. Телде өйрәнеп кенә ошо матур, тыныс төбәкте төйәк иткән халыҡты ҡабул итергә, яратырға, хөрмәт итергә өйрәнәһең, тип уйлайым..."

Журналист икәнлекте белгәс, был ҡатын минән "Улымды ниндәй мәктәпкә бирергә икән?" тип кәңәш һораны. Башҡорт теле ҡалала туған тел булараҡ бөтә мәктәптә лә өйрәнелеүен ишеткәс: "Тимәк, белем биреү учреждениеһын һайлап алыу мөмкинлеге лә бар", - тип ҡыуанып ҡалды.

Йәш әсәнең фекер йөрөтөүе бик оҡшаны. Быға тиклем йәшәгән төбәге, унда туған телдәргә булған мөнәсәбәт, Башҡортостандың уларҙы нисек ҡаршы алыуы хаҡында ла һөйләгеҙ әле, тигәс, ипле генә итеп баш тартты: "Әлегә районға файҙа килтерерлек, уның мәртәбәһен арттырырлыҡ эшебеҙ юҡ. Маҡтап телгә алырлыҡ, башҡаларға өлгө итеп ҡуйырлыҡ уңышыбыҙ булһа, үҙебеҙ һеҙҙе табырбыҙ", - тине.

БРИКС һәм ШОС форумы, һис шикһеҙ, Өфөнө, уның менән бергә тотош Башҡортостанды, башҡорт халҡын бөтә донъяға танытырға булышлыҡ итте. Уның ыңғай һөҙөмтәһен башҡортостандар яҡын киләсәктә мотлаҡ күрәсәк әле. Әле Өфөбөҙ тағы халыҡ-ара әһәмиәткә эйә булған ҙур сараларға әҙерләнә икән. Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов, Өфө ғинуарға тиклем ҙур саралар үҙәгенә әйләнәсәк, тине бит. Мәҫәлән, июль аҙағында БРИКС һәм ШОС илдәре йәштәрененң рәсми етәкселәре форумы ойошторола. Октябрҙә саммитта ҡатнашҡан илдәрҙең Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡтың төбәк-ара эшлекле форумы планлаштырылған. Бынан тыш, Рәсәй философтары съезы үтәсәк, унда өс меңгә яҡын кеше йыйыласаҡ. Декабрҙә ике-өс мең кеше ҡатнашасаҡ Европа-Азия гуманитар форумы ойоштороласа. Киләһе йыл башында БРИКС илдәренең хеҙмәт министрлыҡтары етәкселәренең йыйылыуы көтөлә. Ғөмүмән, 2016-2018 йылдарҙа Өфө яңынан-яңы ҙур саралар үткәреү урыны буласаҡ, тип планлаштырыла. Был хаҡта Рәсәй Президенты Владимир Путин да, республика халыҡ-ара кимәлдәге ҙур сараны лайыҡлы үткәрҙе, киләсәктә лә бында ошондай уҡ саралар һис шикһеҙ ойоштораcаҡ, тине.

Ысынлап та, баяғы йәш әсәй дөрөҫ фекерләй: Өфөбөҙ Рәсәйҙең яңы конгресс үҙәгенә әйләнә икән, тимәк, республикалағы дәүләт телдәре, шул иҫәптән башҡорт теле лә, халыҡ-ара аралашыу теленә әйләнмәҫ, тимә. Хәйер, башҡорттар төрөк, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, үзбәк, әзербайжан, төркмән, уйғыр, хакас, йәғни 30-ҙан ашыу төрки телле халыҡтар менән иркен аралаша бит, тимәк, ул әле үк халыҡ-ара аралашыу теле була түгелме?..

**Лена АБДРАХМАНОВА.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# ӨМӨТБАЕВ ҺӘЙКӘЛЕНӘ ӨМӨТЛӘНӘБЕҘ

**Стәрлетамаҡ - Башҡортостандағы иң тарихи ҡалаларҙың береһе. Уның тарихы, уның үҫеше ошо ерҙең аҫаба халҡы - башҡорттар менән бер ептәй үрелгән. Салауат яуы ла урап үтмәгән "тоҙло ҡаланы", тәүге башҡорт Хөкүмәте лә ошонан башланғыс алған.**

Әммә ҡаланың бөгөнгө йөҙөнә баҡһаҡ, урамдарҙың исемдәренә, һәйкәл-бюстарға байҡау яһаһаҡ, әйтерһең дә, бында башҡорт эҙҙәре бөтөнләй булмаған. Ә күпме тарихи шәхестәребеҙ яҙмышы бәйле Стәрлетамаҡҡа! Бөйөк Вәлиди үҙе йәшәп-эшләп киткән бит бында! Башҡаларын да һанай китһәң - байтаҡ ҡына йыйыла. Тик бына ҡалала шәхестәребеҙгә һәйкәлдәр ҡуйыламы, яңы урамдарға уларҙың исемдәре биреләме? "Боҫоп ҡына торған" Шәһит Хоҙайбирҙин һәйкәлен, уның исемендәге, Ҡаранай Моратов исемендәге урамдарҙы иҫәпкә алмағанда, башҡорт шәхестәрененң исемен мәңгеләштереү тураһында бөтөнләй уйламайҙар Стәрлелә, тип һығымта яһарға ла булалыр...

Ғөмүмән, Стәрлетамаҡ һәйкәлдәргә һаран ҡала һәм үҙенең 250 йыллыҡ юбилейына аяҡ баҫҡан мәлдә был хәл айырыуса күҙгә ташлана.

...Былтыр тарих фәндәре кандидаты, БДУ-ның Стәрлетамаҡ филиалы доценты Ләйсән Йәркәй ҡыҙы Йосопова ошо күҙгә төртөп торған етешһеҙлектәргә ниндәй ҙә булһа төҙәтмә индереү һәм ул проблемаға ҡала власы етәкселәрененң иғтибарын йәлеп итеү маҡсатында бик изге эш башланы: башҡорт йәмәғәтселеге араһында ҡултамғалар йыйып, улар исеменән ҡала хакимиәте башлығына асыҡ хат яҙҙы. Ошо хатҡа яуап алған автор. Хатта яҙылғандар буйынса фекер йөрөткәндә, баҡтиһәң, Стәрлетамаҡта һәйкәлдәр ҡуйыла, яңыртыла икән. Тик шуныһы ҡыҙғаныс: улар башҡорт шәхестәрен һынландырмай. Башҡорт шәхестәренең исемдәре лә урамдарға бик ҡушыла һалып бармай.

Ярай, иң мөһиме - ҡала властары башҡорт йәмәғәтселегенең оранын ишетте. Билдәле, ҡала ҙур сараға әҙерләнә, иҡтисади хәлдең дә бик үк яҡшы мәле түгел. Шуға һәйкәл-бюст яһатыу ҙа халыҡ көсөнә, үҙ милләтенең тарихына битараф булмағандар ярҙамына барып төртөлә. Ошо йәһәттән, шулай уҡ "Кемгә һәйкәл эшләтергә?" тигән һорауға яуап биреү маҡсатында ҡаланың иң әүҙем башҡорт йәмәғәтселеге ағзалары йәнә йыйылып, фекер алышты. Әлбиттә, бәхәстәр ҙә булды, ялҡынлы фекерҙәр, тәҡдимдәр ҙә яңғыраны. Һуңынан, халҡыбыҙҙың бөйөк мәғрифәтсеһе, яҙмышы Стәрлетамаҡ менән бәйле Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевҡа ҡалала һәйкәл булдырырға, яңы урамға уның исемен биреүҙе юлларға, тигән берҙәм фекергә килде йыйылыусылар. Бынан тыш, ҡалабыҙҙа йәшәп, ижад иткән мәрхүм яҙыусыларыбыҙҙың исемдәрен мәңгеләштереү тураһында ла һүҙ ҡуҙғатылды. Рауил Ниғмәтуллин, Вил Ғүмәров... Ҡыҫҡаһы, урамдары ғына булһын, ә исемдәрен мәңгеләштерер шәхестәргә бай халыҡ беҙ! "Урамдарға исемдәрен ҡушыу ғына түгел, бюстары ла ҡалабыҙҙы биҙәһә, ҡалай шәп булыр", - тигән фекерҙәр ҙә яңғыраны осрашыуҙа. Хуп, тик бындай эштәр тураһында һөйләндең дә бөттө түгел, уны эҙмә-эҙлекле тормошҡа ашырырға тырышырға кәрәк.

**Рәмил МАНСУРОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Тәүге ярты йыллыҡта Башҡортостанда барлыҡ финанслау сығанаҡтары иҫәбенә 1 миллион 229,5 мең квадрат метр торлаҡ төҙөлгән, был уҙған йылдың ғинуар-июнь айҙарына ҡарағанда 13 процентҡа күберәк. Мең кешегә иҫәпләгәндә, республикала 302 квадрат метр торлаҡ сафҡа индерелгән. Башҡортостан ике күрһәткес буйынса ла Волга буйы федераль округында алдынғылар рәтендә, тип хәбәр итә "Росстат"тың төбәк органы.

✓Йәйге айҙарҙа Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәттең Башҡортостан буйынса идаралығы төбәктең аҙыҡ-түлек баҙарындағы хәлде контролдә тотоуҙы көсәйтә. Идаралыҡ етәксеһе Зөлфирә Аҡбашева әйтеүенсә, "Әле баҙар илебеҙ тауарҙарына ҡытлыҡ кисергән. Беҙҙә йомортҡа, тауыҡ ите, он етештереү кәмене, шуға күрә ситтән килтерергә тура килә. Уларҙың хаҡына йоғонто яһау бик ауыр, сөнки транспорт сығымдарын да ҡапларға кәрәк. Әммә беҙ барыһын да контролдә тотабыҙ".

✓Башҡортостанда Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһына дәғүә итеүгә 27 эш тәҡдим ителгән. Шуларҙың бишәүһе - әҙәбиәт, икәүһе - архитектура, 20-һе сәнғәт өлкәһенән. Комиссия өс еңеүсене билдәләйәсәк. Премия лауреаттары Республика көнөндә бүләкләнәсәк, уның күләме 150 мең һум тәшкил итә.

✓Алина Сөләймәнова "Вся Уфа" телеканалының генераль директоры итеп тәғәйенләнде. "Вся Уфа" телеканалы тәүлек әйләнәһенә Өфөлә һәм Башҡортостандың биш ҙур ҡалаһында күрһәтә. "Вся Уфа" продюсер үҙәге 1999 йылда ҡала хакимиәте ҡарамағындағы муниципаль телекомпания булараҡ ойошторолған.

✓Өфөлә, "Фармстандарт-ӨфөВИТА" компанияһының етештереү майҙансығында, OneTouch глюкометрҙары һәм уларға тест-һыҙаттар сығарыла башлаясаҡ. "Иннопром-2015" күргәҙмәһендә "Фармстандарт" һәм "Джонсон & Джонсон" корпорацияһы ошо хаҡта килешеү төҙөнө. Килешеү Рәсәй биләмәһендә ҡандағы глюкоза кимәлен үҙаллы контролдә тотоу системаһын сығара башлауҙы, шулай уҡ яҡтар араһында диабет менән идара итеүҙең инновациялы технологияларын үҫтереү өлкәһендә хеҙмәттәшлекте күҙ уңында тота.

**"Башинформ"дан.**

ҺАНДАР ҺӨЙЛӘЙ

# ӨФӨЛӘР ӨФӨНӘН ҠӘНӘҒӘТ

**Өфө ҡала округы хакимиәте уҙғарған социологик һорау алыу һөҙөмтәләре буйынса өфөләр үҙ ҡалаһын йәшәү өсөн уңайлы, туризм өсөн ҡыҙыҡлы ҡала тип иҫәпләй.**

Үҙ фекерен белдереүселәрҙең 67 проценты баш ҡалабыҙҙа барған эштәр менән ҡәнәғәт булыуын белдерә. Сарала ҡатнашыусыларҙың 43 проценты, һуңғы ике йыл эсендә Өфө яҡшы яҡҡа үҙгәрҙе, тигән фекер әйткән. Был фекергә ҡаршы фекер әйтеүселәр, йәғни, Өфөлә ыңғай үҙгәрештәр күҙәтелмәне, тигән ҡараш белдереүселәр иһә дөйөм ҡатнашыусыларҙың 7,6 процентын тәшкил итә. Һорауҙарға яуап биреүселәрҙең һәр икенсеһе, Өфөлә йәшәүе уңайлы, ти.

Күпселек (94 процент) Өфөгә туристар йәлеп итеүҙе кәрәкле һанай. Респонденттарҙың 40 проценты баш ҡалаға туристарҙы төрлө байрам саралары, фестивалдәр ярҙамында йәлеп итеү яҡшыраҡ, тип һанаһа, тағы ошо тиклем халыҡ, ҡунаҡтарға милли аш-һыу, скульптуралар, һәйкәлдәр, архитектура ҡомартҡылары ылыҡтырғыс булыр ине, ти. 29 процент халыҡ Өфө ҡалаһында тыуып үҫкән, унда йәшәгән билдәле кешеләр менән бәйле урындар ҙа ҡыҙыҡ булыр ине, тигән фекерҙә.

Өфө ҡалаһы халҡы туризм өсөн ошо урындарҙы ҡулайлы һанай: тау саңғыһы базалары (26 процент), архитектура, мәҙәниәт, сәнғәт өлгөләре (25 процент), аквапарк (20 процент), милли аш-һыу (17 процент), Өфө буйлап уҙғарылған экскурсия маршруттары (17 процент), музейҙар, театрҙар (16 процент), тәбиғәт ҡомартҡылары (16 процент).

Ошо уҡ социологик һорау алыуҙар ваҡытында өфөләргә, ғаиләлә нисә бала булырға тейеш, тигән һорау ҙа бирелә. Мотлаҡ рәүештә ике бала үҫергә тейеш, тигән фекерҙе респонденттарҙың 37 проценты хуплаһа, уларҙың 31 проценты өс бала яҡлы булыуын белдерә. Шулай уҡ уларға, хәҙерге ғаиләлә мөнәсәбәттәр ниндәй булырға тейеш, тигән һорау ҙа бирелә.

Өфө халҡының 55,8 проценты ғаиләне законлы ирле-ҡатынлы, бер йәки ике балаһы булған ячейка итеп күҙ алдына килтерә. Үҙ фекерен белдереүселәр әйтеүенсә, ғаиләнең ныҡлығы төү сиратта балалар булыуға бәйле. Артабан ата-әсә менән бала араһындағы мөнәсәбәттәрҙең ниндәй булыуы, ғаиләнең матди хәле никахтың ныҡлығына тәьҫир итә, ти респондентттар.

Социологик һорау алыу һөҙөмтәләре буйынса, тәүге никахта тороусылар күләме 41,5 процент булһа, ике йә унан да күберәк тапҡыр өйләнгән кешеләр һаны - 5 процентты, өйләнмәгәндәр - 32,5 проценты, айырылышҡандар һәм никахын закон буйынса теркәмәгәндәр - һигеҙәр процентты, тол ҡалғандар 5 процентты тәшкил итә.

Ҡатын-ҡыҙҙарға - 24, ир-егеттәргә 27 йәш никахлашыу өсөн иң уңайлы йәш, тигән фекер ҙә белдерелә. Респонденттарҙың 16 процентының ғаиләһендә 16 йәштән кесе - бер, 10,6 процентында - ике һәм 0,4 процентында ғына өс һәм унан да күберәк бала бар. 58 процент халыҡтың ғаиләһендә 16 йәшкә тиклемге балалар юҡ.

Респонденттарҙың күпселеге, атап әйткәндә, 84 проценты, ғаиләләрендәге мөнәсәбәттәр менән дөйөм алғанда ҡәнәғәт булыуҙарын белдерһә, матди хәле менән ҡәнәғәт булыусылар һаны - 73 процент.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҮҘЕБЕҘҘЕКЕ!

**Өфөлә һатылған аҙыҡ-түлектең ҙур өлөшө республика етештереүсеһенеке. Айырым төрҙәр буйынса был күрһәткес хатта 100 процентҡа етә. Икмәк һәм икмәк-ҡалас изделиелары буйынса ул - 97, һөт һәм һөт ризыҡтары, йомортҡа буйынса - 78, ҡош ите буйынса - 62, колбаса изделиелары буйынса 61 процент тәшкил итә.**

Шулай уҡ баш ҡала магазиндарында һәм баҙарҙарында һатылған төп йәшелсә продукцияһы ла урындағы етештереүсе өлөшөнә тура килә. Йәғни картуф - 80, кишер, кәбеҫтә һәм сөгөлдөр 53 процентҡа булған ихтыяжды ҡәнәғәтләндерә. Ҡалған өлөш Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендәге ауыл хужалығы продукцияһы етештереүселәр иҫәбенә тулыландырыла. Сит илдән килтерелгән йәшелсә ни бары 8 процент тәшкил итә.

Ҡала халҡының ҡыяр һәм томат кеүек йәшелсәләргә һорауын 25 процентҡа Өфө, Туймазы һәм республиканың башҡа теплица хужалыҡтары ҡәнәғәтләндерә. Яңы йыйылған емеш-еләк, шул иҫәптән баҡса еләге, ҡарағат, алма, емеш-еләк менән питомниктар тәьмин итә. Баклажан, татлы борос һәм башҡа айырым төрҙәр ситтән индерелә.

# ҺАТАҺЫҢМЫ? РӘХИМ ИТ!



**Баш ҡаланың "Көньяҡ" баҙарында ваҡлап һатыу форматында эшләгән сауҙа комплекстарында барлығы 1 мең урын бушлай йәки льготалы хаҡ менән фермер хужалыҡтары һәм ауыл хужалығы продукцияһы етештереүселәр өсөн бүленгән.**

Әммә уларҙың ни бары 60 проценты ғына файҙаланыла. Бынан тыш, ҡала территорияһында миҙгелгә ярашлы йәшелсә-емеш һатыу өсөн 61 майҙансыҡ булдырылған. Улар ҙа санитар талаптарҙы һәм төҙөкләндереү ҡағиҙәләрен үтәгән осраҡта бушлай бирелә.

Мәғлүм булыуынса, халыҡты сифатлы тауар менән тәьмин итеү маҡсатында Өфөлә махсуслаштырылған фермер йәрминкәләре лә бар. Улар өсөн ҡаланың һәр районында 11 урын бүленгән, әлеге ваҡытта уларҙың туғыҙы көн һайын, дүшәмбенән тыш, даими нигеҙҙә эшләй. Был йәрминкәләрҙә һәм сауҙа комплекстарында үҙҙәренең баҡсаһында үҫтергән емеш-еләкте баҡсасылар ҙа һата ала. Улар өсөн махсус 9 урында 275 сауҙа урыны ҡулайлаштырылған.

# БӘХЕТЛЕЛӘР ӨЙ ТУЙЛАЙ



**Дәүләткилдиев бульвары, 8 адресы буйынса урынлашҡан яңы йортта тиҙҙән өй туйлауҙар башланасаҡ. Унан 90 ғаилә фатир алған.**

Төҙөүселәр йәш граждандарҙы ла онотмаған: ихатала заманса күп функциялы балалар уйын комплексы урынлашҡан. Ҡомлоҡ, карусель, бәүелсәктәр, "тауҙар", спорт ҡоролмалары - төрлө йәштәге балалар үҙенең күңеленә хуш килгән шөғөл таба ала. Уларҙың хәүефһеҙлеге хаҡында ла артыҡ борсолорға кәрәкмәй: комплекс йәрәхәтләнеүҙән һаҡлаусы резина ҡатлам менән көпләнгән. Шулай уҡ ихатала эскәмйәләр ҡуйылған, ылыҫлы ағастар ултыртылған, үлән сәселгән, ихата үҙе ағас ҡойма менән уратып алынған һәм ҡараңғы ваҡытта яҡтыртыла. Тағы бер яңылыҡ - торлаҡ комплексында йәшәүсе һәр фатир өсөн парковка урындары билдәләнгән. Бөгөн муниципалитет төҙөүселәргә төҙөлөш эргәһендәге территорияларҙы төҙөкләндереү сифаты буйынса юғары талаптар ҡуя һәм шундай объекттарҙың сафҡа инеүе был йүнәлештәге эштең һөҙөмтәлелеге хаҡында һөйләй.

# ҠАЛА ЭЛЕКТРИЧКАҺЫ



**Ҡала эсендә халыҡты транспорт менән тәьмин итеү һәм пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереүҙең сифатын яҡшыртыу маҡсатында 2013 йылда Дим - Өфө - Шаҡша участкаһында "Ҡала электричкаһы" проекты ғәмәлгә ашырыла башланы. Проектҡа инвесторҙар йәлеп ителә.**

Өфөлә ҡала электричкаһын 2016 йылда сафҡа индереү күҙаллана. Ҡала электричкаһының аҙаҡҡы туҡталышы Дим станцияһында буласаҡ. Июндә бында төҙөкләндереү эштәре тамамланды, терминалдар һәм касса бүлмәләре әҙер. Спорт станцияһында ла шундай уҡ ремонт эштәре башҡарылған. Димдән Шаҡшаға тиклем бөтәһе 11 станция буласаҡ. Димдән Өфөгә тиклем юл хаҡы - 18, Шаҡшаға ҡәҙәр 37 һум булыр, тип күҙаллана.

Ҡала электричкаһы йөрөй башлау менән өфөләрҙең күбеһе ҡала сиктәрендә автомобилдәренән баш тартасаҡ, тип иҫәпләй чиновниктар. Шуны билдәләү мөһим: электричканың маршруты буйынса транспорт үҙәктәрендә махсус парковкалар буласаҡ. Пассажир автомобилен шунда ҡалдырып, йәмәғәт транспортында юлын дауам итә ала.

2014 йыл аҙағындағы мәғлүмәттәр буйынса, "Ҡала электричкаһы" проектына 316 миллион һум һалынған: Өфө хакимиәте - 240 миллион, Куйбышев тимер юл идаралығы 76 миллион һум аҡса бүлгән.

# ИҒТИБАР - ЧЕРНИКОВКАҒА!



**2016-2017 йылдар баш ҡала өсөн Орджоникидзе һәм Калинин районларын комплекслы үҫтереү осоро булырға тейеш. Әлеге ваҡытта төҙөлөш, шулай уҡ юл, коммуналь, торлаҡ һәм белем биреү блоктарын үҙ эсенә алған программа әҙерләнә.**

Черниковкала юлдарҙы реконструкциялау һәм капиталь ремонтлау буйынса эштәр алып барыла һәм киләсәктә күләм арттырыласаҡ. Интернационал урамында Ағиҙел йылғаһы аша күпер төҙөләсәк. Шулай уҡ яңы балалар баҡсалары һәм мәктәптәр сафҡа инә, "Нефтсе" стадионы реконструкцияланды, киләһе йылда Орджоникидзе районында боҙ һарайы төҙөлөөн тамамлау планлаштырыла. Сити-менеджер Ирек Ялалов белдереүенсә, ҡаланың төньяҡ райондарының үҫеше Өфө үҙәге кимәленә етергә тейеш.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башстат тәүге ярты йыллыҡта пассажир транспорты эшенә йомғаҡ яһаны. Ғинуар-июнь айында пассажирҙар ташыу күләме былтырғы йылдың ошо осоро менән сағыштырғанда, 2,1 процентҡа түбәнерәк. Шул уҡ ваҡытта, әлеге мәлдә Өфө халҡы трамвай өсөн милли орнамент һайлай. "Легендалар һаҡланған ҡала" проектын ҡаланың электр транспорты идаралығы тәҡдим иткән. Оҡшаған вариант өсөн тауышты 1 августҡа тиклем, идаралыҡтың сайтында бирергә мөмкин.

✓Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премиялар буйынса комиссия документтар ҡабул итеү хаҡында иғлан итте. Положениеға ярашлы, 2014 йылдың сентябренән 2015 йылдың августына тиклем донъя күргән иң яҡшы әҫәрҙәр өсөн премия журналистарға, шулай уҡ уларҙың коллективтарына бирелә. Әҫәрҙәргә репортаж, очерк, документаль повесть, публицистик мәҡәләләр, теле- һәм радиотапшырыуҙар, республика, Рәсәй йәки сит ил баҫмаларында, электрон киң мәғлүмәт сараларында сыҡҡан фотоһүрәттәр шәлкеме, айырым китап булып нәшер ителгән материалдар инә. Материалдар 2015 йылдың 1 сентябренә тиклем түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: 450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, Башҡортостандың Журналистар союзы, 1007-се офис (Матбуғат йортоноң 10-сы ҡатында). Телефон (факс): (347) 276-42-66.

✓Белорет районында яңы тарихи яҙыу барлыҡҡа килде. "Әҙекәй ауылы - ҡатай төйәге!" тип яҙылған алтаҡта ауылға ингән ерҙә ҡуйылды. Район хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, был Белорет ерендә тыуған яҡтың тарихын хәтергә төшөрөүсе берҙән-бер тарихи күрһәткес түгел. Ҡаһарман ауылына ингән ерҙә, Тамьян ҡәбиләһе башлыһы, көньяҡ-көнсығыш башҡорттарҙы Рус дәүләтенә ҡушылырға өндәүселәрҙең береһе ерләнгән урында "Шәғәле Шаҡман төйәге" тигән алтаҡта ҡуйылған.

✓Мәғариф һәм фән өлкәһендәге күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт Берҙәм дәүләт имтиханын камиллаштырыу буйынса тәҡдимдәр йыя. Башҡортостан халҡы ла ege2016@obrnadzor.gov.ru электрон адресына үҙенең тәҡдимдәрен ебәрә ала.

✓Башҡортостанда Еңеү көнө айканлы иғлан ителгән амнистия буйынса 446 хөкөм ителеүсе төрмәнән сығарылған. Шулай уҡ 2181 хөкөм ителеүсенең язаһы шартлы рәүештә иркенән мәхрүм ителеүгә алыштырылған һәм улар мәжбүри эштәргә йәлеп ителгән.

✓ *Бында бер йыллыҡ ҡына хеҙмәт һәм тәрбиә түгел, бында ныҡлы системаға һалынған эш барышын, мәғариф, мәҙәниәт һәм фәндә бергә үреп ишелгән арҡан ныҡлығын тояһың.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ЙӘШ СӘСӘНДӘР...

## Урал батыр ерендә бәйге тотто

**Яңыраҡ Бөрйән ерендә XVII "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүсе йәш сәсәндәр республика бәйгеһе үтте. Халҡыбыҙ эпостары, шуларҙың иң бөйөгө булған "Урал батыр" - милләтебеҙҙең быуындан-быуынға тапшырыла килгән бай хазинаһы, ауыҙ-тел ижады өлгөһө ул. Был сәсәнлек бәйгеһенең йылдан-йыл билдәлелек яулай барыуы ла һоҡланғыс күренеш. Быйыл да унда барыһы 108 уҡыусы, 27 команда ҡатнашты. Матур йолаға әүерелгән был сараны БР Мәғариф министрлығы ойошторҙо.**



*Гран-при яулаусы Зарема Әминева. Зиннур Боҫҡонов фотоһы.*

Беренсе сәхнәлә йәше буйынса ике төркөмгә бүленгән 100-ҙән ашыу бала "Урал батыр" эпосын яттан һөйләү буйынса көс һынашһа, икенсе сәхнәлә башҡорт халыҡ эпостарын сәхнәләштереү буйынса ярыш старт алды. Бер яҡта Йәнбикәнең көйләп-көйләп уландарын тыйғанын тыңлап китһәң, икенсе яҡта ҡуңыр буғаһын юғалтҡан ҡыҙ һамаҡланы. Унан Ҡаһҡаһаның ысылдап низер әйткәне менән ҡыҙыҡһынып, кире тәүге сәхнәгә яҡынлайһың да, Һыуһылыу менән Заятүләктең осрашыуын күрер өсөн икенсеһенә кире йүгерәһең. Ә инде бәйгеселәрҙең оҫталығы, тырышлығы һәм әҙерлеге хаҡында туҡталмай һөйләргә лә һөйләргә мөмкин. Һәр икенсе ҡатнашыусының ҡулында думбыра, ҡумыҙ, дөңгөр кеүек музыка ҡоралы, һәр икенсеһе һамаҡлай йә өзләй, ә инде ым, ишара менән импровизациялау хаҡында әйтеп тораһы ла түгел. Баланы ошондай юғары кимәлдә яттан һөйләй белеү маһирлығына өйрәтеп, артислыҡ һәләттәрен үҫтереп, сәхнәгә мендереп баҫтырыу өсөн улар менән шөғөлләнгән һәм майҙанға оҙата килгән уҡытыусыларҙың, әлбиттә, хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ ҙур һәм маҡтауға лайыҡ. Юғары синыф уҡыусылары барыһы ла тигәндәй эпосты тулыһынса ятлаған булһа, бәләкәйерәктәр мең юлдан да түбән төшөрмәне. Бәйгеселәрҙе дәртләндереү, уларҙа сәм уятыу өсөндәр, бөрйәндәр ҡунаҡтарға күрмәккә эпосты ятлаусы балалар баҫсаһы тәнәйҙәрен дә сығарҙы. Бармаҡ башындай ғына балаларҙың сабый тауышы менән шундай олуғ әҫәрҙе бәйән итеүен ишетеүҙән тәндәр зымбырланы, күңел тулышты.

Ярыш бик ҡыҙыу барҙы. Береһенән-береһенең костюмы матур, береһенән-береһенең һамағы моңло, тауышы көслө, ҡыланыштары килешле. Жюри талаптары ла ҡаты, уҡып тороусыны ҡапыл туҡтатып: "Йә әле, фәлән-фәлән ерҙән дауам ит", - ти ҙә ҡуялар. Унда ла аптырап тормай бәйгеселәр, шунда уҡ элеп алып һамаҡлай ҙа китәләр. Шул ваҡыт ошо бәйгене ойоштороусы һәм үткәреүселәрҙең был тәңгәлдә ярайһы уҡ юғары уңыштарға өлгәшкәнлеген аңлайһың. Бында бер йыллыҡ ҡына хеҙмәт һәм тәрбиә түгел, бында ныҡлы системаға һалынған эш барышын, мәғариф, мәҙәниәт һәм фәндә бергә үреп ишелгән арҡан ныҡлығын тояһың. Ә инде бөтөн ошо ыңғай энергияның халыҡ мәнфәғәтендә балалар аша башҡалыуы икеләтә ғорурландыра.

Балалар өсөн матур ял да ойоштора алғайны бында. Улар Урал батыр эҙҙәре буйлап йөрөнө, йәйге тәбиғәткә һоҡланды. Шүлгәнташ мәмерйәһе стенаһындағы һүрәттәрҙе ҡат-ҡат һыйпап ҡарап, әллә ни төр әкәмәтле тарихтар тыңлап, тәьҫораттарҙан биттәре алһыуланып, ҡараштары уйсанланғандай булды. "Йә, нисек?" - тигән һорауға күптәре күҙҙәрен селт-селт йомолап: "Ух!" - тип кенә әйтә алды. Йылҡысыҡҡан күле янында, боронғо Аҡбулат ауылы ерлегендәге Ҡыпсаҡ батыр убаһында ла легендалар тыңланылар. Бәйгеселәр өсөн сәхнәлә бер туҡтауһыҙ йыр-бейеү, яланда спорт уйындары алып барылды.

Бәйгенең өсөнсө көнөндә генә еңеүселәр билдәле булды. Баһалама ағзалары оҙаҡ ҡына фекерләшкәндән һуң, "Урал батыр" эпосын яттан һөйләүсе йәш сәсәндәрҙең XVII республика конкурсы урындарын түбәндәгесә билдәләне.

Ниндәй ҙә булһа башҡорт халыҡ эпосынан өҙөк сәхнәләштереүҙә I урын Белорет ҡалаһы командаһына бирелһә, II урынды Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка гимназия-интернаты менән Бөрйән районы командалары бүлеште. III һикәлтәгә иһә Учалы, Ейәнсура райондары менән Сибай ҡалаһы командалары баҫты.

Дөйөм ярыш буйынса командалар араһында беренселек Учалы районы уҡыусыларына тәтене. Икенсегә Белорет ҡалаһы һәм Салауат районы командалары ирешһә, өсөнсөнө Ишембай ҡалаһы, Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка гимназия-интернаты һәм Күгәрсен районы командалары яуланы.

Эпосты яттан уҡыусылар буйынса бәйгеселәр ике төркөмгә бүленде, тип, әйтеп үткәйнек инде. Бәләкәйҙәр төркөмөндә маҡтаулы I урынды лайыҡлы рәүештә Күгәрсен районы ңылыуы Гөлфиә Кисенбаева биләне . II урынды Белорет ҡалаһынан Ләйсән Үтәбаева менән Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка гимназия-интернатынан Искәндәр Хужабирғәнов уртаҡлашты. III урын иһә Ейәнсура районынан Ғайсар Ҡансурин, Ағиҙел ҡалаһынан Гүҙәл Хәбибуллина һәм Бөрйән районынан Ҡәҙриә Күлбирҙина уртаҡлашты.

Юғары синыфтар төркөмөндә баһалама ағзалары I урынға Салауат районы уҡыусыһы Айҙар Ғәйнетдинов лайыҡ тип тапты. II урынды Илеш районынан Лиана Ғәлиуллина менән Ишембай ҡалаһынан Гөлфруз Хисмәтуллина араһында бүлде. Дәүләкән районынан Илнура Сафина, Мәләүез ҡалаһынан Нурсилә Яҡшыева һәм Ҡыйғы районынан Филүзә Ғимашевалар ҙың уҡыуын III урынға тип баһаланы. Гран-при Учалы ҡыҙы Зарема Әминеваға тапшырылды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бәйге үтеп китте, быйыл беренсе, икенсе урын алғандар киләһе йыл мотлаҡ Гран-приға, лауреаттар призлы урынға өлгәшеү ҡомары менән янып ҡайтты. Байрамға матур биҙәк булып килеп торған кескәйҙәр ағай-апайҙарҙың нисек сәмләнеп көс һынашҡанын күреп дәрес алды, тәүгә килеүселәр ярыш шарттарын үҙҙәрендә һынап ҡараны, оҫталар береһенең көсөн самаланы. Бәйге шулай булалыр инде ул.**

**Әлбиттә, конкурста ҡатнашыусыларҙың барыһы ла сәсән булып та бөтмәҫ, әммә улар ошо йәштәрендә халҡыбыҙҙың оло ҡомартҡыларының береһен яттан белә, уны уҡыған һәм өйрәнгән. Был үҙе үк оло еңеү, ҙур мәртәбә. Был үҙе үк уҡытыусыларҙың, мәктәптәрҙең бер ҡаҙанышы. Улар балаларҙа рухи ҡиммәттәребеҙгә ҡарата һөйөү һәм ихтирам уята алған. Киләсәктә был эште күтәреп алыусылар һәм ойоштороусыларға ярҙам ҡулы һуҙыусылар тағы ла күберәк булһын ине.**

**Миләүшә ХАБИЛОВА.**

ҺОРАУ - ЯУАП



### ФАТИРҘЫ НИСЕК БҮЛЕРБЕҘ?

**2003 йылда ғаилә хәлдәре буйынса фатирҙан прописканан төштөм һәм бер йылдан яңынан теркәлеү үттем. Ошо ваҡыт эсендә ҡатыным, миңә әйтмәйенсә, фатирҙы үҙ исеменә хосусилаштырған. Айырылыша ҡалһаҡ, фатир нисек бүленәсәк?**

- Ҡыҙғаныҫҡа күрә, һеҙҙең фатирға бер ниндәй хоҡуғығыҙ ҙа юҡ. Ҡатынығыҙ исеменә хосусилаштырыу сәбәпле, айырылышыу булһа, фатир бүленмәйәсәк. Шулай уҡ РФ Ғаилә кодексының 36-сы статьяһына ярашлы, мираҫ буйынса һәм бүләк итеү килешеүенә ярашлы ҡалған мөлкәт тә ир менән ҡатындың дөйөм милке иҫәпләнмәй һәм бүленмәй.

### ЭШ ХАҠЫМ ДӨРӨҪМӨ?

**Мин хаҡлы ялдамын, ләкин пенсия әҙ булғас, эшләргә тура килә. Алмашсым менән сәғәт иртәнге 7-нән киске 7-гә тиклем 2 көн аша эшләйбеҙ. Эш хаҡын көндөҙгө ставканан сығып түләйҙәр. Байрам һәм ял көндәрендә эшләгән өсөн дә түләү гәҙәттәгесә. Арттырып эшләгән өсөн бөтөнләй түләнмәй. Отпуск аҡсаһы эш хаҡының 42 процентын тәшкил итә. Асыҡлыҡ индерһәгеҙсе.**

- Әгәр ҙә эш шарттары ғәҙәттәге көндәлек йәки аҙналыҡ эш сәғәтенә ярашлы түгел икән, эш ваҡытын иҫәпләүҙе дөйөмләштереү мөмкин. Был саҡта дөйөм эш ваҡыты билдәләнгән норманан артмаҫҡа тейеш (РФ Хеҙмәт кодексының 104-се статьяһы). Төшкө ашҡа тәнәфес эш ваҡытына инмәй (шул уҡ кодекстың 108-се статьяһы). Шуға күрә көнөнә 8 сәғәттән артыҡ эшләү бар осраҡта ла арттырып эшләүҙе аңлатмай. Быны асыҡлау өсөн эшләгән ваҡыттың, мәҫәлән, бер айҙың дөйөм иҫәбен ҡарарға кәрәк. Һәр хәлдә, эш сәғәтегеҙ аҙнаһына 40 сәғәттән артмаҫҡа тейеш.

Сменалап эшләгәндә ял аҙнаның төрлө көндәрендә бирелә. Шуға күрә, әгәр ҙә эш көнө шәмбегә йәки йәкшәмбегә тура килһә, улар эш көнө тип иҫәпләнә һәм ғәҙәттәге эш көнө кеүек үк түләнә (РФ Хеҙмәт кодексының 111-се статьяһы). Ә бына байрам көндәрендә эшләү кәмендә икеләтә күләмдә түләнергә тейеш (ошо уҡ кодекстың 112-се статьяһы). Отпуск эш хаҡының процентынан сығып түгел, ә отпускыға тиклемге 12 айҙағы барлыҡ түләүҙәрҙән сығып, хеҙмәткәрҙең уртаса эш хаҡынан сығып билдәләнә. Был хаҡта РФ Хөкүмәте тарафынан 2007 йылдың 24 декбрендә 922-се һанлы Ҡарарҙа әйтелә.

Әгәр ҙә үҙегеҙҙең хеҙмәт хоҡуғығыҙ боҙола, тип һанаһағыҙ, Башҡортостан Республикаһының дәүләт хеҙмәт инспекцияһына мөрәжәғәт итә алаһығыҙ.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йәрәхәт дауалау

❖ Бармаҡ киҫелһә йәки бәрелһә, шешсе бөтөрөү өсөн һөт йәки ҡуйы ҡаймаҡҡа болғатылған һабын һөртһән, шеш тиҙерәк үлек йыя, тиҙ йүнәлә. Был ысулды компресс итеп көн һайын алыштырып торорға.

❖ Һабынды һуған менән болғап ябырға ла була.

❖ Әренле иҫке йәрәхәттәрҙе дауалау өсөн шыршы сайырынан, һуғандан, һөттән, балауыҙҙан яһалған компресс файҙалы. Ҡатнашманы эҫе һыуҙа бешереп, һөҙәһең.

❖ Балды балыҡ майы менән ҡушып һөртөү ҙә файҙалы.

❖ Ныҡ бәрелгән урынға тәүҙә боҙ йәки һалҡын һыу һалырға.

❖ Тубыҡ бәрелһә, һуған һыуы, юл япрағы, һары мәтрүшкә, иҙелгән әрем, һейҙек менән дә дауалап була.

❖ Имгәнгән урынға ҡыҙыл балсыҡ һалһаң да файҙалы.

❖ Шешектәр барлыҡҡа килһә, ҡайнар бөтнөк һыуы һөртөгөҙ.

❖ Балтыр быуындары тартылһа, аяҡты 30-45 минут һалҡын ваннала тоторға, шунан ҡайнар һөт компресы яһарға була.

### Астма өйәнәгенән

❖ 3 өлөш шалфей япрағы, 2 өлөш юл япрағы, 1 өлөш һары мәтрүшкә, 1 өлөш ала миләүшә, 1 өлөш йүкә сәскәһе кәрәк. 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, өҫтөн ябып, 4 сәғәт төнәтергә. Өлөштәргә бүлеп, ашар алдынан эсергә.

### Шәкәр сире

❖ Әле үләндәрҙең күп сағы, шәкәр сиренең ҡурҡҡан сағы. Ҡара еләк япрағы - 4 өлөш, айыу баланы (ҡарға миләше лә тиҙәр) сәскәләре, бәпкә үләне, йүкә сәскәһе, кесертҡән япрағын - 1-әр өлөш алып ваҡлайһың, бергә ҡушып болғайһың. 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 минут ҡайнатаһың. 2 сәғәт төнәтеп, һөҙәргә һәм көнөнә 2-3 мәртәбә ашар алдынан 1/3 стакан эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *Тик ситтә эшләүҙе күпме генә маҡтаһаң да, үҙ ереңдә күкрәк киреп эшләүгә етмәй. Ситкә китеүселәрҙең 90 процентын тиерлек нужа йөрөтә. Кемеһеләр уңып, икенсе береһе туңып ҡайта.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



## САҠЫРМАСЫ, КӘКҮК

**Сәй ҡайнағансы, аш бешкәнсе йәштәр төрлө уйындар уйнаған. Төркөмгә бүленеп, байрам табыны әҙерләгәндәр. Өлкән ҡатындар кәкүк тураһында тарихтар, легендалар, ғибрәтле хәлдәр һөйләгән.**

Сәй эскәндән һуң барыһы ла кәкүк саҡырғанын тыңлаған. Балалар кәкүккә шулай тип өндәшкән: "Моңло кәкүк, әйтсе, кәкүк, мин йәшәйем нисә йәш?" Һуңынан ҡысҡырып кәкүктең тауышын һанағандар. Ҡыҙҙар унын ҡысҡырыуын үҙенсә юраған: әгәр кәкүк оҙаҡ итеп саҡырһа, ҡыҙ сибәр егеткә кейәүгә сыға. Өлкән йәштәгеләр кәкүк ултырған ағасты ҡосаҡлап, яҡты донъяла күпме йәшәргә ҡалғанын иҫәпләгән.

Һуңынан уйын-көлкө башланған. Өлкәндәр балаларҙан айырым уйнаған. "Аҡ тирәк, күк тирәк", "Күмер йөҙөк", "Йәшерәм яулыҡ", "Өс бүкән", "Аҡ ҡайын", "Балға бар" уйындары, төркөмдәргә бүленеп арҡан тартышыуҙа, йүгереүҙә ярышҡандар.

Ҡатын-ҡыҙҙар кәкүк тураһында йырҙар йырлаған. Бер ҡатын йырлаған, ҡалғандар: "Эйе!", "Э-эй, донъя!", "Э-һей!" - тип, уны ҡеүәтләп ултырған. Йырҙың һәр куплеты һайын йырлаусыға көй күтәрешеп, бергәләп йырлағандар. Бындай йырҙарҙың өлгөләре Хәйбулла районының Әбүбәкер ауылында яҙып алынған:

*Саҡыралай кәкүк, һайрай ҡоштар,*
*Ташлы ғына буйын буйлаһам.*
*Әй ҡысҡырып та йырлап ебәрәм,*
*Уҙған ғүмерҙәрҙе уйлаһам.*

*Саҡырмасы, кәкүк, әй ҡаршымда,*
*Саҡырһана ағас башында.*
*Һин саҡырмаһаң да беләмен,*
*Ҡайғы-хәсрәт төшөр башыма.*

Йылайыр районында түбәндәге йөкмәткеләге йыр киң таралған:

*Сәхрәләргә сығып йөрөгәндә,*
*Кәкүк саҡыра тирәк башында.*
*Кәкүк тә генә саҡыра, мин илайым,*
*Ғүмер һорап ғәзиз башыма.*

*Сәхрәләрҙә кәкүк, әй саҡыра,*
*Бала кәкүк микән, бисара.*
*Уфтанһаҡ та, дуҫтар, илаһаҡ та,*
*Хоҙай биргән эшкә ни сара.*

Фольклорсы-ғалимдар тарафынан яҙып алынған йырҙар араһында тотош ырыу-араға, нәҫел-тоҡомға мәрхәмәт һорау бар:

*Ағас башында,*
*Кәкүк ҡашымда*
*Именлек бир башыма.*

*Ағас башында,*
*Илем ҡашында,*
*Бәрәкәт бир башыма.*

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ДОНЪЯУИ МӘШӘҠӘТ

# САРАҺЫҘЛЫҠ ЙӨРӨТӘМЕ СИТТӘ?

**Бөгөн ир-егеттәребеҙҙең ғаиләһен ҡарау, йорт һалыу, балаларын уҡытыу өсөн ер аяғы ер башына аҡса эшләргә сығып китеүенә өйрәнеп тә бөткәнбеҙ. Был хәлгә ҡарата ике төрлө ҡараш йәшәй. Берәүҙәр, булмағанды көтөп, ҡул ҡаушырып эшһеҙ өйҙә ятҡансы, ситтә бәхетеңде эҙләп ҡарау яҡшыраҡ тиһә, икенселәре иһә үҙ еренә берегеп, хужа булып йәшәй алмай, ситкә китергә мәжбүр булыусыларға йәлләп тә, борсолоп та ҡарай. Ә бит ирҙәр генә түгел, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ араһында ла эш эҙләп сит илгә сығып китеүселәр ишәйә бара. Кешене эсер һыуы, ейәр ризығы йөрөтә, тиһәләр ҙә, яҙған ризығыңдың ситкә сәселмәүе барыбер ҙә яҡшыраҡтыр ул.**
**Тормош мәшәҡәттәрен йырып сығыу өсөн ғаиләһен ҡалдырып, дүрт ай Себер тарафтарында эшләп ҡайтҡан Сәйфулла ҒАЙСИН менән ошо хаҡта әңгәмәләштек.**



- Яҙмыш ҡушыуы шулай булдымы икән, уйламағанда ғына алыҫ Себер, тундра яҡтарында 4 ай эшләп ҡайтырға тура килде, - тип башлап китте С. Ғайсин. - Әлбиттә, сит-ят ерҙә эшләү теләге шулай ҙур булғанлыҡтан түгел, ә донъя мәшәҡәте мәжбүр иткәнлектән оҙон юлға сығырға ниәт иттем. Интернет аша эш табып, уның шарттары менән танышып сығыу бер ҙә ҡыйын булманы. Үҙемә яраҡлыһын тапҡас, электрон почта аша генераль директор менән бәйләнешкә инеп, документтарымдың күсермәһен ебәрҙем. Бер-ике көн үтеүгә мине эшкә алыуҙары тураһында хәбәр килде. Инде иллене үтһәм дә, ыңғай хәбәрҙән ҡанатланып, йәш саҡтағылай дәртләнеп, ҙур сумкалар күтәреп, Ямал яҡтарына сығып киттем. Шулай итеп, Яңы йыл байрамы алдынан ғына Силәбе-Уренгой поезы менән килеп, Пурпе ҡасабаһына аяҡ баҫтым. Сит-ят ерҙәрҙең елдәре лә әсе, ҡары ла һыуығыраҡ, йәнде өшөткәндәй тойолдо. Эш урынының ҡайһы ерҙә икәнен алдан уҡ белешеп ҡуйғас, такси менән тапҡыр шунда юл тоттом. Шул көндә үк эшкә урынлаштым.

Эшкә тотонорҙан алда, һуңынан эш хаҡынан тотоп алып ҡалыу шарты менән, баштан-аяҡ кейендерҙеләр, түшәк кәрәк-яраҡтары бирҙеләр. Был яҡтан барыһы ла көйлө барҙы, зарланырлыҡ булманы. Көнөнә 3 тапҡыр ашатыу, аҙнаһына ике тапҡыр мунса инеү ҡаралғайны. 4 кеше бер вагонда йәшәйбеҙ. Вагон эсе йылы, кухняһы, йоҡо бүлмәһе, телевизоры бар.

Шулай итеп, элек төшкә лә инмәгән сит ерҙә электромонтер булып эш башланым. Әлбиттә, башта еңелдән булманы. Һалҡын Себерҙең үҙәккә үткән еле аҫтында бейек мачтаға менеп, яҡтыртҡыстар ҡуйырға, электр сымдары һуҙырға кәрәк. Ғаиләне ҡалдырып, ер аяғы ер башына, аҡса эшләйем, тип сығып киткәс, бәлә һалып ултырып булмай. Шәхси фирма булғанлыҡтан, һәр аҙымыңды ҡарап, минут-секундыңды тикшереп кенә торалар. Ауыҙыңды асып, йоҡлап йөрөһәң, юҡ бәлә тағып, штраф һалырға ғына торалар. Эшселәр араһында Башҡортостандан тыш, Ҡаҙағстандан, Ырымбур, Силәбе өлкәһенән, Кубань, Ставрополдән килеүселәр күп. Бер яҡтан, сит ерҙә үҙебеҙҙең яҡташтарҙың күплеге ҡыуандырһа, икенсе яҡтан, уларҙың тыуған төйәген, яҡындарын ҡалдырып, үҙ теләктәренән тыш ошондай шарттарҙа эшләп йөрөүе күңелһеҙ уйҙар тыуҙырҙы. Күбеһе 40-ты уҙған, 60 йәшкә тикләмгә ир-егеттәр йыйылған. Кемдер тракторсы, береһе шофер йә иретеп йәбештереүсе булып, балаларын уҡытыу, ғаиләһен ҡарау, икенсеһе кредитын түләү өсөн аҡса эшләргә тырыша.

Бер ай эшләп, минең ниндәйерәк хеҙмәткәр булыуымды күҙәткәс, икенсе урынға - нефть-газ ятҡылығына ебәрҙеләр. Тәүҙә бетон, шунан ҡарҙы тапап, волокуша менән нығытылған юлдан 200-ҙән ашыу саҡрым ер үттек. Йәй көндәре был араны вертолет менән генә үтәләр. Аҙыҡ-түлекте лә аҙнаһына бер тапҡыр вертолет килтерә. Бында телевизор күрһәтмәй, радио һөйләмәй, кеҫә телефонының да МТС бәйләнеше генә тота. Ҡалған өс айҙы ошонда эшләп, килешеү ваҡытын тултырҙым. Эргәгә ҡаргиҙәрҙәрҙә болан тиреһенән тегелгән тундарын кейеп, урындағы халыҡ килеп китә. Улар эшселәр эргәһендә йылынып, беҙҙең менән аралашырға ярата. Ҡайһы берҙә болан ите һатып алырға ла тәҡдим итәләр.

Ғәҙәттә, ситтә эшләгәндәрҙең күбеһе эш хаҡының ваҡытында түләнмәүенә, эш биреүселәрҙең намыҫһыҙлығына зарлана. Мин эшләгән ерҙә был йәһәттән күңелһеҙлектәр булманы. Алдан килешелгәнсә, һәр кем үҙенә тәғәйен эш хаҡын алды. Ашнаҡсылар, төрлө эштә эшләгәндәр айына яҡынса 35-әр мең, тракторсы, шоферҙар - 50-60 мең, экскаваторҙа эшләүселәр 70-шәр мең һум аҡса ала. Әммә талаптар бик ҡаты. Базала эсеп тотолаһың икән - 35 мең һум, нефть-газ ятҡылығында тотолһаң - 200 мең штраф түләргә тура килә. Үкенескә күрә, эсергә яратҡандар бында ла етерлек. Шәхсән үҙем белгәндәр араһынан ғына бер нисә тапҡыр 35 мең штраф түләгәндәр булды. Улар, ғәҙәттә, аҡсаһыҙ ҡайтыуының сәбәбен эш биреүселәрҙең намыҫһыҙлығына, түләмәүенә япһара. Аҡса эшләйем, тип, яҡындарын ышандырып, Себер сығып киткәндәрҙең эсеп, эш хаҡынан ҡалыуы ҡыҙғаныс. 3-4 ай ваҡытын ошонда уҙғарып, эшләгән генә аҡсаһын эскегә, штраф түләүгә тығып, ҡайтыр юлға аҡса таба алмағандар ҙа бар. Ундайҙарға, киреһенсә, өйҙән аҡса ебәреп, ҡайтарып алалар.

Мин эшләгән ерҙә башҡорттарҙы бик хөрмәт итәләр. Уларҙы икенсе срокка ла теләп саҡырып торалар. Етәкселәрҙең: "Башҡорт егеттәре эшкә бигерәк талымһыҙ", - тип маҡтап тороуын үҙемә бер нисә тапҡыр ишетергә тура килде. Ысынлап та, беҙҙең егеттәрҙең яуаплы булыуы ғорурлыҡ уята. Беҙҙең егеттәр эш айырып тормай, тәүлектең ниндәй генә ваҡыты булыуына ҡарамаҫтан, һәр эште бынамын итеп башҡарып ҡуя. Мәҫәлән, минең менән эшләгән экскаваторсы Әбйәлил районы Аһылай ауылы егете Яныбай Сәғитов, шоферҙар - Учалы районы Ҡалуй ауылы егеттәре Әхмәт Вәлиев, ағалы-ҡустылы Вәзир менән Вәлит Килмөхәмәтовтар тырышлығы менән етәкселәрҙән бары тик маҡтау һүҙҙәре генә ишетә. Ҙур техника менән Себерҙе арҡырыға ла, буйға ла йөрөп сыҡҡан был егеттәр бер эштә лә һынатмай. Беҙҙең бригадала 43 кеше эшләне. Төрлө ерҙән килгән 9 милләт вәкиле бергә йыйылыуға ҡарамаҫтан, үҙ-ара уртаҡ тел табып, милләт айырмай, бик дуҫ, татыу йәшәнек.

Тик ситтә эшләүҙе күпме генә маҡтаһаң да, үҙ ереңдә күкрәк киреп эшләүгә етмәй. Ситкә китеүселәрҙең 90 процентын тиерлек нужа йөрөтә. Кемеһеләр уңып, икенсе береһе туңып ҡайта. Ирекһеҙҙән, тормош матурайып, ир-егеттәребеҙ үҙ һауаһын һулап, үҙ еренә аяҡ баҫып эшләһен, балалар үҫтерһен, ғаиләһен ҡараһын, үҙҙәренең көс-ғәйрәтен, уңғанлығын тыуған ерендә күрһәтһен ине, тигән теләк тыуа.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ситтә аҡса эшләүгә ҡарата бына ошолайыраҡ итеп фекерен белдерҙе Сәйфулла ағай. Унын һөйләгәндәренән сығып фекер йөрөткәндә лә берәүгә лә бер ҡайҙа ла майлы ҡалъя әҙерләп ҡуймауҙарына инанаһың. Үҙеңә тейешлеһен алыу өсөн дә бар көсөңдө, кәреңде һалып, ете ҡат тиреңде сығарырға тура килә. Бары тик алдыңа ҡуйғаныңдан тайпылмай, рухыңды төшөрмәй эшләгәндә генә ниәтеңә өлгәшергә була. Йырҙа йырланғанса, ситтә үҫкән әфлисун менән бананға иҫебеҙ китмәй, үҙ еребеҙҙә эшләп, хеҙмәтебеҙҙең файҙаһын күреп йәшәргә лә йәшәргә ине лә бит...**

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**
**Белорет ҡалаһы.**

*✓ Уларҙың, идарала хан торған үҙ дәүләтен төҙөү мөмкинлеге лә була. XVIII быуаттың башындағы ваҡиғалар күрһәтеүенсә, башҡорттар хан урынына дәғүә итеүселәрҙә лә ҡытлыҡ кисермәй.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**XVIII быуаттың башында, 1704 йылда ҡупҡан башҡорт ихтилалы тамамланғандан һуң, төбәктә үҙенсәлекле сәйәси хәл барлыҡҡа килә. Башҡорттар 1711 йылдан 1722 йылға тиклем Рәсәй подданныйлығынан сығып, тулы үҙаллылыҡ яулайҙар. Яһаҡ түләмәүҙән, Үҙәккә бойһонмауҙан тыш, уларҙың хатта бөтә институттары, ханы (башлығы) булған тулы мәғәнәләге дәүләт берләшмәһе, йә ҡаҙаҡтар, ҡарағалпаҡтар менән бергә союз төҙөү мөмкинлеге лә була. Ләкин улар ҡабаттан Рәсәй ҡанаты аҫтына ҡайтыуҙы һайлай. Уларҙы быға нимә этәрә һуң, ниндәй сәбәптәр үҙаллы дәүләт төҙөүгә ҡамасаулай? Тарих фәндәре докторы Булат Әхмәр улы АҘНАБАЕВтың ошо темаға арналған хеҙмәтен тәҡдим итәбеҙ.**

# УН ИКЕ ЙЫЛЛЫҠ ҮҘАЛЛЫЛЫҠ

1704-1711 йылдарҙағы башҡорт ихтилалын өйрәнеүселәр баш күтәреүселәрҙең еңелеүендә шикләнмәй. Был турала И. Ғ. Аҡманов ентекләп яҙа. Ул көстәрҙең бер тигеҙ булмауын, хөкүмәт ғәскәрҙәре уңайлыраҡ шарттарҙа булыуын һәм бының ихтилалдың еңелеүенә килтереүен билдәләй. В. И. Лебедев та хөкүмәт ғәскәрҙәренең еңеүе тураһында әйтә, шул уҡ ваҡытта башҡорттарҙың XVIII быуаттың тәүге сирегендә батша ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғыштарын дауам итеүҙәрен, әсирҙәрҙе бирмәүҙәрен, яһаҡ түләмәүҙәрен дә билдәләй. С. Таймасов иһә, тикшеренеүселәрҙән тәүге булып, 1704-1711 йылдарҙағы ихтилал һөҙөмтәһендә башҡорттар ваҡытлыса үҙаллылыҡ алыуға өлгәшә, тип раҫлай.



Ысынлап та, 1712 йылда Ҡаҙан губернаторы дәүләттең юғары даирәләренә йоғонтоһо булған туғаны Ф.А. Апраксинға башҡорттарға ҡаршы хәрби поход ойоштороу үтенесе менән мөрәжәғәт итә. П.А. Апраксин, хәрби акция яһаҡ түләүсе халыҡтарҙың Башҡортостанға ҡасыуын туҡтатыр ине һәм башҡорттарҙы тура бойһоноуға килтерер ине, тип һанай. Ҡаҙан губернаторы, хөкүмәт башҡорттарҙы ҡабаттан Рәсәй бойһоноуы аҫтына индереүгә ҡаршы килмәҫкә тейеш, тип һанай. "Не можно терпеть, видя таких домашних злодеев толь преславному и великому монарху противных и не послушных", тип яҙа ул. Ләкин Петр I П.А. Апраксиндың үтенесен хупламай, шуға күрә 1711 йылдан алып, 1734 йылда Ырымбур экспедицияһы килгәнгә ҡәҙәр, властар Өфө провинцияһы территорияһында әүҙем хәрби хәрәкәттәр үткәрмәй. Ни өсөн дәүләт хөкүмәте башҡорттарҙы ҡабаттан Рәсәйгә ант иттерергә, подданныйлыҡҡа индерергә ашыҡмай?

Сәбәбе ҡалмыҡ ханы Әйүктең был төбәктә Петр I яҡлы берҙән-бер лидер булыуына ҡайтып ҡала. Быуат башындағы баш күтәреүселәр хәрәкәте барышында ҡалмыҡ ханының хәрби ярҙамы менән хөкүмәт ихтилал масштабын кәметә. Әммә XVIII быуаттың башында төбәктә башҡорттар, ҡарағалпаҡтар, ҡаҙаҡтар араһында союз төҙөү перспективаһы барлыҡҡа килә. Был ҡалмыҡ ханының хәлен киҫкенләштерә. 1715 йылда Әйүк батшаға: "...башкирцы, крымцы, кубанцы и каракалпаки ему неприятели и без помощи русских войск нельзя ему кочевать между Волгою и Яиком", - тип яҙа.

Хәрби коллегия йөҙбаш Д. Стольникҡа 300 һалдат һәм офицеры менән (Өфө һалдат полкы менән) Әйүк янына барырға ҡуша. 1717 йылда ҡаҙаҡтарҙан, башҡорттарҙан, ҡарағалпаҡтарҙан торған ун меңлек ғәскәр Өфө өйәҙен үтеп, Кама аръяғы ҡәлғәләренә үтеп инә һәм Новошешминскты ала.

Ошо шарттарҙа Рәсәй властары үҙҙәренең Башҡортостандағы хәрби көстәре һанын кәметә. Өфө администрацияһы XVII быуат аҙағында 200 уксынан торған һәм ихтилал ваҡытында баш күтәреүселәр тарафынан яндырылған Соловар ҡалаһын ҡабаттан төҙөүҙән баш тарта. XVIII быуаттың егерменсе йылдарында Өфө зindандары диуарҙарынан һәм башняларынан бар артиллерияны алалар. Өфөнөң хеҙмәт итеүсе (служивый) халҡы ла кәмей төшә. 1715 йылда Өфө полкында хеҙмәттә 770 һалдат, 75 дворян, 330 казак тора. Өйәҙҙә тағы ла Бөрөлә гарнизон була. Унда 200 уҡсы хеҙмәт алып бара. 1699 йыл менән сағыштырғанда, хәрбиҙәр 500 кешегә, йәки 25 процентҡа кәмей.

Әммә был һан Өфө гарнизонының ысын иҫәбен күрһәтмәй. Өфө дворян ротаһы ротмистры А.Аничковтың 1720 йылда Сенатҡа ебәргән хатынан күренеүенсә, Өфөлә тейешле штаттың яртыһы ла булмай. Хеҙмәт алып барырға тейешле кешеләрҙең 310-ы ғына йәш һәм һаулыҡ буйынса гарнизон хеҙмәтен алып бара ала. Аничков, Өфөнөң ике ротаһының составы 75 кеше түгел, ә 35 кенә, тип билдәләй. Шулай итеп, Өфө провинцияһына нығытылған хәрби көстәр Өфөнө һаҡлауға ғына етә.

1720 йылда комендант Д. Бахметьев Сенатҡа, ҡарауылға сығыусы хәрбиҙәр Өфөнән 10 саҡрымдан да йырағыраҡҡа китмәйҙәр, тип яҙа. Шулай итеп, хөкүмәт контроле ҡала янындағы бер нисә помещик ауылдарын ҡарауҙан ары китмәй. Ә быға тиклем, XVII быуат уртаһында, Өфө станицалары Яйыҡтың һәм Ашҡаҙарҙың өҫкө ағымдарына тиклем барып етә.

Шуны ла билдәләргә кәрәк, тап XVIII быуаттың 20-се йылдарындағы рәсми документтарҙа "башҡорт урҙаһы", тигән политоним барлыҡҡа килә. Ротмистр А. Аничков уны түбәндәге контекста ҡуллана. Ул: "На многих походах их отцы и родственники побиты и в полон пойманы и до ныне живут посреди Башкирской орды... и их город стал украинной и от иных городов в дальнем расстоянии и посреди оной басурманской воровской орды", - тип яҙа.

"Урҙа" һүҙенең детонатив мәғәнәһен төрлө яҡлап өйрәнгән тикшеренеүсе В.П. Юдин, был һүҙ рус теленә "хан юртаһы", "хан резиденцияһы", йәки "күсмә дала берләшмәһе, күсмә дәүләт" тигән мәғәнәлә ингән, тигән һығымтаға килә. Тимәк, "Башҡорт урҙаһы" терминының барлыҡҡа килеүе башҡорт берләшмәһенең үҙаллылығын фактик рәүештә таныу һөҙөмтәһе була.

Шунышы ҡыҙыҡ, 1722 йылда подданныйлыҡ ҡабаттан ҡайтарылғандан һуң да, рәсми документтарҙа Өфө өйәҙенең аҫаба халҡын "урҙа" тип һанауҙы дауам итәләр. П. И. Рычков был терминды 1734 йылда булған Сенат отчетында ҡуллана. Ул: "Выписанные города Уфы середина всей Башкирской орды, Бирск подчинен Уфе, а построенные для помощи Уфе Мензелинские, хотя в Казанском уезде, но при самых же башкирцах",- тип яҙа.

Шулай итеп, 1711 йылдан алып 1722 йылға тиклем, ун ике йыл дауамында, башҡорттар Рәсәй подданныйлығынан сыҡҡан, үҙаллы халыҡ була. Уларҙың, идарала хан торған үҙ дәүләтен төҙөү мөмкинлеге лә була. XVIII быуаттың башындағы ваҡиғалар күрһәтеүенсә, башҡорттар хан урынына дәғүә итеүселәрҙә лә ҡытлыҡ кисермәй.

1704-1711 йылдарҙағы ихтилал барышында, Башҡортостанда шикле Солтан-Хаҙый исемле хан менән бер үк ваҡытта, ысын сыңғыҙит (Сыңғыҙхан тоҡомо), билдәле тархан Алдар Иҫәкәевтың теләктәшлеге тапҡан Ырыҫ-Мөхәммәт тә була. Ләкин ул әсирлеккә эләгә һәм Рәсәй властарына бирелә. "В прошлых годах, когда приходил в Уфимский уезд на Ногайскую дорогу из каракалпаков Рысмухамед хан с воинскими людьми на вашу императорского величества вотчину, умышляя разорение и мы все четырех дорог с ними билися, и на том бою из нас и их многие побиты и ранены, а его Рысмухамеда поймали да наших башкирцев, которые к тем каракалпакам пристали, чинили дурна, а именно Ногайской дороги Юрматинской волости Бакалана Топанова, Исентея Тлевлина, Бурзянской волости Сатлыка Утяпова, да из них же каракалпаков, которые пристали к ним ходил на Сибирской дороге Мухамед-хан, а Сибирской дороги Гайнинской волости Текниша да Арслана Яныурсова поймав с ним Рысмухаметом отдали на Уфу", тигән юлдарҙы табабыҙ ул осор документтарҙа.

**Булат АҘНАБАЕВ,**
**тарих фәндәре докторы**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

## БАШҠОРТТАР

### Йомғаҡлау

Бейәләрҙе иртә ҡолонлатыу бары тик йылы ҡураларҙа башҡарыла, ә көндәр йылынғас, улар яланда ла ҡолонлай. Июнь-июлдә, ҡолондарына 2-3 ай булғас, өйөрҙән 35-40 бейә һауырға һайлап алына. Һауын ваҡытында (6 сәғәткәсә) ҡолондар бейәнән айырыла һәм махсус кәртәләнгән участкаларҙа тотола. Уларға яңы сабылған бесән, он һибелгән һоло һаламы йәки көрпә ашаталар. Башҡа ваҡыттарҙа ҡолондар бейәләр менән бергә көтөлә.

Ҡайһы бер колхоздарҙа һауын бейәләрен ике бер иш төркөмгә айырып, алмашлап бишәр көн көнөнә 5-6 тапҡыр һауалар. Июль һуңында бейәләрҙе ҡымыҙ эшләү өсөн һауыу туҡтатыла һәм улар өйөргә ҡайтарыла. Көҙөн, һыуыҡтар башланыу менән 6-7 айлыҡ ҡолондар бейәләрҙән айырылып, ябыҡ йәки ауырыу йылҡылар менән бергә фермала йәки яҡшы итеп йыһазландырылған йылытылған ат аҙбарҙарында ҡалдырылалар. Улар йөк аттары менән ҡушылмай. Йөк аттары ҡышҡылыҡҡа бригадаларға бүлеп бирелә.



Бөтөн өйөр көҙгөһөн бер көтөүгә туплана **(һүрәт)**. Унда йөк аттары ла була. Икенсе көтөүҙе 4-5 йәштәге тайҙар тәшкил итә.

Дүрт йыл үткәс, йәш айғырҙарҙы бестерәләр һәм улар ныҡ көслө булһалар, эшкә йәлеп итәләр, көсһөҙөрәктәре дөйөм көтөүҙә ял итә.

Ныҡ булмаған бурандарҙа тибендәге көтөү тауҙар ышығында тора, ә инде көслө бурандар башланғас, ат аҙбарҙарына йәки ауылға ҡыуып алып ҡайтыла. Ҡайһы бер колхоздарҙа бындай осраҡҡа тип яланда махсус урындар эшләнә һәм уларҙа аттарҙы ашатыу өсөн бесән һаҡлана. Ат фермалары эргәһендә тайғаҡ осорҙа өйөр аттарын ашатыу өсөн бесән запасы булдырыла.

Тоҡом айғырҙары сентябрь һуңынан яҙ башланғанға тиклем ат аҙбарҙарында тотола һәм көтөүҙе көтөүсе көтә. Йыл миҙгеленә ҡарап, көтөүселәр һаны ла үҙгәреп тора. Йәйгеһен өйөрҙө ике көтөүсе алмашлап көтә. 500 баш йылҡыны берләштергән ҙур көтөүҙә көтөүселәр һаны, нигеҙҙә, 8-гә етә. Улар көн һайын бер оло көтөүсе менән бергә дүртешәрләп көтә.

Аҙыҡ базаһын нығытырға һәм бесән әҙерләү күләмен арттырырға ярҙам иткән үлән сәсеү әйләнешен үҙләштереү колхоздарға аттарҙы ҡышҡы көтөүҙә яҡшыраҡ көтөү, уларға өҫтәмә рәүештә бесән ашатыу мөмкинлеген бирә.

***✓ Әлбиттә, етеҙ, шуҡ, тиктормаҫ булыуҙары өсөн балаларҙы һис әрләргә ярамай. Улар сәғәттәр буйы уйлау талап ителгән бер төрлө "эш" менән булып, арый, шуға организмдары хәрәкәт талап итә.***



**Ауылға бер ҡайтҡанымда остазым, Баймаҡ районының Теләс урта мәктәбендә физкультура уҡытыусыһы булып эшләүсе Самат НАМАҘҠАЕВ менән һөйләшеп ултырҙыҡ. Самат ағайҙы районда, республикала һәләтле тренер булараҡ яҡшы беләләр. Ул районыбыҙҙы, республикабыҙҙы данлар тиҫтәләгән спортсы егет һәм ҡыҙ тәрбиәләне. Әңгәмәбеҙ ауыл ерендә спортты, сәләмәт йәшәү рәүешен нығытыу тураһында барҙы.**

# ШУҠ БАЛАНЫ ТЫЙМАҒЫҘ,

## йәки Ауылда спортсылар тәрбиәләү сере тураһында

**▸ Халҡыбыҙҙа "хәрәкәттә-бәрәкәт" тигән бик тапҡыр әйтем бар. Ишетеүемсә, һеҙ бала саҡтан шуҡ, һеләүһендәй етеҙ булғанһығыҙ. Әле лә егеттәргә алыштырғыһыҙ күренәһегеҙ. Спортҡа маһирлығығыҙ ҡайҙан килә?**

- Хәрәкәтсәнлек, моғайын, һәр балаға хастыр. Баланың етеҙлеген үҫтереү ысулдарын белергә һәм файҙаланырға ғына кәрәк. Башланғыс синыф уҡыусылары араһында орсоҡ һымаҡ тиктормаҫ малайҙар күп ул. Был - бик шәп күренеш. Ләкин уҡытыусы кешегә ундай балаларҙы дәрескә ылыҡтырыу, иғтибарын дәрестәге материалға йүнәлтеү еңелдән түгел икәнлеге лә барыбыҙға ла мәғлүм. Уларҙы бер татлы һүҙ менән дә алдаштырып, әүрәтеп, башҡалар менән бер рәткә ҡуйыу мөмкин булмаған эш. Ни эшләргә? Мин былай итәм. Мәҫәлән, 1-се, 2-се синиф уҡыусыларын спорт залына алып барған саҡта шундай хәрәкәтсән балаларҙың яурындарына ҡағылып, "Минең эргәмдә генә бараһың", тип, әйтеп ҡуям. Юғиһә, улар коридорҙа йүгереп, башҡаларға ҡамасаулай башлай. Әлбиттә, етеҙ, шуҡ, тиктормаҫ булыуҙары өсөн балаларҙы һис әрләргә ярамай. Улар сәғәттәр буйы уйлау талап ителгән бер төрлө "эш" менән булып, арый, шуға организмдары хәрәкәт талап итә. Беҙ, физкультура уҡытыусылары, уларҙа "ауыҙлыҡланған", "ойоп барған" "аҡбуҙат"ҡа ирек бирәбеҙ. Үтә хәрәкәтсәнлек 20-21 йәшкә тиклем күҙәтелә лә, бөтә. Артабан йәш кеше бер аҙ баҫыла төшә.

Мин дә бала сағымда нык хәрәкәтсән булдым. Шулай ҙа үҙемде ҡәҙимге малай булғанмындыр, тип уйлайым. Бәләкәйҙән төрлө урам, миҙгел уйындары уйнаныҡ. Бура, сөрәкә, ун ике таяҡ, келүк һуғыу, ҡылыс алышыу, үҙебеҙ яһаған атҡыстар менән атышыу булһынмы, яҡшы итеп үткерләнгән конькиҙар менән хоккей уйнау булһынмы - һанаһаң, күп улар. Ҡылысты талдан, муйылдан ысынға оҡшатып яһай инек. Ҡалҡандарыбыҙ ҙа булды. Хәҙерге йәштәрҙең ҡылыс алышыуын, хатта келүк һуғыуын да күргәнем юҡ. Келүк уйынының ғына ла бер-ике төрөн уйнаныҡ. Береһе - ҡәҙимгесә бер урында тороп уйнауҙы, икенсеһе - сәпте күсерә-күсерә барып, аҙағынан уйын башланған урынға шәп итеп йүгереп килеүҙе үҙ эсенә ала. Уйын аҙағында балалар ярты саҡрым самаһы араны йән көскә йүгерергә тейеш. Етеҙлекте бына ниндәй уйындар тәрбиәләгән! Ә ниңә беҙҙең быуынға уйындар күберәк эләккән, йә булмаһа, ниңә беҙҙең быуын күберәк урамда уйнаған, тип һораһағыҙ, бының яуабы ябай ғына: элек, беренсенән, компьютерҙар булманы, икенсенән, урам уйындары, миҙгел уйындары киң таралғайны. Һәр ғаиләлә кәмендә 6-7-шәр бала, ата-әсәләр таңдан кискә тиклем эштә. Бәләкәйерәк балаларҙы олораҡтары ҡарап үҫтерә. Беҙ ҙә ете балалы ишле ғаиләлә үҫтек. Атай ҙа, әсәй ҙә эштә булғанға күрә, беҙҙе ағайҙар ҡараны, үҙҙәре менән уйындарға алып йөрөттә.

**▸ Спорт һеҙҙең өсөн нимә ул?**

- Тәү сиратта - ғаиләмде ашатырға, аҫырарға ярҙам иткән төп эшем. Икенсенән, спорт - ул минең ялым. Көндәлек эшемдән, йорт-ҡура мәшәҡәттәренән бушаған саҡта ҡышҡы кистәрҙә егеттәр менән төрлө уйындар уйнайбыҙ. Теләс ауылында бик шәп ғәҙәт бар - ауыл ирҙәре һәр кис спорт залына килеп, волейбол уйнай. Майҙансыҡтың бер яғына - етерлек тәжрибә туплаған, ярыштарҙа сыныҡҡан ололар командаһы, икенсе яҡта - көсө, дәрте ташып торған мәктәп уҡыусылары. Йәштәр шулай өйрәнә, ә ололар - үҙҙәренең сәләмәтлеген контролдә тота. Беҙ ҙә ҡасандыр йәш, тәжрибәһеҙ инек, ағайҙар араһында уйнап, волейбол уйыны серҙәренә төшөндөк. Ә волейболға ылығыуыма саңғыла йөрөүөм булышлыҡ итте. Саңғыла йүгереп килгәс, волейбол уйнарға ҡала инек. Шулай итеп, бер атыуҙа ике ҡуян алдыҡ - саңғыны ла, волейболды ла үҙләштерҙек. 6-сы синыфтан алып 10-сыны тамамлағансы саңғы түңәрәгенә йөрөнөм. Ул замандарҙа районда, районда ғына түгел - ауылда ла саңғы буйынса дәғүәләшеү, ай-һай, бик көслө ине. Шуға күрә, 10-сыны тамамлағас, Теләстә үткәрелгән район беренселегендә чемпион исемен яулауымды әһәмиәтле еңеүҙәремдең береһе, тип һанайым. Беҙҙең Яғалса тауында саңғы трассаһы элек һәр ваҡыт булды. Ошо таныш трассала үткәрелгән ярышта беренсе урын алдым. Әле бына Лилиә ҡыҙыбыҙҙың да мәктәптә уҡыған сағында саңғыла уҙышыу буйынса район беренселегендә призлы урын яулауына һөйөнөп бөтә алмайбыҙ. Айбулат улыбыҙ ҙа көрәш буйынса район ярыштарында гел тәүге урындар яуланы. Әле ул Магнитогорск дәүләт университетында уҡый, спортты ла онотмай - ауыр атлетика менән шөғөлләнә. Матур әҙәбиәт теле менән әйткәндә, спорт - беҙҙең ғаиләнең "йөҙөк ҡашы".

Институтта уҡыған сағында бер уҡыусым килеп: "Самат ағай, шул тиклем һәйбәт итеп уҡытҡанһығыҙ, зачеттарымды һә тигәнсә бирәм, төркөмдә иң шәбе - мин. Рәхмәт һеҙгә", - тигәйне. Уҡыусыларымдан рәхмәт һүҙҙәре ишетеү кинәнес бирә. Спортты үҙемдең генә түгел, ә ғаиләмдең, хатта, уҡыусыларымдың күңеленә яҡын төшөнсәгә әүерелдерә алыуым менән бәхетлемен.

**▸ Самат ағай, әгәр спортты музыка сәнғәте менән сағыштырыу мөмкин булһа, мин һеҙҙе донъялағы барлыҡ музыка ҡоралдарында ла яҡшы уйнаған виртуоз музыкант тип атар инем. Универсал спортсы булыуығыҙҙың сере ниҙә?**

- Бының сере ябай ғына: мин ярыштарҙа ҡатнашырға яратам. Совхозда ун йыл спорт инструкторы-методист булып эшләү дәүеремдә командаларҙы бихисап ярыштарға әҙерләргә, уларҙа үҙемә лә ҡатнашырға тура килде. Һәр ярыш үҙенсә һабаҡ бирә. Шул уҡ ваҡытта спорттың бер төрө буйынса ярышта яһаған һығымтаңды, ғәҙәттә, икенсе төр буйынса ярышта ла ҡулланаһың. Еңелһәң, тағы сәмләнеберәк әҙерләнәһең. Спорт төрҙәре тәүҡарашҡа ғына төрлө-төрлө һымаҡ. Ысынында улар араһында уртаҡ һыҙаттар ифрат күп. Әйтәйек, өҫтәл теннисы менән волейбол араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар? Әгәр кеше теннис шарын өйрөлтөп һуға, шулай уҡ, өйрөлөп килгән шарҙы дөрөҫ итеп "эшкәртеп", кире һуға белә икән, был оҫталыҡ волейболда ла ярҙамға киләсәк. Туптың "холҡон" бер аңлап алһаң, футболында ла, волейболында ла, баскетболында ла, теннисында ла, өҫтәл теннисында ла, башҡа уйындарҙа ла үҙеңде "һауалағы ҡош" һымаҡ хис итәсәкһең. Мәҫәлән, миңә спорттың 7-8 төрөнән район чемпионы исемен яуларға насип булды. Баймаҡ ауыл хужалығы техникумы етәкселеге мине республиканың 8 техникумы уҡытыусылары араһында йылына бер тапҡыр үткәрелгән ярышҡа өс төр: саңғы, волейбол һәм өҫтәл теннисы буйынса ярыштарға алып йөрөттө. Шул ярыштарҙың береһендә саңғы ярышында еңеп сыҡтым. Өҫтәл теннисы буйынса ла бер-нисә йыл рәттән икенсе урын алдым.

**▸ Өҫтәл теннисы буйынса өс тапҡыр район чемпионы булараҡ, ошо спорт төрө тураһында ла һөйләп үтегеҙ әле. Был уйын нимәһе менән ҡыҙыҡлы?**

- Өҫтәл теннисын ябай ғына уйын тип уйлайҙар. Ҡатмарлы, хатта, ниндәйҙер кимәлдә етди әҙерлек талап итә торған уйын ул. Ҡайһы бер аҙыҡтарҙы "батшалар ризығы" тиҙәр. Был уйынды ла "батшалар уйыны" тип атаһаҡ, арттырыу булмаҫтыр. Уның иң төп нескәлектәрен белмәй тороп, һәйбәт итеп уйнап булмай ул. Алдараҡ зыр әйләнеп килгән теннис шарын "эшкәртеп", һуғып ебәреү тураһында әйтә биреп ҡуйғайным. Әгәр ошо әйләнештең ҡаршыһына һуҡмаһаң, шар ситкә осасаҡ. Бер китапта тенниста бесән сапҡандағы һымаҡ көсөргәнеш талап ителеүе тураһында яҙылған. Был, ысынлап та, шулай. Шәп итеп алға, йә артҡа барыу булһынмы, сүкәйеү, һулға, уңһа ынтылыуымы - был элементтар етерлек әҙерлеге булмаған кешегә ауыр биреләсәк. Белгестәр 40 йәштән үткәндәргә был уйын менән артыҡ мауыҡмаҫҡа тәҡдим итә. Ҡайһы саҡта артыҡ оҙаҡ уйнаһаң, башҡа көс төшә - түбәтәй кейгән һымаҡ тойола башлай. Шулай ҙа, оло йәштә булһалар ҙа, теннис менән шөғөлләнгән таныштарым да бар. Былтыр Хәйбулла районында үткән уҡытыусылар ярышында 76 йәшлек бер ағайҙың теннис уйнауын күреп, хайран ҡалдыҡ. Беҙҙең икенсе өҫтәлдәге уйынсыбыҙҙы ла еңде ағай. Ул уйынсыбыҙҙы бер ҙә насар уйнай, тип әйтерлек түгел - күнекмәләр үтеп, ярышҡа яҡшы әҙерләнеп барғайны, тырышһа, хатта районда беренсе урынға сығырҙай егет ул. Бер ыңғайҙан, тағы бер хәл тураһында ла һөйләп үтәйем. Өфөлә үткән ярышта Мәләүездән килгән 60 йәшлек бер ағайҙың 24 килограмлыҡ гер күтәреү буйынса беренселек алыуын да күреп һоҡландыҡ. Ағайҙы хатта атаһынан да мыҡтыраҡ кәүҙәле бәһлеүән улы ла еңә алманы. Ошондай хәлдәрҙе күрәһең дә, бына ни өсөн спорт менән шөғөлләнергә кәрәк икән, тигән һығымтаға киләһең.



***Былтыр Хәйбулла районында үткән уҡытыусылар ярышында 76 йәшлек бер ағайҙың теннис уйнауын күреп, хайран ҡалдыҡ. Беҙҙең икенсе өҫтәлдәге уйынсыбыҙҙы ла еңде ағай. Ул уйынсыбыҙҙы бер ҙә насар уйнай, тип әйтерлек түгел - күнекмәләр үтеп, ярышҡа яҡшы әҙерләнеп барғайны, тырышһа, хатта районда беренсе урынға сығырҙай егет ул. Бер ыңғайҙан, тағы бер хәл тураһында ла һөйләп үтәйем. Өфөлә үткән ярышта Мәләүездән килгән 60 йәшлек бер ағайҙың 24 килограмлыҡ гер күтәреү буйынса беренселек алыуын да күреп һоҡландыҡ. Ағайҙы хатта атаһынан да мыҡтыраҡ кәүҙәле бәһлеүән улы ла еңә алманы. Ошондай хәлдәрҙе күрәһең дә, бына ни өсөн спорт менән шөғөлләнергә кәрәк икән, тигән һығымтаға киләһең.***

**▸ Һеҙгә ҡарап, мәктәп уҡыусылары, йәштәр спортҡа ылыға. Әле ауылда йәштәрҙе спортҡа йәлеп итеү мәсьәләһе нисек тора?**

- Бөгөн йәштәр менән махсус шөғөлләнеүсе кеше юҡ, ҡыҙғанысҡа ҡаршы. Совхоз бөткәс, спорт инструкторы штаты ла ҡыҫҡартылды. Тормошобоҙ берәй мәл ыңғай яҡҡа үҙгәрер ул, гел былай насар бармаҫ, моғайын. Тик ул саҡта элекке, яҡшы заман күрһәткестәрен ҡыуып етеү ҙә ҡыйынға төшөр шул, шуныһы үкенес. Спорт - ҡуҙ һымаҡ: илке-һалҡылыҡты, үҙе тураһында онотоуҙы яратмай. Ауылдың

*✓ Мин, мәçәлән, фотоаппарат, Илшат - велосипед, ә Йәмил ноутбук һатып алдыҡ. Кино, театр, концерт, төрлө күргәҙмәләргә йөрөү, ҡыҙҙарыбыҙға сәскә һатып алыу өсөн аҡсаны атай-әсәйҙән һорап ултырып булмай бит инде.*



киләсәгенә килгәндә, балалар барлығы күңелде йылыта. Бер-нисә йыл дауамында мәктәптә өçтәл теннисы уйнау туҡтатылып торғайны. Һөҙөмтәлә, күп балалар был уйынды белмәй буй еткерҙе. Күп нәмә етәксенән тора. Әгәр етәксе теге йәки был башланғысты кәрәкле, тип тапһа, хеҙмәткәрҙәренең идеяларын күтәрмәләһә, артығы кәрәкмәй ҙә. Әлбиттә, ул ярҙамды артабан үçтерерлек хеҙмәткәрҙәр ҙә кәрәк. Әгәр улар булмаһа, хәрәкәт һүнә. Ауылыбыҙҙы Илшат Хәмит улы Ситдиҡов етәкләгән йылдарҙа уның ярҙамы баһалап бөткөһөҙ ҙур булды. Зөлфәт Миңлеғоловҡа теннис түңәрәге уҙғарыу өсөн сәғәттәр бирҙе. Бик шәп башланғыс булды был. Һөҙөмтәлә, тренер бер-нисә уҡыусыны район чемпионы кимәленә еткерҙе. Салауат Әбсәләмов атлы егетебеҙ, мәктәпте күптән тамамлаһа ла, әле булһа республика ярыштарында уңышлы сығыш яһай.

Бынан бер-нисә йыл элек район етәкселеге Темәстә спорт комплексы төҙөргә лә вәғәҙә иткәйне. Был яңылыҡты халыҡ бик шатланып ҡабул итте. Ни өсөн тигәндә, ауылдың бөтөн стандарттарға яуап биргән спорт залы булмауы күптән күңелде ҡыра ине. Тик ниндәйҙер сәбәптәр арҡаһында спорт комплексын Яковлевка ауылында төҙөргә ҡарар иттеләр...

**▸ Самат ағай, һеҙҙе үҙенсәлекле "ҡотҡарыу түңәрәге" тип атаһаҡ, хата булмаç. Ни өсөн тигәндә, берәй ауылда спортты үçтерергә теләһәләр, ғәҙәттә, һеҙгә мөрәжәғәт итәләр. Заманында Әмин ауылы мәктәбен районда иң алдынғы саңғысылар әҙерләүсе мәктәп иттегеҙ, Темәс ауылы мәктәбенә күскәс, бында ла республика ярыштарында беренсе урындар алырлыҡ көрәшселәр тәрбиәләнегеҙ. Әле Таһир мәктәбендә лә көрәш күнекмәләре үткәрәһегеҙ икән. Ауылда спортты үçтереү өсөн нимә кәрәк һуң? Тренер булараҡ, башланғыс кимәлдәге спортсыларҙы, әйтәйек, республика ярыштарына әҙерләгәндә, һеҙ эште ниҙән башлайһығыҙ?**

- Бында тренерға ла күп нәмә бәйләнгән, әлбиттә, шулай ҙа барыһы ла баланың үҙенән тора. Башлап шөғөлләнеүселәр, ғәҙәттә, үҙҙәренең көсөнә, мөмкинлектәренә шикләнә башлай. Тәү сиратта баланы йәлеп итә, ҡыҙыҡһындыра белергә, ошо спорт төрөнөң иң төп һабаҡтарын бирергә кәрәк. Тәрбиәләнеүселәргә иң тәүҙә һәр нәмәнең әтнәкәһе барлығын аңлатам. Шуны аңлаһа, унда үҙ-үҙенә ышаныс барлыҡҡа килә. Тағы бер мөһим әйбер бар. Ҡайһы бер спорт төрҙәрендә аҙмы-күпме хәүеф тә була. Шуға, тренер һәр саҡ ата-әсәләр менән дә әүҙем эшләргә бурыслы. Ахырҙа, иң мөһиме - ярыштарҙы традицияға әйләндереү кәрәк. Алда етди ярыш тороуын белгән кеше спорт менән шөғөлләнеүенән туҡтамаясаҡ. Тамара Танһыҡкужинанан: "Һеҙ ярыштарға нисегерәк әҙерләнәһегеҙ?" - тип һорағас, ул: "Мин был ярыш тураһында бер йыл буйына уйлап йөрөйөм", - тип яуап биргәйне. Был, тимәк, үҙ алдыңа оло маҡсат ҡуйыу тигән һүҙ ул.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ
әңгәмәләште.**

ЙӘШТӘР - ЙӘШТӘРСӘ



# УРАМ МУЗЫКАНТТАРЫН...

## тыңлаусы ла, түләүсе лә бар, имеш

**Баш ҡаланың парк һәм башҡа ял итеү урындарында төрлө музыка инструменттарында уйнап аҡса эшләүсе егет һәм ҡыҙҙарҙы һәр кем күргәне барҙыр. Улар араһында яңғыҙ башҡарыусылар ҙа, дуэт менән уйнаусылар ҙа, хатта бер-нисә кешенән торған бәләкәй генә оркестр ҙа бар. Бындай үҙенсәлекле "концерт"тар бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Тамаша ҡылыусылар бигерәк тә балаларға, үçмерҙәргә аҡса йәлләмәй. Уларҙың был шөғөлөнә ыңғай ҡараусылар ҙа, балаларына ошо юл менән аҡса эшләргә юл ҡуйыусы ата-әсәләргә ҡарата ризаһыҙлыҡ белдереүселәр ҙә бар. Шулай бер көн Ҡала советы янындағы ял паркында музыка ҡоралында уйнап тороусы өс үçмер эргәһендә туҡтаған апайҙарҙың: "Был балаларҙың ата-әсәләренә ниндәй ҙә булһа административ яза бирергә кәрәк. Ниндәй эçе көндә балаларҙы урамға аҡса йыйырға сығарып ебәргәндәр. Үҙҙәренә оят түгелме икән ни?" тиеүҙәрен ишеткәс, музыканттарҙың үҙҙәренә мөрәжәғәт итмәйенсә булдыра алманым. Ысынлап та, урамда музыка ҡоралында уйнап, бер аҙ аҡса йыйырға уларҙы ата-әсәләре мәжбүр итәме, әллә был үҙҙәренең теләге буйынса эшләнгән эшме? Ни өсөн улар аҡса эшләүҙең нәҡ ошо юлын һайлаған? Ошо һәм башҡа һорауҙарға үҙҙәрен Арсен, Илшат һәм Йәмил тип таныштырған йәш музыканттар яуап бирә.**

**➔ Егеттәр, музыка ҡоралы ярҙамында аҡса эшләү ниәте ҡайҙан барлыҡҡа килде? Атай-әсәйегеҙҙең, уҡытыусыларығыҙҙың быға ҡарашы нисек?**

**Арсен:** Беҙ музыка йүнәлешендә белем биргән уҡыу йортонда уҡыйбыҙ. Уның исемен әйтә алмайбыҙ, сөнки уҡытыусыларыбыҙ был шөғөлөбөҙҙө хупламаясаҡ.

**Илшат:** Республиканың төрлө райондарынан уҡырға килгәнбеҙ. Ә ауылдаштарыбыҙ беҙҙең турала уҡыһа, атай-әсәйҙәребеҙгә ыңғай ҡарамаясаҡ, сөнки улар өсөн урамда музыка ҡоралында уйнап, аҡса эшләү сит һәм ҡырағай күренеш. Шуға күрә гәзит битендә уҡыу йортобоҙ тураһында мәғлүмәт бирмәһәгеҙ ине.

**Йәмил:** Ауылдаштар эштең айышына төшөнмәйенсә, атай-әсәйҙәребеҙгә ғәйеп ташлар, тип ҡурҡабыҙ. Был шөғөлгә тотонор алдынан өйҙәгеләргә барыһын да яҡшылап аңлаттыҡ һәм уҡыуыбыҙға зыян килмәйәсәк, тип ант иттек. Әгәр ата-әсәләр риза булмаһа һәм хупламаһа, беҙ был эшкә тотонмаç инек, моғайын.

**Илшат:** Бала саҡтан мин - баянда, Арсен - саксофонда, Йәмил тромбонда уйнай. 8-9-сы кластарҙан башлап таныштар саҡырыуы буйынса айырым да, бергәләп тә туй мәжлестәренә, юбилей, тыуған көн кисәләренә барып уйнап йөрөйбөҙ. Бер ерҙә уйнаһаң, ундағы ҡунаҡтар күҙенә эләгәһең һәм оҡшатһалар, улар артабан үҙҙәренең байрамын йәмләргә саҡыра. Шулай сылбыр буйлап йөрөйһөң дә йөрөйһөң, берҙән, тәмлетатлы ризыҡҡа туйып ҡайтаһың, икенсенән, кеçәгә аҡса ла төшә.

**Арсен:** Ләкин бындай ҡунаҡтарға йыш йөрөп булмай, сөнки улар, ғәҙәттә, кисен уҙа, ә был ваҡытта беҙ ятаҡтан сыға алмайбыҙ. Шуға күрә көндөҙ аҡса эшләү мөмкинлеге биргән ысул таптыҡ - икенсе йыл инде ошо паркта уйнайбыҙ.

**➔ Урамдағы тәүге "концерт"ығыҙ ниндәй тәьçорттар ҡалдырҙы? Халыҡ нисек ҡабул итте?**

**Йәмил:** Беренсе тапҡыр урамда уйнауыбыҙҙы әле булһа көлөп иçкә алабыҙ. Төрлө музыкаль конкурстарҙа, абруйлы баһалама ағзалары, ҙур сәхнәләрҙә меңәрләгән кеше алдында сығыш яһағаныбыҙ булһа ла, парҡҡа килеп баçҡас, ҡаушап ҡалдыҡ.

**Арсен:** Уны-быны уйламайынса, парктың эсенә үк инеп, баяндың ҡумтаһын йәйеп ҡуйып, уйнап ебәреүебеҙ булды, янбыҙға парк һаҡсылары килеп етте. Беҙ уларҙы сығышыбыҙҙы тыңларға килгәндәр икән тип, тағы ла тырышыбыраҡ, дәртләнеберәк уйнай башланыҡ. Ә улар, баҡтиһәң, беҙҙе парктан ҡыуып сығарырға, тип йүгереп килгәндәр икән.

**Илшат:** Ярай, бер көйҙө уйнап бөткәнсе көтөп торҙолар әле улар, шунан ғына ишеккә табан күрһәттеләр. Көйҙө туҡтатып ҡыуып сығарһалар, беҙҙең ҡаушауҙан былай ҙа сығырҙай булып типкән йөрәктәр бөтөнләй туҡтап ҡалыуы ла бар ине.

**Арсен:** Ләкин шул бер-нисә минут эсендә лә халыҡтың иғтибарын йәлеп итә алдыҡ - ҡумтабыҙға тәүге 100 һум инеп ятты. Был уңыш беҙҙең һаҡсылар менән булған осрашыуҙан һуң төшкән танауҙарҙы күтәрҙе, ышаныс өçтәне. Шуға парктың ишегенән сығып, бер аҙ ситкә киттек тә, тағы ла һыҙҙырып уйнап ебәрҙек.

**Илшат:** Ҡала халҡы урам музыканттарына өйрәнеп бөткән, шуға күрә уларҙы шаҡ ҡатырҙыҡ, тип әйтеп булмай. Эргәбеҙҙән бер ниндәй эмоцияһыҙ ғына үтеп китеүселәр ҙә, янбыҙҙа туҡтап, тыңлап тороусылар ҙа булды. Ике йыл ваҡыт үтте - тамашасы үҙгәрмәй. Ҡайһы берәүҙәр туҡтап тормайынса ғына аҡса һалып китә. Туҡтаусыларҙы ла ике төркөмгә бүлергә була: беренселәре тыңлай ҙа ары атлай, ә икенселәре әҙме-күпме аҡса һала.

**Йәмил:** Оçталыҡ тәжрибә менән килә, тигәндәй, хәҙер парк янында ниндәй йәштәге аудитория йөрөүенә ҡарап уйнарға өйрәндек. Йәштәр күберәк булһа - заманса йырҙар, ә ололарға ретро көйҙәрен һыҙҙырабыҙ. Репертуарыбыҙҙа башҡорт, урыç, сит ил көйҙәре бар. Шулай итеп, һәр кемдең күңеленә хуш килерлек, уның ҡолағына эленерлек көй уйнау аҡсаның күберәк төшөүенә юл аса.

**➔ Һеҙҙең ошо рәүешле аҡса эшләүегеҙгә кире ҡараштағылар ҙа бар. Уларға нимә тип әйтер инегеҙ?**

**Йәмил:** Был шөғөлгә тотонғанда уның кире яҡтары булырын да күҙаллай инек, ләкин ҡайһы берәүҙәрҙең ситуацияны үтә лә ҡуйыртып, ҡарайтып ебәреүенә генә әҙер булмай сыҡтыҡ. Урамға уйнарға сыҡҡандың тәүге ваҡыттарында беҙҙе оялтырға тырышыусыларҙан, әрләп китеүселәрҙән, атай-әсәйҙәребеҙҙе беҙҙе ҡарамауҙа ғәйепләүселәрҙән төрлө һүҙҙәр ишетеп, баҙап ҡала инек. Үҙебеҙҙе, ысынлап та, ниндәйҙер яраҡһыҙ эш эшләп тотолған кешеләр хәлендә ҡалыуыбыҙ әле лә иçтә. Ләкин ваҡыт үткән һайын үҙебеҙҙә был негативҡа ҡаршы торорлоҡ рухи көс булдырҙыҡ һәм хәҙер бер кемгә лә, бер ниндәй һүҙгә лә иғтибар итмәйбеҙ.

**Илшат:** Беҙ бер кемде лә алдамайбыҙ, урламайбыҙ, төрлө мутлашыуҙар ойоштормайбыҙ, ә үҙебеҙҙең хәләл көсөбөҙ менән аҡса эшләйбеҙ. Һәр кем үҙе алған профессияһы буйынса хеҙмәт итеп эш хаҡы ала. Күптәр үҙҙәренең шөғөлөн килем килтереүсе ысулға әйләндерә. Музыка - беҙҙең киләсәгебеҙ, көн күрер шөғөлөбөҙ, шуға әле үк үҙ һөнәребеҙҙән, һәләтебеҙҙән файҙа күрәбеҙ икән, бының бер ниндәй насарлығы ла юҡ, тип иçәпләйем.

**Арсен:** Был шөғөлгә аслыҡтан йәки кейергә кейем булмауҙан тотонманыҡ. Шуға күрә атай-әсәйҙәребеҙҙең тәрбиәһен шик аçтына ҡуйыусылар яңылыша. Атай-әсәйҙәребеҙ беҙҙе яҡшы тәрбиәләй, бөтә нәмә менән дә тәьмин итә, аҡса бирә. Эшләп тапҡан аҡсабыҙ ҙа төрлө кәрәк-яраҡтар һатып алырға ярап ҡала. Әлегә тиклем аҡсаның кеçә тишкәнен ишеткәнебеҙ юҡ. Беҙҙең дә аҡса талап иткән төрлө мауығыуҙарыбыҙ бар һәм улар өсөн түләүҙе үҙ өçтөбөҙгә алғанбыҙ. Мин, мәçәлән, фотоаппарат, Илшат - велосипед, ә Йәмил ноутбук һатып алдыҡ. Кино, театр, концерт, төрлө күргәҙмәләргә йөрөү, ҡыҙҙарыбыҙға сәскә һәм тәмлекәстәр һатып алыу өсөн аҡсаны атай-әсәйҙән һорап ултырып булмай бит инде.

**➔ Егеттәр, һуңғы һорау. "Эш хаҡығыҙ" тураһында мәғлүмәт бирергә риза булырһығыҙмы?**

**Йәмил:** Ғәҙәттә, был парк эргәһенә көндәр йылый башлағас та киләбеҙ һәм каникулға ҡайтып киткәнсе аҙнаһына 1-3 тапҡыр сығып, 2-шәр сәғәт тирәһе уйнайбыҙ. Бер сығыуҙа һәр беребеҙгә 500-700 һум, байрам, ял көндәрендә 1000-1500 һум аҡса эшләйбеҙ. Ябай ғына арифметика ҡулланып, күпме аҡса эшләүебеҙҙе һанап сығарырға була. Шулай уҡ был "эш хаҡыбыҙға" байрам мәжлестәренән төшкән килемде лә ҡушһаҡ, зарланырлыҡ урын ҡалмай. Ятаҡта түбәгә төкөрөп ятһаҡ, уныһы ла булмаç ине әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәнле музыка тыңлау ҡолаҡсын аша ишетелгән дыңғырлауҙы ишетеү кеүек түгел шул. Шуға күрә лә йәш музыканттар янынан кеше өҙөлмәй, ҡайһы берәүҙәр ҡайта-ҡайта килеп тыңлай, икенселәр хатта ниндәйҙер көй уйнатырға заказ да бирә. Ҡулдары етеҙ, тындары киң, йөҙҙәре көләс, көйҙәре моңло егеттәр, ысынлап та, үҙҙәренә ылыҡтырып тора, уларҙың моңо бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Паркка ял итергә килеүселәргә лә, йәш таланттарға ла был шөғөл берҙәй ҡәнәғәтлек килтерә икән, тимәк, уның бер хилафлығы ла юҡ. Ә нимәгәлер ризаһыҙлыҡ белдереп йөрөүселәр һәр ваҡыт бар. Был осраҡта "Эт өрә торор, бүре йөрөй торор", тип әйтергә генә ҡала, күрәһең. Бөгөнгө әңгәмәселәрем миçалы уйы булып та, әлегәсә ошо ысул менән аҡса эшләргә баҙнат итмәгәндәргә, бәлки, этәргес көс булыр.**

**Гөлназ МАНАПОВА
яҙып алды.**

***✓ Һуңынан игеҙәктәр милицияның кейеме, йондоҙҙары, фуражкаһы тураһында һөйләне. Ул быларҙан әллә нәмәләр тураһында һорашҡан, күп итеп яҙған, сәпсим әрләмәгән, ул булғанда хатта әсәләре малайҙарының башына ла сиртә алмаған.***



Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

# САК МЕНӘН СУК



Физкультура дәресендә класыбыҙ менән теге ала кәзәне эҙләргә ебәрҙеләр. Башта эркелешеп барып, Хәҙисә әбейҙәргә индек. Әбекәйгә Тимур командаһы менән былай ҙа аҙ йөрөмәйбеҙ, шунлыҡтан ул беҙҙең килеүгә аптырамаңы.

- У-уй, ҡолонсаҡтарым, эш юҡ ине бит әле...

- Инәй! Ала кәзәң ҡайҙа? - тип хор менән тигәндәй ҡысҡырабыҙ.

- Аһ-аһ... тауҙалыр.

Ары аңлатып торған кеше юҡ, һыпыртабыҙ тауға. Эре таштар араһында яҙғы ҡояш йылыһында иҙерәп ятҡан кәзә көтөүен көжгөп ҡуҙғатып ебәреүебеҙ була, ҡолағыбыҙ өйрәнеп бөткән наҙлы зың-зың сыңлап та китә. Ала кәзәнең ней ҡасырға уйы ла юҡ, беҙҙең кеүектәрҙе артыҡ һанға һуҡмай, күрәһең. Ҡыңғырауҙы сисеп алыу ғына етмәй, өҫтөбөҙгә сәптертә-сәптертә ергә тейә яҙып торған йомшаҡ еленде тартҡылайбыҙ. Кәзәкәй керт-керт көйшәнеп, ирәйеп әйеп тора бирә лә, күмәк ҡулдар артыҡ әрһеҙләшеп, төрлө яҡҡа һуҙғылай башлағас, боролоп ҙур мөгөҙлө башын һелкеп ебәрә. Турғай тубы кеүек тау түбәнгә осабыҙ. Игеҙәктәр ҡыңғырау шылтыратып алдан төшкән.

* * *

Ҡыңғырау мажараһы онотолоуға тағы бер ғауға сығарҙы былар. Районға ауылдан һөт алып бара торған машинаның, беҙҙеңсә, "малакавуздың" люгына ултырып киткәндәр. Ул заманда автобус йөрөмәй әле, районға барыусылар, башҡа транспорт тапмағанға, молоковоз шоферы Миңнулла ағайға инәлеп-ялбарып һөт люгы өҫтөндә йәки ике һауыттың береһе буш булһа, шунда ултырып барырға һорайҙар. Шофер ағай ҡалайтһын инде, кешеләргә кәрәк бит, "ярамай ҙа ярамай" тип һөйләнеп торһа ла, ала. Шуны белгән Кәбир менән Кәрим дә люкка ултырып, районға барып ҡайтмаҡсы булған.

Шулай бер көн, был ҡотҡо кемдең башына беренсе килгәндер инде, һәр хәлдә, беҙ быны бер ваҡытта ла белә алмаҫ инек, игеҙәктәр бер-береһен ҡыуалай-ҡыуалай мәктәпкә йүгерер урынға, ауыл ситендәге фермаға табан елдергән. Ҡойма тишегенән һауыттарҙың береһенә һөт тултырылғанын күҙәтеп торғандар ҙа, шофер ҡағыҙҙар артынан эскә инеп киткәнде генә көтөп тороп, йәһәтләп үрмәләп, буш люкка төшөп тә ултырғандар. Бер ни һиҙмәгән ағай сығып, люктарҙың ҡапҡастарын нығытып бикләп ҡуйған.

Һөт машинаһының ҡараңғы шауғалаҡ һауытында улай-былай тәгәрәп йөрөүгә лә, өҫ тиҫтә саҡрымдай соҡор-саҡырлы юлдарҙа борсаҡ ише һикерешеүгә лә түҙеме еткән малайҙарҙың төштән һуң тағы ла шул юлдан ауылға ыңғайлағанда тамам хәлдәре бөтә. Һуң бит люктың ҡапҡасы ябылған! Һауытына кеше ултыртҡанда Миңнулла ағай һауа инһен өсөн ҡапҡасты ябып еткермәй икән.

Шофер өйөнә ҡайтып, машинаһын ҡуя ла, ашап сыға, унан ғына һауытын йыуҙырырға фермаға төшә. Шунда ул буш люгында ниндәйҙер дыңғырлау тойолғандай булғанға ҡапҡасын асып ебәрһә-ә-ә... Эстә ҡороға сығарып ырғытылған селтейҙәр ише ауыҙҙары менән һауа йотоп игеҙәктәр ята! Шофер шул ваҡыт, хәле бөтөп, машина башынан ҡолап төшкән, тип һөйләне шаһит булғандар. Ололар малайҙарҙы люктан сығарып, үҫенте һымаҡ булып һәлберәп төшкән кәүҙәләрен күтәреп, йүгертеп медпунктҡа алып барған. Ә унда был икәүҙе юғалтып, бөтөн ауыл эҙләй икән!

Ярай, был хәлдә шофер менән малайҙарҙың әсәләренең ҡото алыныуын иҫәпкә алмағанда, игеҙәктәр терелә төшкәс, бер туҡмалған да онотолғандыр, ә бына уларҙың киләһе ҡылған эштәре өсөн бөтә ауылға яуап бирергә тура килде.

* * *

Яҙ көндәре мәктәп менән ағас үҫентеләре ултыртырға алып сығалар ине. Ҙурыраҡ балалар делянка таҙалаша, уртараҡтар махсус көрәктәр менән соҡор яһай, беҙ, бәләкәсерәктәр, шул соҡорҙарға үҫентеләрҙе төшөрөп, итек осо менән баҫып күмеп йөрөйбөҙ. Эш артыҡ ауыр ҙа түгел, үҙе ырамлы, килеп тороп күңелле, әленән-әле тубырсыҡ бәрешеп, баҫтырышып уйнап алабыҙ. Ҡабаландырған, ҡыуған кеше юҡ. Етмәһә, был эш өсөн аҡса түләйҙәр әле.

Төшкө ашҡа туҡтағанда игеҙәктәр бер төркөм тиҫтерҙәрен өйөрөп алып урман эсенә инеп киткәйне. Тамаҡ йүнәткән уҡытыусының: "Малайҙар! Алыҫ китмәгеҙ! Ҡулдарығыҙҙы йыуығыҙ ҙа килегеҙ!" - тип ҡысҡырыуын да ҡолаҡтарына элмәгәс, бик ҡыҙыҡ нәмәләре булғандыр. Тик ул "ҡыҙыҡ" бер нисә минуттан ҡара төтөн бағанаһы булып, ағастар өҫтөнә күтәрелгәндә, малайҙарҙың ҡоттары алынып, ауыл яғына һыпыртҡандар ине инде.

Яҙғы йылы, елле көндә сытырлап янған ҡарағай урманын һүндереү өсөн ауыл халҡына ике тәүлек кәрәк булды. Райондан ут һүндереү машиналары, хатта ҡайҙандыр самолет осоп килеп етте. Ултыртылған үҫентеләребеҙ тапалып бөттө. Ауыл өҫтөндә әллә ни ваҡыт ҡара төтөн болото аҫылынып торҙо. Күңелдәргә һуғыш киноларын ҡарағандағылай шом ятты.

Һуңынан асыҡланды, бөтөн бәлә игеҙәктәрҙең "охотничий" шырпы алып килеүенән сыҡҡан икән. Был ҙур көкөртлө шырпыны магазинда балаларға һатмайҙар, бик кәрәк кенә булмағанда, өйгә лә ала һалып бармайҙар ине. Күберәген ҡырҙа ятып эшләгән, көтөүҙә йөрөгән ололар һатып ала уны. Игеҙәктәр ҙә күршеләре булған көтөүсенекен сәлдергән һәм күрһәтеп маҡтаныу өсөн "пасаткаға" алып килгән. Күрһәтеү генә аҙ бит инде, уны мотлаҡ яндырып ҡарау ҙа кәрәк, һәм һыҙып та ебәрәләр. Шырпы бөртөгө осондағы суҡмар көкөрт сажлап тоҡанып китә лә, осҡондар сәсрәтеп яна башлай. Быға тиклем ҡулдарында бындайҙы тотмаған малайҙар ситкә ырғый. Әлегәсә ҡыйыу ҡыланған игеҙәктәр ҙә албырғай һәм шырпы тотоп торғаны, сәбәләнеп, бармаҡтарын өтөп алып барған утын ергә ырғыта. Ҡоро сатыр өйөмө өҫтөнә төшкән шырпы һүнергә уйламай ҙа, киреһенсә, кипкән ылыҫҡа тоҡанып, тағы ла ҙурайып, көсәйеп китә. Олоғая барған усаҡҡа бер килке күҙ йоммай текәлешеп торған малайҙар, ҡапыл иҫтәренә килеп, утҡа ташлана ла ул, тик инде һуң була: өҫ кейемдәрен сисеп һуҡҡылаһалар ҙа, ерҙән услап алып тупраҡ ташлап ҡараһалар ҙа, ялҡын телдәре ҡоро ботаҡтарҙы ялауҙан һәм үргәрәк үрмәләүҙән туҡтамай. Сәс остары өтөлөп, бит-ҡулдары ҡоромға буялып бөткән малайҙар, утты күреп, был яҡҡа йүгереүселәрҙе аңғарғас та, ҡурҡыштарынан ауылға ҡарай ҡаса.

Янған урман, тәләфләнгән үҫентеләр өсөн уҡытыусы апайыбыҙҙан алып совхоз директорына тиклем яуап тотҡан, тинеләр. Мин әсәйемдән: "Уҡытыусы апайыбыҙ яндырмаған да инде, нишләп уны әрләйҙәр икән?" - тип һорағайным, "Малайҙарҙы ҡарамаған өсөн", тине. Кәбир менән Кәримгә милиция килде. Һуңынан игеҙәктәр беҙҙең күҙҙе ҡыҙҙырып, милицияның кейеме, йондоҙҙары, фуражкаһы тураһында һөйләне. Ул быларҙан әллә нәмәләр тураһында һорашҡан, күп итеп яҙған, сәпсим әрләмәгән, ул булғанда хатта әсәләре малайҙарының башына ла сиртә алмаған. Беҙ тын да алмай көнләшеп тыңланыҡ.

Ә бер көн, йәйге каникулдар алдынан, былар мәктәпкә тере йылан тотоп алып килделәр ҙә, тегене муйындарына, ҡулдарына уратып йөрөтөп цирк күрһәттеләр. Ҡыҙҙарҙы сырылдатып йөрөп баҫтырып ҡурҡыттылар. Ярай әле уҡытыусы килеп инеп өлгөрҙө. Тик ул да йыланды күргәс, "сар-р-р" итеп ебәрҙе, унын тауышына шул тирәлә генә өйөрөлгән физкультура уҡытыусыһы ағайыбыҙ инеп, малайҙарҙан йыланды тартып алды.

- Ҡара йылан бит был, алйоттар, сағылғығыҙ киләме? Ныу баш юҡ һеҙҙә! - тип әрләй ағай тегеләрҙе.

- Саға алмай, беҙ уның телен өҙөп алдыҡ, - тип маһая игеҙәктәр.

- Йыландың ағыуы телендә түгел, ә тешендә! Ул телен өҙгәнгә шаңҡып ҡына ауыҙын аса алмаған! Берәйһен саҡтырһағыҙ шунан? Нишләтергә һеҙҙе? - тип уҡытыусы оҙаҡ ҡына тәрбиәләне быларҙы. Беҙ ҡайтып һөйләп, ата-әсәләрҙе аптыраттыҡ. Һәр хәлдә, был ваҡиғаны игеҙәктәрҙең әсәһенә еткереүсе булмағандыр, ундай ҡыйыуҙар табылмағандыр.

* * *

...Үҙ ваҡыты еткәс, игеҙәктәрҙең береһе (кеме булғандыр инде?) ауылға эшкә килгән бухгалтер ҡыҙға күҙ һалған. Тик егет ҡыҙ артынан саба башларға тип балаҡтарын төрөп тә өлгөрмәгән, һыңары тап ана шул ҡыҙ уныҡы буласағын белдергән. Хәҙер нишләргә? Быға тиклем үҫмерлек ҡоронда һатып алынған велосипедты бүлешә алмай һуғыша торғас, онтағайнылар, һуңғараҡ матайҙарын емергәйнеләр, ана, магнитофондары ла дөмбәҫләшеүҙә ҡатнашып, эсәктәре ҡойолоп ята. Әсәләре шуларға күҙе төшкән һайын: "Сәнселгерләр! Эттән тыуған эт балдары! Мал ҡәҙерен белмәгән таҙлар!" - тип эсе бушағансы ҡарғанып ала.

Был хәлдә лә игеҙәктәрҙең береһе лә мах бирә алмай ине. Тәүге көн клубтан ҡыҙ артынан беренсе булып Кәрим йүгереп сыҡты. Кәбир бильярд төртөп йөрөп аңғармай ҡалды. Әммә икенсе көн ул теге ҡыҙҙы фатирынан уҡ барып алды. Һыңарының һылыуҡай менән көлөшә-көлөшә килгәнен Кәрим клуб мөйөшөнән йәшенеп ҡарап торҙо ла, ҡайтып китте. Иртәгәһен ул иртәрәк һыланып-һыйпанып, сүкеш-бысҡыһын тотоп, сығыуға ыңғайланы. Тик ишектә игеҙәге юлына арҡыры төштө:

- Ҡайҙа киттең?

- Теге көн ултырғыстарымды нығытып бирерһең, тигәйне.

- Үҙем йүнәтермен. Бармайһың!

- Өйрәтмә! Бына һин бармайһың! Мин уның менән баштараҡ таныштым, тәүге көн дә мин оҙаттым.

- Танышҡанһың танышмайҙа! Ул беҙҙе айырмай, бер кеше тип уйлай!

- Значит, мин тип кенә уйлай, - Кәрим Кәбирҙе ситкә төртөп ебәреп, тупһа аша атлауы булды, болдорҙан осоп төшөп тә китте, сөнки тегенеһе ҡыуып етеп, артына тибеп ебәргәйне.

Асыуынан шартлар хәлгә еткән Кәрим ике һикереүҙә һикәлтә үрендә ауыҙын йырып торған игеҙәгенең һыңар аяғынан эләктереп, аҫҡа тартты. Кәрим соңҡаһы менән һәр тупһаны тигәндәй һынап төштө. Тауышҡа йәйге аласыҡ тәҙрәһенән башын һонған әсәләре әсе тауыш менән ишек алдын яңғыратты:

- Ҡороғорлар! Әпәт һуғышалар! Етәр һеҙгә! Этләр! Дөмөккөрләр! Дөмөгөшөп бөтмәйләр бит ошолар!

Тик егеттәр ҡолаҡтарына ла элмәне. Инде күптән улар әсәләренән ҡурҡмай. Әрләү-ҡарғауҙарын да бар тип тә белмәй.

Алыш ҡыҙҙы ғына. Әле Кәрим өҫкә сыҡты, әле Кәбир. Әле Кәрим шунда торған иҙән таяғын Кәбирҙең арҡаһына һындыра һуҡты, әле Кәбир кескәй эскәмйәне алып атты, Кәрим көйәнтә менән, Кәбир гөл көршәге менән...

- Свулышлар! Сәсрәп бөткөрләре-е! Этлә-әр!

Ҡапыл бөтә тауыштар ҙа бер юлы тынды. Әсмә инәй йүгереп сығып ултыра төштө. Ә Кәрим берсә ҡулына әллә ҡайҙан килеп эләккән сүкешкә (бая ултырғыс йүнәтергә алып китергә теләгән, күрәһең), берсә ерҙә күҙҙәрен ҙур асып һауаға ҡарап ятҡан Кәбиргә ҡарап ҡатып ҡалды. Юҡтыр, алдап ҡына ятালыр.

- Тор! Нимә ҡыланып ятаһың! Еңелдеңме? Йә, еңелдем тиң...

Тик Кәбир торманы ла, өндәшмәне лә. Кәрим сүкешен ташлап, игеҙәген елтерәтеп торғоҙоп, аяғына баҫтырмаҡсы булды, әммә ҡулы баш аҫтындағы соҡорға йыйыла башлаған йылы ҡанға тығылғас, хәле бөтөп, эргәһенә сүгәләне, тауышы ҡалтыраны:

- Кәби-ир? Кәрпей, нимә булды?.. Ныҡ тейҙеме әллә, Кәбир? Күтәреп индерәйемме өйгә?.. Пунктҡа апарайыммы әллә? Кәрпей, йә, Кәрпей...

Кәбир район дауаханаһында иҫенә килде. Ҡатмарлы операциянан һуң. Тик хәтере элекке түгел ине. Аҡылы ла...

* * *

...Түбә тәңгәленә еткереп уйылған кескәй тәҙрәне япҡан тутлы рәшәткәләр аша күктәге зәңгәр шарға ҡарап ята Кәрим. Йәне әсей, йөрәге һыҙлай. Ошо һыҡраныуын бер нәмә менән дә баҫа алмай. Хәсрәтен юйыр көс-ҡөҙрәт табылмаған. Быға дауа ла юҡ. Шул ваҡыт ошо һағышы, йәненән айырылып осоп сығып, ай янына күтәрелә лә, аҫта тереклек итеүселәрҙе шомға һала:

- Һ-һаҡ-ҡк! Һаҡ-ҡ-ҡ! Һаҡ-ҡ!

Ә был ваҡытта бөтөнләй икенсе тарафта ғәриптәр коляскаһында бар донъяға битараф булып ултырған Кәбир, нимәлер аңлаған кешеләй, яйһыҙ ғына башын саңҡайтып, оло тәҙрәләрҙең өҫкө өлгөһө тапҡырында бәүелгән әлеге зәңгәр шарға баҡты ла, ҡатҡан телен көрмәлдереп, ниндәйҙер ауаз сығарырға итте. Ауырыуҙың хәлен аңлап, әллә эргәләге баҡсанан, әллә алыҫтанараҡ, бер ҡош уға ярҙамға килде:

- С-суҡ-ҡ-ҡ! С-суҡ-ҡ! С-суҡ-ҡ!

- Һаҡ-ҡ! Һаҡ-ҡ!

- С-суҡ-ҡ!

- Һ-һаҡ-ҡ!

- С-суҡ-ҡ!..

**(Аҙағы. Башы 29-сы һанда).**

**Айыуҙы ла бейергә өйрәтеп була икәнен барыбыҙ ҙа яҡшы беләбеҙ, ә һәр бер кешене һүрәт төшөрөргә, картиналар яҙырға өйрәтеп буламы? Серле лә, мөгжизәле лә, берсә ябай ҙа, берсә бөтөнләй аңлайышһыҙ сәнғәт донъяһына барыһына ла юл асыҡмы? Рәссам булыу кешегә нимә бирә? Ижад өлкәһендә уңышлы эшҡыуарлыҡ алып барырға мөмкинме? Ошо һәм башҡа һорауҙарға Өфөләге "АртКлуб" һынлы сәнғәт студияһы етәксеһе Айгөл РӘШИТОВА яуап бирә.**

# ҺҮРӘТ ТӨШӨРӘ БЕЛМӘГӘН ДӘ...

## һүрәт төшөрөргә өйрәнә бында

### Студия эшмәкәрлеге тураһында

Бала саҡтан һынлы сәнғәт менән ҡыҙыҡһындым, әммә уға урау-урау юлдар аша килдем. Юғары уҡыу йортонда инглиз теле уҡытыусыһы һәм тәржемәсе, унан хоҡуҡ белгесе һөнәрҙәрен үҙләштергәндә лә, хеҙмәт юлымды башлағас та ошо өлкәлә белем биргән курстарҙа уҡыным, төрлө программаларҙы үҙләштерҙем, ләкин улар миңә ҡәнәғәтлек килтермәне - мин картиналар донъяһын тағы ла тәрәнерәк, байыраҡ, күберәк өйрәнергә теләнем. Һәм, иң мөһиме, ул дәрестәрҙе үҙ эшенең оҫтаһы булған иң яҡшы рәссамдар ҡулы аҫтында үтеү тәүшарттарҙың береһе ине. Шуға күрә, оҙаҡ уйланыуҙарҙан һуң, оҙаҡ йылдар эшҡыуарлыҡтың икенсе өлкәләрендә эшләгәндән һуң, үҙемдең студиямды асым. Студияла белем биреүсе уҡытыусылар - билдәле рәссамдар - һынлы сәнғәт донъяһына тәү башлап аяҡ баҫҡан, ошо өлкәлә үҙен һынап ҡарарға йөрьәт иткән "үҙешмәкәр" рәссамдар менән ихлас эшләй, уларға ҡыҙыҡлы һәм файҙалы мәғлүмәттәр еткерә, үҙҙәренең оҫталыҡ серҙәре менән бүлешә.

Студияның төп йүнәлеше - һынлы сәнғәттең бөтә төрҙәре буйынса ла белем биреү. Беҙгә уҡырға килгәндәр һүрәт, фото төшөрөү оҫталығына, пластилин анимацияһына өйрәнә. Шулай уҡ графика, рәсем сәнғәте, декоративғәмәли һүрәтләү техникаһы буйынса ла курстар һәм лекциялар уҙа. Дәрестәр, һайланылған курсҡа ҡарап, аҙнаһына бер, ике йәки өс тапҡыр уҙа.

Студияға йөрөүсе 5 йәштән алып 12 йәшкә тиклемге балалар йыл дауамында "Һүрәт. Рәсем сәнғәте. Композиция" курсы буйынса шөғөлләнә. Шулай уҡ "Пластилин анимацияһы" курсына йөрөүсе кескәйҙәр пластилиндан эшләнгән геройҙар менән йәнһүрәт төшөрә. Әлеге ваҡытҡа 4 йәнһүрәтебеҙ бар һәм уларҙың һанын арттырыу өҫтөндә әүҙем эшләйбеҙ. Ҡыҙҙар араһында популяр булған "Курсаҡ ательеһы" курсында бәләкәстәр үҙҙәре ҡурсаҡтарға тәғәйенләнгән кейемдең һүрәтен эшләй, уны проектлай һәм тегә.

13 йәштән ҙурыраҡтар араһында үҙенең киләсәген художество сәнғәте менән бәйләргә теләүселәр күпселекте тәшкил итә. Улар профессионалдар ҡулы аҫтында һынлы сәнғәттең асылына төшөнә, ошо йүнәлештә белем биргән махсус уҡыу йорттарына уҡырға инергә әҙерләнә. Шулай уҡ һүрәт төшөрөүгә әүәҫ, әммә был өлкәнең барлыҡ нескәлектәрен һәм серҙәрен аңлап етмәгәнлектән оҫталыҡтарын юғары кимәлгә еткерә алмаған һәүәҫкәрҙәр ҙә күп килә студияға. Улар уҡытыусылар ярҙамында был бушлыҡты тултыра һәм үҙенең шөғөлөнән, килеп сыҡҡан һөҙөмтәнән күңел йылылығы таба.

### Ижад донъяһы серҙәре

Минең өсөн картина - ул ниндәйҙер серле, шифрланған мәғлүмәт сығанағы. Ул телде аңлау өсөн бик күп уҡырға, өйрәнергә һәм белергә кәрәк. Уны үҙләштереү өсөн бер ай, хатта бер йыл да етмәй - быға бөтә ғүмереңде арнау шарт. Өҫтөнләклө, еңел генә ҡараш менән һүрәттәр донъяһына юл асыусы телдең айышына төшөнөп булмай, был эштә етдилек, ихласлыҡ, нығышмалыҡ, тәрәнлек кәрәк. Һүрәт төшөрөү, картина яҙыу - ул тойомлау, күҙәтеү, дөйөмләләктә һәм осраҡлыҡты аңлау, нескәлектәрҙе эләктереп алыу, ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы һәм тәьҫир итеү сараларын тойоу, үҙеңде борсоған ниндәйҙер теманы асыу мөмкинлеге биреүсе шөғөл. Был шөғөл ҙур кинәнес килтереүе, донъяуи ваҡлыҡтарҙан арындырыуы, ығы-зығынан ҡотҡарыуы менән әһәмиәтле. Киндер алдында ултырыу бер үк ваҡытта иғтибарҙы туплауға ла, физик һәм аҡыл көсөргәнешлегенән арындырырға ла ярҙам итә.

### Рәссам - эҙләнеүсе шәхес

Рәссам был өлкәгә ҡағылышы булмаған кешенән күҙәтеүсәнлеге, һәр нәмәгә иғтибарлы булыуы, нығ йыйнаҡ, ипле, теүәл булыуы менән айырыла. Йәмғиәттә рәссамдар тураһында елғыуар, рәтһеҙ кешеләр тигән хаталы ҡараш йәшәй, ләкин ысынында улар ентекле, ойошҡан һәм яуаплылар. Улар менән эшләү һәм аралашыуы бер ҡыйынлыҡ та тыуҙырмай. Рәссам, беренсе сиратта, һәр саҡ эҙләнеү юлында булған шәхес. Шуға күрә мин студияла шөғөлләнеүселәрҙе һүрәт төшөрөү техникаһын үҙләштереүсе генә түгел, ә донъяға икенсе күҙлектән ҡарарға өйрәнеүсе булараҡ ҡабул итәм. Беҙгә килеүсе һәр кем тормоштоң ҡара-һоро яғын ғына түгел, ә сағыу балҡышлы төҫтәрен дә күрә башлаһа, уның донъяға һөйөү артһа, тимәк, студия эшмәкәрлеге дөрөҫ юлдан бара, тимәк, беҙ, уҡытыусылар менән берлектә, кәрәкле эш менән булабыҙ, тигән һүҙ. Бының өсөн рәссамлыҡ дәрестәренән тыш, һәр йома сәнғәт өлкәһендә эшләүсе ижадсыларҙы, фән эшмәкәрҙәрен, дин әһелдәрен һәм башҡа күренекле кешеләрҙе курсҡа йөрөүселәр менән осрашыуға саҡырып, төрлө темаларға әңгәмәләр ҡорабыҙ.

### Һәр кем булдыра аламы?

Бөтә кеше лә һүрәт төшөрә, ләкин барыһыныҡын да картиналар галереяһына ҡуйып булмай. Кемдер өсөн түнәрәк һыҙыу ҙа ауырға төшһә, икенсе берәүгә күҙ алдындағы күренеште ҡағыҙҙа һынландырыу бер ни тормай. Бала саҡта был хаҡта уйламайһың һәм әргәләге мөхитте, күренештәрҙе, кешеләрҙе һүрәт итеп төшөрәһең. Килеп сыҡҡан картина геройҙары ысынбарлыҡтағыларына бик үк оҡшап етмәһә лә, барыһы ла ул һүрәткә ҡарап һоҡлана, уларҙы оҙаҡ йылдар ҡәҙерләп һаҡлай. Үҫә килә һынлы сәнғәт донъяһына ылығыусылар, уны үҙенең ғүмерлек һөнәре итеп һайлаусылар һаны кәмей, ләкин берәүҙә лә был өлкәгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу юғалмай. Һүрәт төшөрөү - һәр айырым кешегә генә хас булған һәм бер ҡасан да ҡабатланмаған яҙыу рәүеше кеүек, шундай уҡ үҙенсәлекле, индивидуаль күренеш. Техник йәһәттән сығып ҡарағанда, бөтә кешене лә һүрәт төшөрөргә өйрәтеп була, ләкин тәбиғәттән һалынған һәләт кенә кешене бөйөк рәссам итергә мөмкин. Сағыштырыу өсөн яҙыу һәләтен алайыҡ. Бөтә кеше лә яҙа белә, тик барыһы ла Мостай Кәрим кеүек һоҡландырғыс әҫәрҙәр ижад итә алмай. Рәссамлыҡ та шулай. Шуға күрә был мөгжизәле донъяла теләге булған һәр кем үҙ урынын таба ала.



### Уңышлы эшҡыуарлыҡ сере

Ваҡыты-ваҡыты менән һәр кемдең уйында үҙ эшен асыу теләге тыуалыр, тип уйлайым, ләкин бик һирәктәр генә хыялын тормошҡа ашырыу яйын таба. Мин үҙемдең тәүге эшемдә 25 йәшемдә астым һәм эшҡыуарлыҡ юлынан киткәнемә бер ҡасан да үкенмәнем. Тик уңышлы эшҡыуарлыҡ алып барыу өсөн шәхсән үҙең өсөн ҡыҙыҡлы, һине үҙенә тартып торған өлкәне һайлау мотлаҡ. Аҡсалыраҡ, ләкин күңелгә хуш килмәгән эшҡыуарлыҡ төрөн һайлау иртәме-һуңмы үҙ актуаллеген юғалтасаҡ, сөнки ул эшмәкәрлеккә йөрәк йылыһы һалынмай, ыңғай энергия йүнәлтелмәй. Үҙ эшеңде асыу һәм уны үҫтереү өсөн тағы бер мөһим шарт - үҙеңә ышаныу һәм ҡурҡыу хисенән арыныу. Шулай уҡ эш барышында килеп тыуған мәсьәләләрҙе тиҙ арала хәл итеүҙе, проблемаларҙан ҡасмай, нисек кенә ауыр булмаһын, уларҙы йырып сығыуҙы ҡаты ҡағиҙә итеп алғанда эшҡыуарлыҡты алға ебәреп була. Бөгөн эшләйһе эште иртәгәгә ҡалдырыу аяҡ салыусы, эште артҡа һөйрәүсе насар ғәҙәт бизнеста ғына түгел, ғөмүмән, донъя көтөүҙә лә насар роль уйнай. Минең кеүек ижад өлкәһендә үҙ эшен асырға теләүселәргә шундай иҫкәрмә яһағым килә: әгәр ҙә ҡулланыуҙан артҡан ирекле аҡсағыҙ булмаһа, был эшкә бик һаҡ тотоноғоҙ, сөнки ул тиҙ һәм күп килем килтереүсе бизнес сығанағы түгел.

### Туған тел яҙмышы

Бөгөнгө һөйләшеүгә ҡағылышы булмаһа ла, үҙемде борсоған мәсьәлә хаҡында әйтмәйенсә булдыра алмайым. Ул - туған телем яҙмышы. Бөгөн башҡорт телен ҡулланыу даирәһе бик сикле - ул башҡорт телендә сыҡҡан гәзит-журналдарға, радио һәм телевидениелағы башҡорт телендәге тапшырыуҙарға ғына ҡайтып ҡала. Һуңғы икәүһендә, ҡыҙғаныҫҡа күрә, йылданйыл башҡорт телендәге тапшырыуҙар һаны кәмей, уларҙы башҡа телдәге тапшырыуҙар ҡыҫырыҡлай бара. Ә төрлө власть органдары кимәлендә, республиканың төрлө ойошмаларында башҡорт телен ҡулланыу бөтөнләй юҡ кимәлендә. Әгәр ҙә урамда меңәрләгән кешенең күҙенә салынып торған урам исемдәрендә, магазин һәм башҡа ойошмаларҙың атамаларында башҡорт телендәге яҙыуҙар уҡығыһыҙ хата икән, телгә ҡарата ниндәй ихтирам тураһында һүҙ йөрөтөргә була. Хаталы яҙыуҙар өсөн штраф түләп тә яҙыуҙарын төҙәтергә ашыҡмай күптәр. Тимәк, ҡатыраҡ саралар талап ителәләр был йәһәттән.

Ауылдарҙа башҡорт теле аралашыу теле булараҡ һаҡланып килә, ә ҡала ерендә үҙ-ара һөйләшеүҙә бөтөнләй ҡулланылмай тиерлек. Ауылдағылар ҙа, ҡалаға килһә, урыҫ теленә күсеү яғын ғына ҡарап тора. Ваҡытында мәктәп программаһына башҡорт телен һәм әҙәбиәтен мотлаҡ уҡытыу индерелгәс, бик ҡыуанғайным. Был аҙым миндә балалар, уларҙың ата-әсәләре араһында телгә ҡарата иғтибарҙы арттырыр, башҡа милләт вәкилдәренең дә ҡыҙыҡһыныуын уятыр, тигән өмөт уятҡайны. Ләкин телде уҡытыу методикаһы һәм алымдары, ошо йүнәлештәге уҡытыу программаһы был хыялымды юҡҡа сығарҙы. Мәҫәлән, минең ҡыҙымдың мәктәптә башҡорт телен өйрәнеүе дәрестә текст күсереп яҙыуға ғына ҡайтып ҡала. Был осраҡта ниндәй белем, телгә ҡарата һөйөү һәм иғтибар тураһында һөйләргә була, балалар ундай алымды бушҡа ваҡыт әрәм итеү кеүек ҡабул итә.

Әлбиттә, башҡорт теленә ҙур иғтибар биргән, дәрестәр мауыҡтырғыс итеп үткәрелгән, балаларға башҡорт теленең бар матурлығын, ягымлылығын һәм байлығын асып бирә алыусы мәктәптәр, уҡытыусылар барҙыр. Башҡа мәктәптәрҙең дә ундайҙарҙан өлгө алып, үҙҙәрендә лә шундай уҡытыу методикаһы ҡулланып эшләүе бик яҡшы булыр ине, тигән фекерҙәмен. Әлеге ваҡытта ҡуйыртылған хәбәр - мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу кәрәкме-юҡмы тигән бәхәс бөтөнләй урынһыҙ һәм мәғәнәһеҙ, минеңсә. Башҡорт тигән аҫаба халыҡ йәшәгән республикала былай һорауҙың ҡуйылыуы, мәктәп программаһынан башҡорт телен алып ташларға тырышыу баланы витаминһыҙ, файҙаһыҙ, тәмһеҙ аш-һыу менән һыйларға тырышыу кеүек. Эсте күптәрә, ләкин туйҙырмай...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һүрәт төшөрә белеү һүҙ менән әйтеп бирә алмаған уйҙарҙы, кәйефте сағылдырыу, йөрәктең иң түрендәге тойғоларҙы белдерергә мөмкинлек биргән, булмышты асып һалырға юл күрһәткән ғәмәлдәрҙең иң сағыуы һәм мөғжизәлеһеләр, моғайын. Ошондай мөғжизәгә үҙе лә тыуҙыра, был шөғөл башҡаларҙы ла ылыҡтыра алған, уҡыусыларын рухи яҡтан байытыуға йүнәлтелгән кеше ул "АртКлуб" художество ижады студияһы етәксеһе. Уңыштар юлдаш булһын уға!**

**Гөлназ САФУАНОВА яҙып алды.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЙӨРӘК СИРЛЕЛӘРГӘ...

## комедия файҙалы

■ Америка медицина ассоциацияһы һимереүҙе ауырыу тип танырға тәҡдим итә. Элек ассоциация һимереүгә "йәмәғәт һаулыҡ һаҡлау өлкәһенең төп проблемаһы" тигән ҡылыҡһырлама бирә ине. Был ҡарар юридик көсөнә инһә, һимереү кеүек ауыр проблеманы хәл итеү юлдары ла еңеләйәсәк, ти белгестәр. "Артыҡ ауырлыҡ сир түгел, ә артыҡ ашау һәм аҙ хәрәкәтләнеүгә бәйле йәшәү рәүеше алып барыуҙың әҙәмтәһе, тип әйтеү дөрөҫ түгел. Мәҫәлән, тәмәке тартырғамы, юкмы икәнен дә кеше үҙе хәл итә, әммә уның һөҙөмтәһендә тыуған үпкә яман шешен ауырыу түгел тип атарға бер кемдең дә башына инеп тә сыҡмай", - тиелә ассоциацияның мөрәжәғәтендә. Һимереү - ул сир, тигән фекерҙе Кардиологтарҙың Америка колледжы, Һимереү йәмғиәте, Американың клиник эндокринологтары ассоциацияһы ла хуплай. Әлеге мәлдә артыҡ ауырлыҡ менән Америка халҡының өстән бер өлөшө яфалана. RTI International институты фараздары буйынса, 2030 йылға уларҙың һаны 42 процентҡа етәсәк.

■ Ҡыҙҙырылған картуф, тауыҡ, майлы балыҡ яратһағыҙ, майҙа ҡыҙҙырылған бәлештәрһеҙ йәшәй алмаһағыҙ, улар тыуҙырған хәүеф тураһында ла онотмағыҙ, ти Америка ғалимдары. Был ризыҡтар простата биҙе яман шешенә килтерә ала. Сиэтлдағы Яман шеш тикшеренеүҙәре үҙәге белгестәре билдәләүенсә, майҙы ҡыҙҙырыуҙың һөҙөмтәһендә канцероген матдәләр - альдегидтар, гетероциклик аминдар һ.б. бүленеп сыға. Тап улар ир-егеттәрҙә простата биҙе яман шеше барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә лә инде. Был проблема Америка халҡына ғына янамай, бөгөн Европала ла ҡыҙҙырылған ризыҡтар ҙур һорау менән файҙаланыла.

■ Холестериндан таблеткаларҙы анар емеше экстракты менән бергә ҡабул иткәндә бик яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшергә була. Етмәһә, был осраҡта дарыуҙарҙың дозаһын түбәнәйтергә лә мөмкин, тимәк, ауырыуҙарҙың кире тәьҫирәрен дә һаҡлана. Анар емеше менән тәжрибәне профессор Михаэль Авирам етәкләй, ул тәүрат осоро емештәрен өйрәнеүсе булараҡ донъяға билдәле. Быға тиклем профессор анар һәм уның һуты ҡандағы холестерин кимәлен түбәнәйтә, тип сығыш яһағайны инде. Израиль ғалимдарының асышы "Atherosclerosis" халыҡ-ара ғилми-медицина журналында баҫылған. Әлегә шуны ғына кәңәш итергә була - анар ашағыҙ, уның орлоҡтарын салаттарға өҫтәгеҙ.

■ Ғалимдар раҫлауынса, комик фильмдар ҡарау сәләмәтлек өсөн файҙалы. Был ваҡытта ҡан тамырҙары киңәйә һәм йөрәктең ҡан менән тәьмин ителеше яҡшыра. Триллер һәм боевик ҡарағанда кире эффект күҙәтелә. Тәжрибә күрһәтеүенсә, былдай фильмдарҙы ҡараған саҡта тыуған көсөргәнеш ҡан тамырҙарының ҡыҫылыуына, ҡан баҫымының күтәрелеүенә килтерә.

■ Үҙ йәшегеҙгә ҡарағанда йәшерәк күренәһегеҙме? Тимәк, һеҙ оҙон ғүмер кисерәсәкһегеҙ. Дания ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, был ике күрһәткес араһында туранан-тура бәйләнеш бар. Бында тәүге сәбәп булып генетика тора. Икенсеһе - ғәҙәттәр. Тәмәке тартмаған, дөрөҫ туҡланған, ҡояшта артыҡ ҡыҙынмаған кешеләр тиҫтерҙәренә ҡарағанда йәшерәк күренә.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Үҙ башына төшкән кеше генә ҡайғы-хәсрәттең бөтә тәрәнлеген, яурындарҙы баҫҡан ауырлығын йөрәге аша үткәрә-үткәрә, саҡ-саҡ көйрәп яткан күмерҙе хәтерләтеп, янғыҙы ғазап утында яна. Бер кем дә был гүзәл ергә мәңгелеккә килмәй. Шулай ҙа әҙәм балаһының дауалай алмаҫлыҡ сиргә юлығып, яҡындарын ҡара ҡайғыға батырып, бик иртә яҡты донъя менән хушлашыуы күптәрҙең бәғерҙәрен телгән. Һанаулы ғына көндәре ҡалған ауырыуҙарҙың хәлен еңеләйтеү, уларҙы ҡаты ауыртыныуҙарҙан арындырыу, тейешле медицина ярҙамы күрһәтеү - тереләрҙең бурысы. Әммә әлегә был йәһәттән эш маҡтанырлыҡ түгел, онкология сиренә дусар булыусыларҙың көслө ауыртыныуҙарға сыҙай алмай, үҙ-үҙенә ҡул һалыу осраҡтары шуны иҫбатлай. Ҡасан сирлеләр үҙ ихтыяры менән үлемде һайлауҙан туҡтар? Күреп торһығыҙ, бөгөнгө әңгәмәбеҙ үтә ауыр, хатта әрнеткес, әммә йәмғиәт өсөн ифрат көнүҙәк темаға арналды: илебеҙҙә паллиатив медицина ярҙамының киләсәге бармы? Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты, "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Тормош сифаты" проекты етәксеһе Сәлиә МЫРҘАБАЕВАға күптәрҙе хафаландырған тап ошо һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

# ИҪКЕ МӘСЬӘЛӘГӘ - ЯҢЫ ҠАРАШ,

## йәки паллиатив медицина ярҙамына мохтажлыҡ бар



**➔ Тәүҙә шуны аңлатып китһәгеҙ ине: һаулыҡ һаҡлау эшмәкәрлегенең айырым бер төрө булған паллиатив ярҙам нимәне үҙ эсенә ала?**

- Кеше үҙәккә үткес ҡаты ауыртыныуҙан яфаланырға, ғазап кисерергә тейеш түгел. Бигерәк тә яҡты донъяла һанаулы ғына көндәре ҡалған ауырыуҙарҙың хәлен мөмкин тиклем еңеләйтеү бик мөһим. Паллиатив медицина ярҙамы һауыҡтырып булмай торған сирлеләрҙең хәлен еңеләйтеү, ауыртыныуҙарҙан ҡотолдороу һәм ғүмер оҙайлығын арттырыуға йүнәлтелгән медицина сараларынан тора. Быңдай ярҙам амбулатория һәм стационар шарттарында махсус курс үткән хеҙмәткәрҙәр тарафынан күрһәтелә. Ул Дәүләт гарантиялары программаһына индерелгән һәм, башҡа медицина ярҙамы төрҙәре кеүек, түләүһеҙ, һәр кем файҙалана алырлыҡ булырға тейеш. Бынан төбәктәрҙә бер койкаурынды тәьмин итеү тәүлегенә ике мең һум тәшкил итеүен дә әйтеп үтәйек. Бөгөн Рәсәйҙә 1 миллионға яҡын пациент ошондай ярҙамға мохтаж.

**➔ Ауыртыуҙы баҫа торған препараттарҙы ҡулға төшөрөүҙең үтә ҡатмарлылығын контрадмирал Апанасенковтың үҙ-үҙенә ҡул һалырҙан алда яҙған хаты бөтә донъяға билдәле итте. Мәрхүм үҙ үлемендә Хөкүмәтте, Һаулыҡ һаҡлау министрлығын ғәйепләгән. Ни өсөн мәсьәлә үтә ҡырҡыу?**

- Ауыртыуҙы баҫа торған дарыуҙарҙы алыу беҙҙә бер ваҡытта ла еңел булмаһы, сөнки былдай наркотик препараттар буйынса хоҡуҡи нигеҙ 90-сы йылдарҙан бирле үҙгәреш кисермәй килә. Һуңғы осорҙа ғына был мәсьәләне көйләү буйынса фекер алышыу көсәйҙе.

**➔ Проблема иҫке, ә ҡараш яңыса, тимәксеһегеҙме? Ниндәй ыңғай үҙгәрештәр күҙәтелә һуң?**

- Наркотиктарҙы контролләү буйынса халыҡ-ара комитет мәғлүмәттәренән күренеүенсә, Рәсәй донъяла ҡаты сирлеләрҙең хәлен еңеләйтеүсе, ғүмерҙәрен оҙайтыусы препараттарҙы файҙаланыу буйынса мәсхәрәле 82-се урынды биләй. Был хәл менән килешеү мөмкин түгел, һуңғы өс йыл эсендә закондарҙың яңыртылыуы һөҙөмтәһендә төбәктәрҙә халыҡҡа паллиатив ярҙам бүлексәләре асыла башланы. Үкенескә ҡаршы, улар әлегә бик аҙ. Күп ауырыуҙар үҙ сиратын көтөп ала алмай яҡты донъянан китә.

Бер рецепт буйынса бирелеүсе препарат күләменең арттырылыуы ыңғай күренеш. 2015 йылдың 1 июленән рецепттарҙың файҙаланыу срогы 5 көндән 15 көнгә тиклем оҙайтыла. Дарыухана булмаған осраҡта ауыл ерҙәрендәге дауалау учреждениеларына пациенттарҙы дарыуҙар менән тәьмин итеү йөкмәтелә. Хәҙер стационарҙың ауырыуҙарҙы өйҙәренә ҡайтарғанда ауыртыуҙы баҫа торған препараттар менән 5 көнгә етерлек тәьмин итеү хоҡуғы бар. Росздравнадзорҙың берҙәм "ҡыҙыу линия"һы (8-800-500-18-35) асылыуы ла хәлде яҡшыртыуға ярҙам итер тип уйлайбыҙ. Оҙаҡламай һәр төбәктә поликлиникаларҙа дарыуҙар менән тәьмин итеүҙәге аңлашылмаусанлыҡты, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса эш башланасаҡ. Ауырыуҙар йәки уларҙың яҡындары бюрократик ҡаршылыҡтарға осраған хәлдә электрон мөрәжәғәт менән дәғүәһен белдерә аласаҡ.

**➔ Ә ни өсөн табиптар йыш ҡына ауырыуҙың яфаланыуына битараф? Кеше ауыртыныуға түҙә алмай ҡысҡырып ятҡанда ла наркотик дарыуҙарҙы тәғәйенләмәҫкә тырыша?**

- Былдай көслө препараттарҙы тәғәйенләүҙә табиптар иңенә ифрат ҙур яуаплылыҡ төшөүе бәхәсһеҙ. Эйе, уларҙың күбеһе етерлек дәрәжәлә квалификациялы түгел. Шуға күрә хәҙер паллиатив медицина ярҙамын күрһәтеү буйынса белгестәрҙе уҡытыу ойошторола. Юғары уҡыу йорттары ла үҙҙәренең уҡытыу программаһына үҙгәрештәр индерә, онкологтар өсөн методик әсбаптар сығарыла. Яман шешкә дусар булғандар өсөн терапия ҡағиҙәләре әҙер. Бары белгестәрҙең уларҙы эшендә теүәл ҡулланыуы кәрәк.

**➔ Әгәр ҙә табиптар һаман да элеккесә ауырыуҙың ғазап сигеүенә вайымһыҙ ҡалыуын дауам итһә? Ундай аҡ халатлыларға ниндәй яуаплылыҡ ҡаралған?**

- Иң тәүҙә шундай сиселдең айышына төшөнөргә кәрәк. Әгәр ҙә белгестең, ысынлап та, үҙ бурысына илке-һалҡы ҡарауы асыҡланһа, уның дисциплинар яуаплылыҡҡа тарттырылыуы, хатта эштән бушатылыуы ихтимал. Йыл һайын Рәсәй һаулыҡ һаҡлау министрлығына килгән 80 меңгә яҡын мөрәжәғәт араһында ялыуҙар ҙа күп. Төбәктәрҙә "ҡыҙыу линия"лар эшләй башлау менән уларҙың һаны тағы ла арта төшөүе ихтимал.

Әммә был һис тә насар түгел. Ғөмүмән, көн ҡаҙағындағы ошо ҡырҡыу мәсьәлә тураһында фекер алышыу үҙе генә лә медицинаның асыҡлыҡ принцибына таяныуын дәлилләй. Элек бит был хаҡта һүҙ ҡуҙғатыу ҙа мөмкин түгел ине. Барыбыҙ ҙа өнһеҙ-телһеҙ инек. Яман шеш сиренә дусар булыусылар араһында суицидтар кәмеү күҙәтелһә лә, әлегә дарыуҙар тәғәйенләү тәртибенең боҙолоуы хаҡында хәбәрҙәр етерлек.

**➔ Дарыуханаларға һәм дауаханаларға препараттар менән тәьмин итеү буйынса талапты арттырыу, дарыуҙарҙы тәғәйенләү һәм рецепттар биреү ҡағыҙһен ябайлаштырыу, һис һүҙһеҙ, ҙур аҙым булыуына ҡарамаҫтан, табиптар аңындағы ҡалыптарҙы юҡҡа сығарыу еңел булмаҫ төҫлө...**

- Ни өсөн препараттар етешмәй? Сөнки төбәктәр наркотиктарҙы һаҡлау, ташыу мәсьәләһе менән нисек тә һирәгерәк булышырға тырыша. Врачтар ҙа наркотиктар менән эш итеүҙән ҡурҡа. Терапевт дүртенсе дәрәжә яман шешкә юлыҡҡан ауырыуға препарат тәғәйенләргә хаҡлы булыуына ҡарамаҫтан, һаман да сирлене онкологҡа ебәреү яғын ҡарай. "Ашығыс ярҙам" да иҫке ҡалыптарҙан арына алмай йонсой, сөнки төп эшенән бушап, әллә күпме ҡағыҙ тултырып, етәкселектең дәғүәһенән ишетергә теләмәй. Әлбиттә, паллиатив хеҙмәттең бурысын "ашығыс ярҙам"ға йөкмәтеү дөрөҫ түгел, шулай ҙа ҡаты ауыртыу кисергән сирлегә ярҙам күрһәтеү - уның намыҫ эше. Әгәр ҙә ауырыуға ваҡытында рецепт бирелмәһә, поликлиника етәкселегенең административ яуаплылыҡҡа тарттырылыуы мөмкин. Әммә табиптарҙың да хәлен аңлау кәрәк. Пациентҡа ауыртыуҙы баҫа торған дарыу тәғәйенләгән Алевтина Х. исемле врачтың хөкөмгә тарттырылыу ваҡиғаһы хәтерҙән юйылмаған. Бары йәмәғәтселектең дәррәү күтәрелеп, табипты яҡлауы арҡаһында ғына ул аҡланды. Икенсе яҡтан, ваҡытында опиумлы анальгетиктар алыуҙан мәхрүм ителеү һөҙөмтәһендә үҙ-үҙенә ҡул һалырға мәжбүр булған генерал Кудрявцев һәм башҡаларҙың тарихы тағы ла нығыраҡ хәүефләндерә. Шуға күрә белгестәрҙе өҫтәмә уҡытыу, ҡаты сирлеләрҙең хәлен еңеләйтеү, тормош сифатын яҡшыртыу буйынса курстар ойошторолоуы, врачтарҙы яҡлаған көйләү акттары эшләнеүе ҙур әһәмиәткә эйә.

Иҫәпләүҙәр буйынса, бер миллион халыҡҡа йөҙ койка-урын булдырғанда ярҙамға мохтаж һәр кемде лайыҡлы тәрбиә менән солғарға мөмкин. Ауыртыуҙы баҫыу пациенттың һәм яҡындарының йәшәү рәүешен үҙгәртеүгә һәм ауырыуҙарҙың ғүмерен оҙайтыуға һәләтле. Быйыл паллиатив медицина ярҙамының йоғонтоло системаһын ойоштороуҙа ҙур боролош яһалыуы - тармаҡтағы иң ҙур үҙгәрештәрҙең береһе. Ябай булмаған шарттарҙа медиктарҙың баҙап ҡалмауына, иҫке мәсьәләне яңыса, намыҫтары ҡушыуы буйынса башҡарыуҙарына ышанысым ҙур.

**Динә ҒӘБДРӘХИМОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ ***Улар өсөн эгоист булыу норма һанала. Улар үҙҙәрен башҡалар хаҡына ҡорбан итеп бары тик үҙҙәрен кәмһетәсәктәрен һәм ахырҙа бер кемгә лә кәрәкмәгән булып ҡаласаҡтарын аңлай.***



КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# ХАЛЫҠ УҠЫТЫУСЫҺЫ

**Тормош шулай: табыштары, шатлыҡтары булған кеүек, уның юғалтыуҙары, ҡайғылары ла булып тороусан. Улар бер кемде, бер ғаиләне лә урап үтмәй. Уларҙан ҡасып та, йәшенеп тә ҡотолоп булмай. Яңыраҡ ҡына беҙ ҙә ихтирам иткән уҡытыусыбыҙ, яраткан ағайыбыҙ, ышаныслы өлкән дуҫыбыҙ Азамат Әғзәм улы Тажетдиновты юғалтыу ҡайғыларын кисерҙек. Ләкин һаман да, бына ишек асылыр ҙа, унан: "Һа-ай, ҡустым һаумы! Хәлдәрең нисек?" - тип йылмайып, һәр саҡтағыса көр күңелле Азамат ағай килеп инер кеүек. Уның һоҡландырғыс ихласлығы, алсаҡлығы беҙҙең күңелдәрҙән һис ҡасан да һүрелмәҫ.**



Өс йәшендә генә атайһыҙ ҡалып, үҫмер сағында арҡаланыр, яҡлар кешеһе булмауына эстән генә һыҙып, атайлы балаларға көнләшеп үҫкән бала ғүмере буйына һуғыш яланында һәләк булған ғәзиз кешеһенең сит ерҙәрҙәге ҡәберен табыу теләге менән йәшәне. Ҡәберенә булһа ла "атай" тип теҙләнер өсөн... Элекке тормош, бөгөнгө донъя хәлдәре тураһында әңгәмәләшеп ултырған саҡтарҙа ул йыш ҡына: "Эй был атайһыҙлыҡ..." - тип көрһөнөп ҡуя торғайны. Олоғайғас та атайһыҙлыҡ ҡыйырһытылыуҙарын онотмағас, тормош ауырлыҡтары шул тиклем үҙәгенә үткәндер инде. 75 йәше менән барғанда ғына Азамат Әғзәм улына Смоленск өлкәһендә атаһының ҡәберенә башын эйергә насип булды. Аталарына Әғзәм ҡартаталарының ҡәберенә зыярат ҡылыуҙы ойоштороуға күп көс, дәрт һалып, ғәмәлгә ашырған Нур, Илшат, Наил ҡустыларға бөтә туғандары исеменән ҙур рәхмәт!

Тормош ауырлыҡтарын бала сағынан үҙ йәнендә кисереп, үҙ елкәһендә татып, үҙ көсөнә генә ышанып үҫкәнгә күрәлер, Азамат ағай балаларына, уҡыусыларына бик йомшаҡ мөғәмәләлә булды. Туғандары, хеҙмәттәштәре, ауыл халҡы менән дә ул һәр ваҡыт яғымлы аралашты. Ғөмүмән, уның бер ҡасан да, бер кемгә лә уҫал екереү түгел, тауыш күтәргәне булмағандыр. Кеше тураһында ул гел яҡшы фекерҙә булды, кем генә мөрәжәғәт итһә лә, үҙенең бөтә мәшәҡәттәрен онотоп, ярҙам итергә тырышты. "Ағай, һин Хоҙай Тәғәлә түгелһең бит, ниңә бөтә кешенең хәсрәтен йәнеңә яҡын алаһың? Үҙеңде һаҡла, йәнеңде йәллә әҙерәк булһа ла", - тигәнде лә тыңламаны.

Азамат ағай үҙенең йәмәғәт эштәрендә әүҙем, ныҡышмал, тырыш булыуы менән дә һоҡландырҙы. Ул агитатор ҙа, пропагандист та, ауылдаштарына эскерһеҙ кәңәшсе лә булды. Ололарҙы ла, кеселәрҙе лә үҙенә яғымлы, йылы мөнәсәбәте менән ылыҡтырҙы, ябайлығы менән һәр кемдең күңеленә яҡын булды. Ул өлкәндәр менән дә, йәштәр менән дә, хатта бала-саға менән дә үҙен тигеҙ тотто. Бер кемгә лә өҫтән, юғарынан ҡарап һүҙ ҡушманы.

Тыуған еренең патриоты һәр саҡ үҙ төйәген, ауылдаштарын, яҡташтарын илгә танытыр өсөн тырышты. Был турала уның китаптары ла һөйләй. Азамат Әғзәм улының 2003 йылда баҫылып сыҡҡан "Беҙ - байымдар" исемле тәүге китабында үҙе тыуып үҫкән Байым ауылының тарихы, ырыу аралары, арҙаҡлы шәхестәре, ауылдаштарының бөгөнгө йәшәү рәүеше тураһында бәйән итеп, ауыл үҫешендәге мөһим ваҡиғаларҙы һүрәтләп, төплө мәғлүмәттәр бирә, тыуған төйәгенең ер-һыу атамаларын барлай, уларҙың исемдәренең барлыҡҡа килеүен асыҡлай.

Ары ул "Ел-дауылдар аша" китабында 2-се Этҡол ауыл Советына ингән 2-се Этҡол, Байым, Сәйетбаттал (Ҡуяндар) ауылдарының ҡыҫҡаса тарихын барлап, унда йәшәгән ырыу араларының шәжәрәләрен төҙөй. Ул ауылдарҙан сыҡҡан арҙаҡлы шәхестәр тураһында мәғлүмәт бирә. 2-се Этҡол ауыл Советының ойошторолған йылдарынан бөгөнгө көндәргә тиклем үткән үҫеш юлын байҡай. Был төбәктә йәшәгән кешеләр, булып үткән ваҡиғалар тураһындағы мәғлүмәттәрҙе бер китапҡа туплап, Азамат Әғзәм улы бөгөнгө йәштәргә, киләсәк быуынға фәһемле мәғлүмәт сығанағы булдырҙы. 2008 йылда Азамат Әғзәм улы Рамазан Үтәғолов менән бергә "Сәсәндәр иленә сәйәхәт" исемле китап яҙып, йор һүҙгә бай яҡташтарының, шиғыр оҫталарының исемдәрен халыҡҡа танытты.

Оҙаҡ йылдар (үҙе әйтеүе буйынса - 1965 йылдарҙан) буйына Ватан һуғышында ҡатнашҡан яҡташтары тураһында йыйған материалдарын эшкәртеп, 2010 йылда Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арнап, Азамат ағай башҡа төбәктәрҙә лә үрнәк итеп алырлыҡ "Күңелдәрҙә яра төҙәлмәгән" исемле тарихи әһәмиәткә эйә китап яҙып сығарыуға иреште. Шулай уҡ "Шәһәрғәзе сәсән" китабы ла ҙур тарихи әһәмиәткә эйә. Шәһәрғәзе сәсән тере саҡта, уның менән яҡын аралашып, ауыл, ил, донъя хәлдәре тураһында әңгәмәләшеп йәшәгәнгә күрә, китапта килтерелгән күп материалдар автор тарафынан тарихи тоғролоҡта яҙылған.

Азамат Әғзәм улы һөйөклө ҡатыны, балаларының әсәһе Люциә Хәйбулла ҡыҙының яҡты иҫтәлегенә арнап, 2012 йылда "Оло юлда Юлыҡ" исемле китап яҙа. 2013 йылда Байым ауылына нигеҙ һалыусы, атаҡлы мәғрифәтсе Байым Динебәк тураһында "Байым ишан нәҫелдәре", үҙенең 75 йәшлек юбилейына арнап, ғаиләһе, туғандарының тормош юлы тураһында "Ғүмер ағыштары - ғаилә яҙмыштары" исемле китаптар баҫтырып сығара.

Ошо ҡыҫҡа арала донъя күргән ижади емештәре халыҡ араһында киң билдәлелек алыуына шатланып бөтә алмай, уҡыусылар, студенттар, китап уҡыусылар менән осрашып, уларҙың йәндәренә фәһемле орлоҡтар һалып, һуңғы көндәренә тиклем яңынан-яңы ижади пландар ҡороп, киләсәккә өмөтләнеп, дәртләнеп йәшәне Азамат ағай. Ул аҙаҡҡы көндәренә тиклем йәшәргә тырышты, иртәгәһе булыуына ышанды. Йәшәргә теләге лә, тормошҡа ашырыр маҡсаттары ла бар ине. Байтаҡтан бирле төрлө ваҡытта ижад эше менән булышҡан ауылдаштарының шиғырҙар китабын сығарыу теләге менән янды.

Халҡының лайыҡлы улы, үҙ иленең патриоты, арҙаҡлы уҡытыусы, атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Батыр Вәлид исемендәге премия лауреаты эшкә әрһеҙ, тормошта әүҙем, игелекле Азамат Әғзәм улы һәр ваҡыттағыса үҙенә хас мөләйем йөҙлө, алсаҡ күңелле кеше булып беҙҙең күңелдәрҙә һаҡланыр. Иншаллаһ.

**Урал МОСТАФИН,**
**Башҡортостан Яҙыусылар союзы ағзаһы.**
**Баймаҡ районы.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Эгоизмдың бәҫе

### Уҡымышлы эгоизм зарурлығы

Шәхси бәхетегеҙ һеҙҙең өсөн иң юғары әхлаҡи маҡсат булып тора икән, тимәк, йәшәү өсөн конструктив һәм әхлаҡи сәбәбегеҙ бар. Һәм нимә мөһим: әгәр һәр кем ошо маҡсатҡа эйә булһа, донъяла йәшәү яҡшыраҡ булыр ине! Мәғәнәһеҙлек, боҙолғанлыҡ, бәйлелек урынына беҙ ҡиммәттәр алмашыныуына нигеҙләнгән, бер кем бер кемде үҙен ҡорбан итеүен һорамаған сәләмәт, функциональ мөнәсәбәттәргә эйә булыр инек. Сәләмәт мөнәсәбәттәр тап шулай булдырыла һәм йәшәй.

Тағы бер фундаменталь ҡиммәт - айыҡ аҡыл менән йәшәү. Йәғни һәр нәмәне, һәр тормош күренешен һеҙҙең бәхет сығанағы булған әхлаҡи маҡсатығыҙға хеҙмәт итәме, юҡмы тигән күҙлектән сығып анализлау.

Кешеләр миңә шундай һорау бирә: "Инаныуҙарым уңышлы булыуыма ҡаршы килеүен нисек белергә?" Ғәмәлдә был бик ябай - үҙ-үҙеңә: "Был инаныу миңә файҙағамы?" - тигән һорау бирергә кәрәк. Ә уға яуап бирергә айыҡ аҡылығыҙ ярҙам итер. Хис-тойғолар яҡшы, улар тормошто тултырып һәм байыраҡ итеп, уның айырылғыһыҙ өлөшө булып тора. Әммә айыҡ аҡыллы һәм хис-тойғоларын ауыҙлыҡлай белгән кеше уларҙың нимәгә килтереүен белә. Аңығыҙ һәм хис-тойғоларығыҙ араһында низағ булырға тейеш түгел. Эйе, хис-тойғоларға бирелеп алырға кәрәк, әммә ҡәтғи ҡарарҙарҙы хис-тойғолар солғанышында ҡабул итмәгеҙ. Ниҙәр кисерәһегеҙ - кисерегеҙ, әммә үҙ-үҙегеҙҙән теге йәки был хистәрҙең нимә тыуҙырыуын һорашығыҙ, һуңынан үҙегеҙ өсөн яҡшы булғанса хәл итер өсөн аҡылығыҙҙы эшкә егегеҙ.

Хәл-торошто логик тамамланыуға еткереп, уның аҡыл тарафынан һынау үтә аламы, юҡмы икәнлеген ҡарағыҙ. Йәғни ахырынаса алып барып еткерелгән ҡайһы бер ғәмәлдәр һеҙҙе бәхетле итеренә инанығыҙ. Әгәр шулай түгел икән, былдай ғәмәлдәрегеҙ тормошоғоҙға кире йоғонто яһай.

Шулай итеп, беҙ өсөнсө фундаменталь ҡиммәткә - үҙ-үҙеңде ихтирам итеүгә килеп еттек.

Рухи сәләмәт кешеләр үҙҙәрен нисек бар шулай ҡабул итә һәм уңайлы тоя. Бынан тыш, улар өсөн эгоист булыу һәм тәү сиратта үҙ ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү норма һанала. Улар үҙҙәрен башҡалар хаҡына ҡорбан итеп бары тик үҙҙәрен кәмһетәсәктәрен һәм ахырҙа бер кемгә лә кәрәкмәгән булып ҡаласаҡтарын аңлай.

Бында беҙ күптәрҙе борсоған һорау менән осрашабыҙ: ә мөхәббәт һәм шәхси мөнәсәбәттәр менән нишләргә?

Һөйөү - ул үҙегеҙҙе ихтирам итеү һәм тәрән ҡиммәттәрегеҙ сағылышы. Ошо ҡиммәттәрегеҙҙе бүлешкән кешегә ғашиҡ булып, әгәр ул кешене ысынлап яратһағыҙ, ул һеҙҙең тормошоғоҙға бәхет килтерәсәк. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, һеҙ кешеләрҙе шәхси эгоистик сәбәптәр арҡаһында яратаһығыҙ! Ошо сәбәп буйынса түгел, ә икенсе төрлө яратһағыҙ, бер ниндәй ҙә мәғәнә булмаҫ ине. Әгәр бер сәбәпһеҙ яратһағыҙ һәм һөйөүегеҙҙән бер ниндәй ҡәнәғәтлек алмаһағыҙ, һеҙ ул кешене йәлләп кенә уның менән ниндәйҙер мөнәсәбәттә буласаҡһығыҙ. Был мөхәббәт түгел, был - ахмаҡлыҡ.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**

✓ *Әгәр устарығыҙ йылынмай һәм дымлы икән, ҡан тамырҙарығыҙҙа етди проблемалар бар. Был гормональ күнекмәләр тап ошо ҡан тамырҙарын дауалауға ла йүнәлтелә.*



*СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ*

**Мөғжизә кеүек күренер, әммә алты ай эсендә барлыҡ хроник ауырыуҙарығыҙ юҡҡа сығыр! Был һөҙөмтәле, әммә бик ябай, ни бары 4-5 минут ваҡыт талап иткән гимнастика Тибет монастырҙарының береһендә йөҙәр йылдар дауамында монахтар тарафынан киң ҡулланыла. Уның ярҙамында барлыҡ биҙҙәрегеҙ идеаль эшләр. Ә организмдың барлыҡ ҡартайыу процестары гормондар ярҙамында көйләнә икәнлеге барыбыҙға ла мәғлүм. Был гимнастиканы заманында "Комсомольская правда" гәзитендә Тибетта электр станцияһын төҙөүҙә ҡатнашҡан Советтар Союзы инженеры баҫтырып сығара. Монахтар был гормональ гимнастиканы уға ауылдарына электр үткәреү инициативаһы менән сыҡҡаны өсөн бүләк итә. "Түләргә аҡсабыҙ юҡ, әммә беҙ һиңә шундай бер нәмә өйрәтәбеҙ, уның ҡиммәтен 20 йылдан һуң аңларһың", - тиҙәр. Ысынлап та, был гимнастиканы даими эшләү бик күп хроник ауырыуҙарҙан азат итә, 25-30 йыл сәләмәт әүҙем ғүмер өҫтәй. Ауыр сирҙәрҙе бөтөрөү өсөн (мәҫәлән, ҡурылдай астмаһы) оҙайлы ваҡыт - 1- 1,5 йыл кәрәк.**

**Гимнастика бик ябай һәм уны нисә йәштә булыуыңа ҡарамай эшләргә мөмкин. Әммә иртәнге алтыға тиклем башҡарырға кәрәк. Нисек кенә булмаһын, уяныу менән көн һайын эшләргә. Ләкин йылы йомшаҡ түшәктә түгел, ә ҡаты урында - иҙәндәге балаҫта йәки ҡаты матраста (түшәктә лә эшләргә мөмкин, әгәр ятҡан урынығыҙ ҡаты булһа һәм эйелеп-бөгөлөп тормаһа). Гимнастиканы эшләгән ваҡытта бер ни ти тиклем ваҡыттан һуң тәнегеҙҙең теге йәки был урынында ауыртыныуҙар булыуы ихтимал. Әммә ҡурҡырға ярамай: хроник ауырыуҙар шулай сыға. Яҡынса ярты йылдан һуң, әгәр күнекмәләрҙе көн һайын эшләһәгеҙ, организмығыҙҙың барлыҡ хроник ауырыуҙары бөтөр. Эске торошоғоҙ ҙа: кешеләргә, донъяға, шулай уҡ тормош позицияғыҙға мөнәсәбәтегеҙ ҙә мөһим роль уйнай. Кем оптимистик көйләнештә һәм нығыраҡ ышана, һөҙөмтәләр ҙә оҙаҡ көттөрмәҫ.**

# КҮНЕГЕҮҘӘРМЕ?



## Улар сирҙе еңергә ярҙам итә!

**1-се күнегеү.** Арҡала ятабыҙ. Ҡулдарҙы өҫкә күтәреп, устарҙы берләштерәбеҙ. Устарҙы 6-10 тапҡыр ҡыҫҡа ғына итеп бер-береһенә ышҡыйбыҙ. Бер үк ваҡытта организмығыҙға диагностика ла үткәрергә мөмкин - әгәр ышҡығанда устар араһы ҡоро һәм эҫе икән, тимәк, барыһы ла яҡшы. Әгәр йылы, әммә усығыҙҙың аҫҡы өлөшөн эҫетә алмайһығыҙ һәм усығыҙ дымлы икән, был биоҡырығыҙҙың (биополе) ике тапҡырға кәмеүен күрһәтә. Тимәк, ҡан тамырҙарында проблемалар бар. Әгәр устарығыҙ йылынмай һәм дымлы икән, ҡан тамырҙарығыҙҙа етди проблемалар бар. Был гормональ күнекмәләр тап ошо ҡан тамырҙарын дауалауға ла йүнәлтелә. Устарығыҙ ниндәй генә булыуға ҡарамаҫтан, гимнастиканы дауам итергә кәрәк.

**2-се күнегеү.** Арҡала ятҡан килеш устарҙың эҫе урындарын ябыҡ күҙ алмаларына ҡуябыҙ. Әкрен генә күҙгә баҫабыҙ. Бер тапҡыр баҫып алыу - бер цикл, бер секунд. Барлығы 30 тапҡыр ҡабатларға, мотлаҡ 30-ға тиклем һанарға кәрәк. Әгәр күҙегеҙҙә проблема бар икән, усығыҙҙы алмайынса, тағы бер-ике минут еңелсә баҫып тороғоҙ. Был күнекмә күреү һәләтен тергеҙә һәм яҡшырта. Ошо ваҡытта күҙ алмаһының һәм барлыҡ рецепторҙарҙың энергетик туҡланыуы бара. Күреү һәләтегеҙ яйлап яҡшыра.

**3-сө күнегеү.** Арҡала ятыуҙы дауам итеп, устарҙы ҡолаҡтарға йүнәлтәбеҙ. Устарҙы ҡолаҡтарҙан айырмайынса баҫҡылайбыҙ. Был күнекмәне 30 тапҡыр (30 секунд) эшләргә һәм бында ла 30-ға тиклем һанарға кәрәк.

**4-се күнегеү.** Арҡала ятҡан килеш ҡулдарҙы бит алдында тотабыҙ. Бармаҡтарҙы йоҙроҡҡа төйнәйбеҙ, баш бармаҡ өҫкә ҡарап тора. Артабан баш бармаҡты ҡолаҡтан аҫҡа ҡолаҡ артына ҡуябыҙ һәм йоҙроҡто биткә терәйбеҙ. Бармаҡтарҙы биттән айырмайынса, ҡулдарҙы эйәккә тиклем төшөрәбеҙ һәм баш бармаҡ кире ҡолаҡ артына барып еткәнсе хәрәкәт итәбеҙ. Был бер циклды ала. Барлығы 30 циклды ҡабатлайбыҙ.

**5-се күнегеү.** Арҡала ятҡан килеш уң усты маңлайға һалабыҙ, ә һулын уның өҫтөнә һалып, бер аҙ баҫабыҙ. Устарҙы сикәнән сикәгә йөрөтәбеҙ. Уң яҡтан - һул яҡҡа, һул яҡтан - уң яҡҡа бер циклды тәшкил итә. 30 цикл эшләргә кәрәк.

**6-сы күнегеү.** Арҡала ятҡан килеш уң усты баш түбәһенә, баштан 4-5 сантиметр өҫтәрәк ҡуябыҙ. Һул ҡулдың усы менән уң ҡулды ҡаплайбыҙ. Ҡулдарҙан бындай "арка"ны баш өҫтөнән маңлайҙан - елкәгә, елкәнән маңлайға (1 цикл) табан йөрөтәбеҙ. Циклды 30 тапҡыр (30 секунд) ҡабатлайбыҙ.

**7-се күнегеү.** Арҡала ятҡан килеш уң ҡулдың усын баш түбәһе өҫтөнә 4-5 сантиметр өҫтәрәк ҡуябыҙ. Һул ҡулды уңының өҫтөнә һалабыҙ. Ҡулдарҙы баш өҫтөнән һул ҡолаҡтан - уңына, уңынан һулына (1 цикл) табан йөрөтәбеҙ. 30 секунд эсендә 30 циклды ҡабатлайбыҙ.

**8-се күнегеү.** Арҡала ятҡан килеш уң ҡулдың усын ҡалҡан биҙенә һалабыҙ, өҫтөнә һул ҡулдың усын ҡаплайбыҙ. Һул ҡулды тән буйлап ҡалҡан биҙенән кендеккә тиклем төшөрәбеҙ һәм ҡабат уң ҡул өҫтөнәсә күтәрәбеҙ (1 цикл). 29 тапҡыр шулай ҡабатлағас, 30-сы тапҡырға ике ҡул менән тәнде һыйпап, кендеккә тиклем төшәбеҙ.

**9-сы күнегеү.** Арҡала ятҡан килеш уң ҡулды эскә һалабыҙ, һул ҡул уның өҫтөндә ята. Эс буйлап сәғәт йөрөшө буйынса, саҡ ҡына эскә баҫыңҡырап, әйләнеш яһайбыҙ. Бер әйләнеш - бер цикл. 30 секундта 30 әйләнеш эшләйбеҙ.

**10-сы күнегеү.** Арҡала ятҡан килеш ҡулдарҙы өҫкә күтәрәбеҙ. Ҡул суҡтары менән 5-6 тапҡыр сәғәт йөрөшө буйынса, 5-6 тапҡыр сәғәт йөрөшөнә ҡаршы түңәрәктәр яһайбыҙ. Артабан ҡулдарҙы төшөрмәйенсә генә 4-5 секунд дауамында уларҙы еңелсә генә һелккеләйбеҙ.

**11-се күнегеү.** Арҡала ятҡан килеш аяҡтарҙы өҫкә күтәрәбеҙ. Шайтан ашығы (голеностопный) быуын менән сәғәт йөрөшө буйынса - 5-6, сәғәт йөрөшөнә ҡаршы 5-6 түңәрәк эшләйбеҙ. Артабан аяҡтарҙы төшөрмәйенсә генә уларҙы 4-5 секунд дауамында еңелсә һелккеләйбеҙ.

**12-се күнегеү.** Иҙәндә ултырған килеш аяҡ табандарын ыуабыҙ. Айырым да, бергә лә, бер аяҡ табанын ике ҡуллап ыуырға ла мөмкин - үҙегеҙгә нисек уңайлы. Әгәр табандарығыҙ ҡоро икән, үҫемлек майы һөртөргә була. Зәйтүн майы һөртһәгеҙ тағы ла яҡшыраҡ. Әгәр ыуған ваҡытта ауыртыу тойһағыҙ, был урынға ентекләп массаж эшләргә кәрәк.

**13-сө күнегеү.** Иҙәндә ултырған килеш сираҡтарҙы аҫтан өҫкә табан тышҡы яҡтан массаж-ыуыу-һыйпау алымдары менән еңелсә һыйпайбыҙ. Һуңынан сәғәт йөрөшө буйынса тубыҡтарға еңелсә массаж эшләйбеҙ. Артабан массаж-ыуыу-һыйпау хәрәкәте менән боттарҙы тыш яҡтан эс яҡҡа ҡарай һыйпайбыҙ. Күнегеүҙәрҙе эшләп бөткәндә организм тулыһынса уяна, унда көс артыуы, тотош тонус күтәрелеүе генә тойолоп ҡалмай, ниндәйҙер бала саҡтағы кеүек тормошҡа ҡыуаныу, яңы көнгә энергиялы әҙерлек һиҙелә. Гимнастиканан һуң йылы-эҫе һыу эсеү яҡшы: был лимфа системаһын әүҙемерәк эшләтеп ебәрергә һәм ашҡаҙан-эшкәртеү юлдарын йыуырға ярҙам итә.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Июль - Август (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, ақшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 27 (11) дүшәмбе | 3:48 | 5:18 | 13:30 | 19:55 | 21:25 | 22:55 |
| 28 (12) шишәмбе | 3:50 | 5:20 | 13:30 | 19:53 | 21:23 | 22:53 |
| 29 (13) шаршамбы | 3:52 | 5:22 | 13:30 | 19:51 | 21:21 | 22:51 |
| 30 (14) кесе йома | 3:53 | 5:23 | 13:30 | 19:49 | 21:19 | 22:49 |
| 31 (15) йома | 3:55 | 5:25 | 13:30 | 19:47 | 21:17 | 22:47 |
| 1 (16) шәмбе | 3:57 | 5:27 | 13:30 | 19:46 | 21:46 | 22:46 |
| 2 (17) йәкшәмбе | 3:59 | 5:29 | 13:30 | 19:44 | 21:14 | 22:44 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Июль айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Дүртөйлө районы** Исмаил ауылынан Ғәлиә Әйүпова, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Хәсән Юнысбаев, Төркмән ауылынан Илшат Ишморатов, Рифат Ишморатов, **Баймаҡ ҡалаһынан** Урал Вәлиев, **Хәйбулла районы** Әбүбәкер ауылынан Марат Мәмбәтов, Аҡъяр ауылынан Ырыҫбикә Аллағолова, Атингән ауылынан Банат Әхмәҙиева, Ергән ауылынан Рәйфә Рәхмәтова, **Ауырғазы районы** Толбазы ауылынан Ләлә Хәмиҙуллина, **Ғафури районы** Красноусольский ауылынан Фәниә Ишбулдина, Яугилде ауылынан Рауил Солтанморатов, Табын ауылынан Сажиҙә Янмурзина, Ташлы ауылынан Рәүфилә Ибраһимова, Еҙем Ҡаран ауылынан Гөлнур Мәкҫүтова, **Ишембай районы** Һайран ауылынан Ғәлимйән Яҡупов, **Дүртөйлө ҡалаһынан** Алина Шәйхисламова, **Белорет районы** Ҡаҙыш ауылынан Салауат Әбүталипов, Манышты ауылынан Рәшиҙә Байрамғәлина, **Көйөргәҙе районы** Көйөргәҙе ауылынан Нажиә Баҡыева, **Благовещен районы** Иҫке Илек ауылынан Идиә Шәйхетдинова, **Әлшәй районы** Яңы Сәпәш ауылынан Гөлсирә Хәкимова, **Стәрлетамаҡ районы** Рощинский ауылынан Айгөл Мерәҫова, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Эльза Рәхимова, Гүзәл Фазылова, Люциә Яхина, **Әбйәлил районы** Хәлил ауылынан Сәүйә Ғәбитова, Аҫҡар ауылынан Динә Суфиянова, Красная Башкирия ауылынан Рәйсә Аҫылғужина, Аҫҡар ауылынан Нәғимә Илһамова, **Йылайыр районы** Матрай ауылынан Розалиә Теүәлбаева, Йомағужа ауылынан Дания Искәндәрова, **Ейәнсура районы** Байдәүләт ауылынан Көнһылыу Ишемйәрова, Нәсимә Шәйәхмәтова, **Күгәрсен районы** Мораҡ ауылынан Зифа Баймәкова, **Өфө районы** Алексеевка ауылынан Зилә Рафиҡова, **Учалы ҡалаһынан** Венера Заһирова, **Октябрьский ҡалаһынан** Миҙхәт Шәрипов, **Өфө ҡалаһынан** Гөлсирә Хажмөхәмәтова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ. Ныҡлы һаулыҡ, бәхет, бөтөн изге уй-теләктәрегеҙҙең тормошҡа ашыуын теләйбеҙ. Дуҫлығыбыҙ тағы ла күп йылдарға һуҙылһын!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*БАҠСА!*



## ҺУҒАН ҠАСАН ӨЛГӨРӘ?

**Һуғандың өлгөрөп етеү мәле төрлөсә. Һауа торошона ҡарап, һуған уңышын йыйып алыу ваҡыты июлдән сентябрь башына тиклем һуҙылырға мөмкин.**

Һуған өлгөрөп етеүҙең төп билдәләре: йәш үҫентеләр барлыҡҡа килмәй, һуғандың йәшел өлөшө ергә ята башлай, һарғая, кибә, ә һуған төбө үҙенең сортының төҫөнә инә. Ошо мәлде үткәреп ебәрергә ярамай, юғиһә һуған тамыры яңынан үҫә һәм һуған ҡышын насар һаҡланасаҡ. Тәжрибәле баҡсасылар әйтеүенсә, һуғанды төндәр ныҡ һалҡынайтып, иртән мул ысыҡ төшә башлағансы йыйып алыу яҡшыраҡ. Йыуаһы менән бергә ерҙән ипләп кенә һурып алабыҙ һәм киптерер өсөн еләҫ урынға һалабыҙ. Түтәлдең өҫтөндә, ҡояш аҫтында киптереү шулай ҙа иң дөрөҫө буласаҡ. Әгәр ҙә көнгә ышаныс юҡ икән, был ысул менән ҡулланмаҫҡа ла була. Сөнки һуған ҡояшта 7-10 көн кибергә тейеш. Киптергән саҡта бөтөн файҙалы матдәләр йыуанан һуған төбөнә күсә. Һуңынан йыуаһын 3-4 см ҡалдырып ҡырҡабыҙ ҙа, тағы ла киптерәбеҙ, тик был юлы йылытылған урын булырға тейеш. 8-10 көн буйына һуғанды 25-30 градус йылыла тотаһың. Әгәр ҙә мөмкинлегегеҙ булһа, иң аҙаҡтан һуғанды 40 градус йылыла 10-12 сәғәт киптерергә. Был процедура һуғанда булған төрлө инфекцияларҙы "үлтерә", бындай юл менән кипкән һуған яҡшы һаҡлана.

АФАРИН!

# ҠЫҘҘАРЫБЫҘ...

## милли туй күлдәге кейһен!

**Башҡаларҙан айырылып торһон өсөн Хоҙай Тәғәлә һәр бер халыҡҡа тел, ғөрөф-ғәҙәттәр, йолалар, хатта кейем биргән, тиелә бер башҡорт риүәйәтендә. Ысынлап та, аңлы кешегә милли костюм - мөһим сығанаҡ, ул халҡыбыҙҙың матурлыкты нисек тәрән аңлауын сағылдырып тора. "Киске Өфө" гәзитендә милли кейемдәребеҙ менән таныштырыусы мәҡәләләр күп баҫыла. Юғары уҡыу йортонда ошо уҡ йүнәлештә студенттарға белем биргәс, мин уларҙың ҡиммәтен юғары баһалайым.**



Дәүерҙәр үҙгәреп торһа ла, башҡорт бер ҡасан да үҙ асылынан ситкә китмәгән. Беҙ бөгөн дә халҡыбыҙҙың сәнғәт элементтарын ҡулланабыҙ, йолаларыбыҙҙы тотоп йәшәйбеҙ, уларҙы балаларыбыҙға өйрәтәбеҙ. Һүҙ ҙә юҡ, бөгөнгө заманда милли сәнғәткә башҡа мәҙәниәттәрҙең йоғонтоһо иҫ киткес. Шулай ҙа яйлап этник үҙенсәлектәребеҙҙе күрһәтеп торған өҫ кейеменә өҫтөнлөк бирергә ынтылабыҙ, ҡулдан килгәнсә үҙебеҙ ҙә нимәләр эшләйбеҙ.

Этномәҙәни тәрбиә лә бөгөн иң көнүҙәк урынға ҡуйыла. БДУ-ның Сибай институтында, мәҫәлән, буласаҡ технология уҡытыусылары көнкүреш предметтарына, биҙәнеү әйберҙәренә яңы һулыш өрә, уларҙы яһарға өйрәнә. Матди мәҙәниәт тә кешенең рухи байлығын байыта, тип юҡҡа әйтмәйҙәр бит. Беҙҙең студенттар башҡорт тирмәһе нисек биҙәлергә тейешлеген, башҡорт ырыуҙарының һәр береһенең милли кейемен яҡшы белә. Халыҡтың тормошон, тарихын, көнкүрешен, телен, әҙәбиәтен, рухи ҡиммәттәрен өйрәнеүҙә быларҙың ярҙамы сикһеҙ.

Гәзит уҡыусыларҙы быйылғы сығарылыш студенты Әлфиә Вилдановаһың милли туй күлдәге өлгөһө менән таныштырғым килә. Этник стилдә тегелгән күлдәктә кейәүгә сыҡһын ине ҡыҙҙарыбыҙ, тигән теләктән дә сығып эшләйем быны. Баҙар тәҡдим иткән күлдәктән һис тә кәм булмаған күлдәк тегергә була бөгөнгө көндә. Шулай ҙа кәләштең төп сифаты тыйнаҡлыҡ икәнен күҙ уңында тотоп, уны артыҡ биҙәү кәрәкмәйҙер, моғайын. Күлдәк оҙон, биле тотолоп тегелде, был ҡыҙҙың нәфис көүҙәһен тағы ла матурлай. Еңдәре лә оҙон,ең ситенә юғары манжеттар тегелгән. Күлдәктең итәген шифон юбка тулыландыра, камзул шулай уҡ милли кейем элементы булып тора.

Бындай тантаналы сара өсөн күлдәкте атластан тегеү яҡшыраҡ. Ансамблде "алтын" таҫма һәм башҡорт биҙәктәре менән биҙәү ҙә уға тантана өҫтәй. Бындай күлдәктәге кәләш башҡорт ҡыҙҙарына хас йыйнаҡ, нәзәкәтле күренәсәк.

**Гүзәл ВӘЛИЕВА, педагогия фәндәре кандидаты, доцент. Сибай ҡалаһы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡулла. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИЛЛЕГӘ ЕТКӘС...

## ирҙәр ҙә ипкә килә

Кешене белгең килһә, ҡылығына ҡара; баланы белгең килһә, уйынына ҡара.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Был хат шул тиклем оҙон, сөнки уны ҡыҫҡараҡ итеп яҙырға ваҡытым булманы.

**(Блез Паскаль).**

Сенаторҙарға алдан әҙерләп ҡуйған ҡағыҙҙарҙан уҡып һөйләргә түгел, ә үҙ һүҙҙәре менән аңлатырға ҡушам. Һәр береһенең ахмаҡлығын күрер өсөн.

**(Петр I).**

Кешеләр араһында ла нөсхәләргә ҡарағанда күсермәләр күберәк.

**(Пабло Пикассо).**

Ҡояш байығанда күргән күләгәң буйынса үҙеңде хөкөм итмә.

**(Пифагор).**

Күпме эш, атҡарылғанға тиклем, бөтөнләй башҡарылмаҫ булып тойолғайны!

**(Плиний).**

Диагностика шул кәҙәре ҡаҙанышлы тар яуланы: сәләмәт кешеләр ҡалманы ла тиерлек.

**(Бертран Рассел).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ахмаҡҡа йөрөгән юлында ағып ятҡан шишмә һис кенә лә оҡшамай һәм ул һыу сығанағын юҡҡа сығарырға ҡарар итә. Тәүҙә ул инеште ер менән күмеп ҡуя, һыу барыбер һарҡып сығып ятҡас, өҫтөнә таш өйә. Һыу таштар араһынан селтерләп аға башлағас, ҙур бер тимер килтереп, сығанаҡты шуның менән ҡаплай. Һыу юҡҡа сыға. Шундай ҙур көстө еңеүенә шатланып, ахмаҡ үҙенә-үҙе байрам ойоштора. Шулай бер ҡайғыһыҙ күңел асып маташҡанында... ер аҫтынан ҙур фонтан бәреп сыға һәм ахмаҡты тау түбәненә ағыҙып алып китә. Ахмаҡ тәүҙә бер ни ҙә уйларға өлгөрмәй, һыуҙың ҡайнар икәнен дә һиҙмәй. Түбәнгә ағып килеп төшөп, тигеҙ урында яһалған күлдәй һыуҙа әйләнә торғас, һыуҙың бик ҡайнар икәнен, тәнен бешергәнен шәйләп ҡала.**

**- Ниңә һыу ҡайнап китте әле ул? - тип ҡысҡыра ахмаҡ, ауыртыуға сыҙай алмайынса.**

**- Сөнки һин күмеп ҡуйып, мине аҫҡа, ерҙең уянып килеүсе вулканына тиклем төшөргә мәжбүр иттең. Ә вулкан мине ҡайнатты ла, ҡайнар һыулы гейзер итеп өҫкә ырғытты, - тип яуаплай һыу. Ахмаҡ иһә уның артабанғы һүҙҙәрен ишетмәй...**

**Бөтөрөлөргә тейеш булмағанды бөтөрөргә ярамай шул. Пружинаны нисек кенә ҡыҫма, ул барыбер үҙ рәүешенә ҡайта һәм маңлайыңа тондора..."**

МӘҘӘНИӘТ ДОНЪЯҺЫНДА

# КИТАПТАР ФЕСТИВАЛЕ

**З. Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте "Рәсәй китаптары" Мәскәү фестиваленә сығыш яһаны. Фестивалдә бөтәһе 300, шул иҫәптән 100 төбәк нәшриәте ҡатнашты.**

Сарала ҡатнашыусылар үҙҙәренең иң яҡшы продукцияһын алып килгәйне. Улар художестволы, ғилми-популяр китаптар, дәреслектәр, балалар әҙәбиәте кеүек жанрҙары буйынса ғына түгел, ә формаһы менән дә айырылып торҙо. Әҙәбиәт йылының иң ҙур сараларының береһе булған был фестивалгә Рәсәй Президенты Владимир Путин да килде һәм төбәк нәшриәттәре эшмәкәрләре менән танышты.

"Китап" нәшриәте фестивалгә "Бөтөн донъя әкиәттәре" тигән яңы китап алып барҙы. Ул балалар өсөн тәғәйенләнгән һәм унда башҡорт, рус, ҡаҙаҡ, һинд һәм башҡа милләттәрҙең әкиәттәре тупланған. Әкиәттәр йыйынтығы республикала үткән БРИКС һәм ШОС саммиттарына арналған.

Китап яратыусылар Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған китаптарҙы ла ихлас ҡабул итте. Шулай уҡ тыуған яҡтың тәбиғәтенә арналған баҫмалар, проза әҫәрҙәре, балалар өсөн китаптар ҙур һорау менән файҙаланды. Фестивалдә нәшриәт Мостай Кәримдең "Беҙҙең өйҙәң йәме" китабы өсөн "Балалар һәм үсмерҙәр өсөн иң яҡшы китап" номинацияһында диплом менән бүләкләнде.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте "Башҡортса дини календарь"ҙың 2016 йылға тәғәйенләнгән яңы баҫмаһын тәҡдим итә.




Уның авторҙары - Сәләхетдин Хөсәйен улы Суҡбаев, Ғәлиә Ғәлим ҡыҙы Ғәлимова, Фирҙәүсә Миннулла ҡыҙы Бикташева менән Әлфиә Йәғәфәр ҡыҙы Илекәева. Был баҫмалағы аят, доға һәм сүрәләрҙең ғәрәпсә яҙылышы, транскрипцияһы, дини даталар Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты рәйесе, мөфтөй Нурмөхәммәт хәҙрәт Ниғмәтулла тарафынан әҙерләнгән.

"Башҡортса дини календарь"ҙа ислам тәғлимәте, мосолман байрамдары, ай һәм ҡояшҡа бәйле астрономик мәғлүмәттәр, намаҙ уҡыу ваҡыттары бирелгән, мосолман ай иҫәбе күрһәтелгән. Баҫма халҡыбыҙҙы Исламдың әхлаҡи ҡиммәттәре, дин хөкөмдәре, иман нигеҙҙәре, йолалар һәм ғөрөф-ғәҙәттәр менән таныштырыу маҡсаты менән әҙерләнә.10 мең дана тираж менән донъя күргән календарҙы нәшриәттең фирма магазиндарында һатып алырға мөмкин.

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# ГӘЙҘҮКӘТ КЕМ?

**Күҙ-ҡара булыу, ҡолаҡ һалыу** - ҡараштырып тороу, тикшереү

**Тел сарлау** - бушҡа хәбәр һатыу

**Теш ҡайрау** - асыуланыу, үс алырға ниәтләнеү

**Теш ҡыҫыу** - ниндәй хәлгә лә түҙеү

**Тешкә ҡыҫтырыр нәмә юҡ** - үтә фәҡир, ас

**Ҡаҡһыған** - боҙолған, әсегән аҙыҡ

**Әтмәлләгән** - белгәненсә эшләгән

**Ул белмәгән аҙ, бохарҙағы таҙ** - күпте белеүсе

**Йөрөй урам көйәнләп** - буштанбуш хәбәр һатып өйсөләй

**Лорҡолдаҡ** - үтә һимеҙ, йыуан кеше

**Күҙенә йоҡо төйөлгән** - нык йоҡоһо килгән

**Һырпалана** - эргәнән китмәй урала

**Тумырайған, тумһайған** - йөҙө боҙолған, үсеккән

**Төңөләү** - өмөт өҙөү, онотоу

**Кин күтән** - үтә маҡтансыҡ, ауыҙында - һүҙ, ҡулында мал тормай, шапырына ғына

**Теше һирәк, ауыҙы ел ҡапҡа** - әсендә сер, ауыҙында һүҙ ятмай

**Гәйҙүкәт** - иленән ситтә оҙаҡ йөрөүсе

**Болоҡһоу** - уйға батыу, хәсрәтләнеү

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририят:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 24 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 3370